ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

5-11 апрель (алағарай) 2024

№13 (1106)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Хазина һандығын кем асыр,**

йәки Телдәребеҙ ни һөйләй, ерҙәштәр?




8-9

**Апа - атайҙан оло ир заты,**

йәки Әлеге лә баяғы диалекттар хаҡында



10

**Бәхете...**

үҙе менән бергә тыуған



12

**Игелекле булыу кәрәк...**



15

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Арзанға яҙылып ҡал!* 08 апрелдән 18 апрелгә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2024 йылдың икенсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 786 һум 24 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә матур ғына китаптарға лайыҡ буласағын да онотмағыҙ.

МӨХӘРРИРИӘТ.

АФАРИН!

Туған телем!

# КҮҢЕЛ ҺАЛЫП УҠЫТҠАНДАР...

## был бәйгелә еңеү яуланы




**Ошо көндәрҙә баш ҡаланың "Башҡортостан" Дәүләт концерт залында йылдың иң күркәм сараларының береһе - уҡытыусыларҙың һөнәри конкурстарына йомғаҡ яһау тантанаһы үтте. Һәр яҙ һайын ҡабатланып тороуға ҡарамаҫтан, был сара байрамса күтәренке кәйеф, һөҙөмтәләрҙе көтөп тулҡынланыу, гөлләмәләргә күмелгән уҡытыусыларҙың шат йылмайыуы менән гел дә арбай. Был юлы ла тап шулай булды. Тантанала педагогтарҙың алты конкурсы буйынса еңеүселәрҙе тәбрикләнеләр.**

(Дауамы 7-се биттә).

КӨН ТЕМАҺЫ




# ХӘҮЕФТӘН АРАЛАУ ӨСӨН...

## балаң менән нисек һөйләшергә?

**"Крокус Сити Холл" концерт залында булған ваҡиға ғүмерҙең ҡылдан ла нескә булыуын тағы ла бер тапҡыр хәтерҙәребеҙгә төшөрҙө. Концерт залы, атыш тауыштары, бер ғәйепһеҙ кешеләрҙең үлеме - беренсеһе булмаһа ла, кеше аңы шулай ҡоролған: ул быңдай хәлдәрҙе тиҙерәк онорторға, был хаҡта уйламаҫҡа тырыша. Шул уҡ ваҡытта, үҙеңдән дә бигерәк, балаңды ошо хәтәрҙән нисек араларға һуң, тигән уйҙар ошо арала һәр әсәй һәм атай кешенең башынан йөҙәр тапҡыр үткәндер. Ғөмүмән, балалар менән был турала һөйләшергәме? Әйе икән, ниндәй юҫыҡта? Ошо һорауҙарға Өфө ҡалаһының "Үҫеш" психологик-педагогик, медицина һәм социаль ярҙам үҙәге директоры, психолог Гүзәл ФӘЙЕЗОВА яуап бирә.**

(Дауамы 2-се биттә).

БАШҠОРТОСТАНЫМ!

# ҮҘ ҠАҘАНЫБЫҘҘА ҠАЙНАМАЙБЫҘ



**Беҙҙең республика Рәсәй составындағы төбәктәр араһында иң алдынғылар рәтендә. Бер яҡтан, уникаль тәбиғи байлыҡтары менән данлыҡлы булһа, икенсенән, төрлө милләт вәкилдәренең берҙәм һәм татыу йәшәүе, һәр этносҡа ла үҙ телен, мәҙәниәтен һаҡлап ҡалырға мөмкинлектәр биреләүе менән дә үҙенсәлекле беҙҙең Башҡортостан.**

Республикала һәр кемгә шәхси үҫеш өсөн ҙур мөмкинлектәр бар. Мин эшемә бәйле төрлө ҡалаларҙа оҙайлы ваҡыт йәшәнем, шуға күрә сағыштырып ҡарай алам. Башҡортостан үҙгәрә, үҫешә, алға бара. Ләкин был үҫеш, минә ҡалһа, тиҙерәк барһа, йылдамыраҡ булһа, тағы ла нығыраҡ шатландырыр ине. Был, бәлки, урындағы халыҡтың менталитетына ла бәйлелер. Төбәктә йәшәүселәр төплө уйлап эш итеүсән, еңел-елпе ҡыланмайҙар. Был, үҙ йәһәтендә, йәшәү рәүешенең бөтә өлкәләрендә лә сағылыш таба.

Һуңғы ваҡытта туризм нык үҫешә республикала. Үҙем сәйәхәт итергә яратҡан кеше буларак шуны әйткем килә: үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнап йәшәгән төбәктәр рәтендә булмауыбыҙ һөйөндөрә. Туризмдың үҫеше төбәк иҡтисадына ла ыңғай йоғонто яһамай ҡалмай. Мәҫәлән, яңыраҡ ҡына Башҡортостандың Бөрө һәм Благовещен ҡалалары туризм өлкәһендәге мәртәбәле премияға лайыҡ булды. Ил кимәлендәге премиялар буш урында таратылмай, тимәк, беҙҙең төбәктең был йәһәттән киләсәге ҙур.

"Һаулыҡ - ҙур байлыҡ". Был һүҙҙәр менән килешмәү мөмкин түгел. Республика халҡына медицина ярҙамы алыу бөтә яҡтан да уңайлы булырға тейеш. Һәм был йәһәттән Башҡортостан етәкселеге ҙур эштәр башҡара: йәш белгестәрҙе күтәрмәләп тора, фельдшер-акушер пункттары асыла, дауаханаларҙа заманса ҡоролмалар ҡуйыла һәм башҡалар. Халыҡ та үҙ һаулығына битараф булмаһа ине, тип теләргә генә ҡала. "Асылды", "эшләй башланы" тигән һүҙҙәр артында күпме тырышлыҡ, хеҙмәт һалынғанлығын һәр кем аңлап торалыр, моғайын.

Республикала эшләй башлаған "Башҡортостан вахтаһы" проектын бик хуплап ҡаршы алдым. Өфөләге ҙур предприятиеларҙың егеттәргә вахта менән эшләргә мөмкинлек биреүе ҙур хуплауға лайыҡ. Был проектҡа Өфөнөң генә түгел, ә республиканың башҡа ҡалаларында эшләгән ойошмалары ла ҡушылыр, тип өмөт итәм. Ер аяғы, ер башы ерҙә, Себер тарафтарында йөрөгәнсе, үҙебеҙҙең республикала эшләп йөрөүе йөҙ тапҡыр артыҡ бит.

**Арыҫлан ИҪӘНҒӘЛИН.**
**Туймазы районы.**

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ЯРҺЫУЛЫҠ...

## хәйерлегә булмай

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

***Морат ЛОҠМАНОВ, тележурналист, "Йома" тапшырыуы авторы, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы:*** Аҡыллы кешеләрҙең, зыялыларҙың һүҙен ишетер өсөн халыҡтың тыныс булыуы шарт. Шуға инанғанмын: ярһыулыҡ бер ҡасан да яҡшыға килтермәй. Дини яҡтан ҡарағанда ла, айыҡ аҡыл менән уйлағанда ла, ғаиләләме, сәйәсәттәме, йәмғиәттәме - ҡыҙған баштан ҡарар ҡабул итеү хәйерлегә булмай. Шуға күрә, ҡыҙған кешенең фекерен тыңлап, тағы ла нимәләр өҫтәп йөрөү - ул утҡа утын өҫтәгән һымаҡ, тағы ла ҡыҙҙырыуға ғына килтерә. Беҙҙең милләттә хис-тойғоға бирелеп барыу, ҡыҙыулыҡ тигән нәмә бар ул, тибеҙ, әммә был осраҡта башҡараҡ ҡыҙыулыҡты күҙ уңында тотабыҙ, ул яҡшылыҡ, именлек хаҡына фиҙакәрлек. Бөгөнгө йәмғиәттә йыш күҙәтелгән ҡыҙыулыҡ иһә ул именлек хаҡына эшләнмәй. Әгәр ҙә кеше диндән алыҫлашһа, ҡыҙыуға тиҙерәк бирешә, был бөтөн халыҡтарға ла хас.

Тормош ҡанундарҙан тора, әйтәйек, һыуҙың формулаһы бар, унда төүге элементҡа икенсеһен ҡушҡанда ғына һыу килеп сыға. Шуның шикелле, бөтөн нәмә лә ҡанундарға ҡоролған һәм "дөрөҫлөк" тигән ваҡытта ла һәр кемдең үҙ дөрөҫлөгө. Хатта ғаиләлә лә бәхәс сыҡты икән, һин ирҙе тыңла, ул 100 процентҡа дөрөҫтө һөйләй, ҡатынды тыңла, ул да хаҡлы. Тимәк, һәр бер кешенең, халыҡтың, йәмғиәттең үҙ дөрөҫлөгө һәм ул дөрөҫлөктәр уларҙың һәр береһенең күҙлегенән иң дөрөҫө булып күренә. Берәү ҙә үҙен хаҡлы түгел тип һанамаясаҡ һәм һәр ваҡыт башҡа дөрөҫлөктәргә ҡаршы торасаҡ. Быны туҡтатыу өсөн нимә кәрәк? Шул урталыҡта Аллаһы Тәғәләнең биргән дине. Әгәр динде дөрөҫ итеп аңлап ҡараһаң, ул шул бөтәһенә лә яраған дөрөҫлөктө күрһәтә. Шуға ғаиләлә ығы-зығы сыҡһа ла, иманлы кеше ошо дөрөҫлөккә ҡарап, тыныслана ла, һуңынан үҙенең хатаһына тәүбә итә йәки ғәфү үтенеп, уртаҡ тел таба.

Милләткә бәйләме ул, башҡа нәмәгәме - ниндәйҙер ваҡиға, мәғлүмәт һине ҡыҙҙыра, сығырыңдан сығара икән, был - шайтандан. Ул дуҫ рәүешендә килһә лә, һине аҙаҡтан һәләк итеү маҡсаты менән килә, был үҙгәрмәй торған ҡанун, шуға ла дошманға, шайтанға юл ҡуймайбыҙ. Иманы ныҡлы, ғилеме булған кеше ошоно аңларға тейеш. Шуға күрә был осраҡта дөрөҫлөк эҙләмәйбеҙ, ҡыҫҡырышҡан ерҙән китәбеҙ, сөнки унда беҙгә юлдаш юҡ. Аҙаҡтан: "Эй, һин, шул-шул мәлдә милләтте күтәрмәнең",- тип әйтерҙәр, әммә ул ерҙә хәҡиҡәт тә, киләсәк тә юҡ.

Дауыл, ғәрәсәт сығып торғанда һин ергә ниндәй генә яҡшы орлоҡ һипһәң дә, ул тупраҡҡа төшөп етмәй, ел осороп алып китеп тик тора. Күңелдәрҙә дауыл ҡоторған ваҡытта аҡыллы һүҙ барып етмәй, күңелдәр, иң тәүҙә, тынысланырға тейеш. Тынысланмай икән, ниндәйҙер бер көс киләсәк - был да хәҡиҡәт, тарихтан ҡараһаҡ та, бөтөн күҙлектән күҙәтһәк тә шулай. Ниндәйҙер көс уны барыбер туҡтатасаҡ, тик был көс емергес сифатҡа эйә буласаҡ. "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" әҫәрендә Мостай Кәрим дә әйтә бит, һинең урыҫса белеүең генә етмәй, һинең урыҫсаңды аңлай торған урыҫтарҙың да булыуы кәрәк икән. Шуға күрә, ҡыҙған кеше алдында әлләй ниндәй аҡыл эйәһе бул, улар һине ишетмәйәсәк. Ҡыҙған кеше - аҡылынан сыҡҡан кеше була. Ул ниндәй генә ғәҙеллек өсөн тырышмаһын, был осраҡта файҙаһынан зыяны күберәк була.

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

КӨН ТЕМАҺЫ

# ХӘҮЕФТӘН АРАЛАУ ӨСӨН...

## балаң менән нисек һөйләшергә?



(Башы 1-се биттә).

- Хатта йәнлек тә үҙенең балаһын хәүефтән ҡурсаларға ынтыла. Был тәбиғи инстинкт кешенең дә аҫҡы аңында һаҡлана. Ҡот осҡос был вәхшилектән һуң социаль селтәрҙәрҙә яҡындарыбыҙға иғтибарлыраҡ булайыҡ тигәнерәк саҡырыуҙар күбәйҙе. Кеше ошондай хәлдәрҙән һуң тормоштоң ҡурҡыныс яҡтары ла булыуын, ҡайһы бер ваҡиғаларҙы алдан күҙаллай алмауын, ҡолай ҡалһа, ауыртынмаһын, тип, балаға ла бер туҡтауһыҙ "һалам түшәп" булмағанын аңлай. Етмәһә, беҙ мәғлүмәт тиҙ таралған мәлдә йәшәйбеҙ. Ваҡиғалар урынынан видеолар бер туҡтауһыҙ сығып тора, шунда кешенең аңына барып етә лә инде - был кино ла, реалити-шоу ҙа түгел, ә ысынбарлыҡ һәм уны нисек тә ҡабул итергә кәрәк.

"Мин балама трагедия хаҡында һөйләй алмайым", тигән әсәйҙәрҙе лә аңларға була, әлбиттә. Әммә бөгөнгө цифрлы донъяның үҙ ҡанундары - ҡулына телефон эләккән һәр кеше был хаҡта беләсәк, "ҡарама" тип балағыҙҙы тыя алмаясаҡһығыҙ. Шуға ла өйҙә уның менән был хаҡта үҙегеҙ һөйләшһәгеҙ, яҡшыраҡ буласаҡ, тигән фекерҙәмен. Нимә ул теракт, ни өсөн шулай килеп сыҡҡанын да аңлатығыҙ. Бала бәләкәй икән, шундай-шундай хәл булған, быға беҙҙең илгә башҡа илдәрҙең йоғонтоһо, тип ҡарарға кәрәклеген, сәйәси хәлдең нимә икәненән төшөндөрөгөҙ. Ғөмүмән, ул

БЫНАҒАЙЫШ!

# "ГАЗ БИРЕУҘЕ ТУҠТАТАБЫҘ!"



**"Кисекмәҫтән плитәгеҙҙе алмаштырығыҙ, юғиһә, фатирығыҙға газ биреүҙе туҡтатабыҙ!" Ҡулланылған газ яғыулығы өсөн түләү ҡағыҙына ат башындай эре хәрефтәр менән ике-өс ай инде ошондай кисәтеү ала башланым. Йоҡо ла, ҡот та осто, ашау аш түгел: иртән тороп сәйнүк ҡайнатырға ҡуйған һайын, "Туҡтатманылармы әле?" тип ҡурҡа-ҡурҡа ғына сәғәт кеүек эшләп торған, туҙан ҡундырмай таҙартып-һөртөп кенә файҙаланған плитәмдә ҡабыҙам. Ярай, бөгөнгә бар, ә иртәгә ни булыр, тигән һорау күңел төбөнә юшҡын булып ултырҙы.**

Уйынмы ни пенсионерға: кәмендә 30-40 мең һумлыҡ плитә һатып алыу өсөн ҡайҙан аҡса табырға? Пенсия аҡсаһын торлаҡ-коммуналь хужалыҡтың булыр-булмаҫ хеҙмәттәренә түләү йотоп ҡына тора, ҡалғанын киләһе пенсияға тиклем икмәк-һөткә тартып-һуҙырға тура килә, өҫтәүенә, дарыу хаҡтары ла биш тапҡырға тиклем артты. Ә бит Германия-Польша фирмаһы эшләп сығарған плитәнең, быйыл тикшереү үткәреп киткән техник хеҙмәтләндереүсе мастер әйтеүенсә, әле тағы ун биш йыллап хеҙмәт итерлек "ғүмере" бар икән. Ишетеүемсә, күршемдең ай-вайына ҡуймай, 20 йылдан артыҡ тотонған плитәһен алыштырырға мәжбүр иткәндәр һәм газ участкаһының үҙендә һатыуға ҡуйылған 17 меңлек сағыштырмаса арзан плитә килтереп ҡуйғандар. Арзан булыуы яҡшы ла ул, тик быҡна, абонент участкаһында әйтеүҙәренсә, уларҙың файҙаланыу ваҡыты ла кәмерәк икән шул...

Мин дә "Кисекмәҫтән плитәгеҙҙе алмаштырығыҙ, юғиһә, фатирығыҙға газ биреүҙе туҡтатабыҙ!" тигән хәбәрҙе ала торғас, арып, "Газпром төбәк-ара Өфө газ" яуаплылығы сикләнгән ойошмаға шылтыратып, плитәгә техник диагностика үткәреүсе метролог-инженер саҡыртырға булдым. Әлеге әйтеүемсә, "сәғәт шикелле" эшләп торған плитәне тикшереп, метролог унан бер ниндәй ҙә гәйеп тапманы һәм биш йылға плитәнең эш срогын оҙайтырға рөхсәт яҙҙы. Аҙаҡтан асыҡлауымса, бөтөн ил буйынса ығы-зығы тыуҙырған мәсьәлә булып сыҡты был. Әлбиттә, газға ҡағылышлы мәсьәләнең үтә етди проблема булыуы бер кемдә лә шик тыуҙырмай, газ приборҙары шартлауы арҡаһында күпме янғын сыҡты, йорттар емерелде, Хоҙай һаҡлаһын! ГОСТ һәм етештереүсе күрһәтмәһе буйынса плитәләрҙең яраҡлылыҡ ваҡыты 10 -20 йыл, ләкин плитә яҡшы һәм хәүефһеҙ эшләгән осраҡта уға диагностика үткәрелә һәм артабан файҙаланыу-файҙаланмау мәсьәләһе хәл ителә. Был йәһәттән бер ниндәй дәғүәләр, ҡаршылашыуҙарҙың булыуы мөмкин түгел, ләкин бына ошондай ығы-зығынан оҫта ғына файҙаланыусылар ҙа бар икән.

Мәҫәлән, быйыл ҡала йорттары буйлап "Газпром төбәк-ара Өфөгаз" системаһына ҡарамаған төрҙәш ойошманан килеп, кәрәкмәгән хәлдә лә, газ иҫәп-хисап приборы менән шлангыларҙы алмаштырырға мәжбүр итеп, халыҡтан аҡса һыпырып йөрөүсе "эшем эйәләре" асыҡланды. Әлеге көндә почта йәшниктәре "Горгаз-Сети" ойошмаһынан газ ҡорамалдарын диагностикалау өсөн мисәтһеҙ-ниһеҙ фатир номерҙары һуғылып, ташҡа баҫылған ялған иҫәп ҡағыҙҙары менән тулды. "Түләргә йәмғеһе - 780 һум" тип башҡарылмаған эшкә түләү һалынған, ә бит беҙ был ойошма менән килешеү төҙөмәгән, беҙҙе махсус килешеү нигеҙендә "Газпром төбәк-ара Өфөгаз" ойошмаһы хеҙмәтләндерә.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәйҙә махсус хәрби операцияла һәләк булған яугирҙарҙың тол ҡатындарын эштән бушатыу тыйыла. Өөнсө уҡыуҙа Дәүләт Думаһы депутаттары Рәсәйҙең Хеҙмәт кодексына үҙгәрештәрҙе хупланы."Закон эш биреүсенең башланғысы менән хәрби хеҙмәткәрҙәр ветерандарының тол ҡатындарын ире һәләк булғандан һуң бер йыл дауамында эштән бушатыуҙы тыйҙы. Әгәр ҡатын-ҡыҙ ҡабаттан кейәүгә сыҡһа йәки бер нисә тапҡыр хеҙмәт дисциплинаһын тупаҫ боҙоуға юл ҡуйһа, әлеге закон уға ҡағылмай", - тип билдәләгәйне Дәүләт Думаһы спикеры Вячеслав Володин.

✓Өфөлә билдәһеҙҙәр, килеп тыуған хәлдән файҙаланып, юғалған балаларҙы эҙләгән ирекмәндәр өсөн аҡса йыйыу тураһында иғлан иткән. 2 апрелдә "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "ЛизаАлерт" төркөмөндә ошо турала иҫкәрттеләр. "ЛизаАлерт" эҙләү-ҡотҡарыу отряды эҙләү эштәре өсөн аҡса йыймай! Шундай мәғлүмәткә тап булһағыҙ, эҙләү информацияһына хәбәр итегеҙ һәм мутлашыусыларҙың иҫәбенә аҡса күсермәгеҙ", - тиелә рәсми хәбәрҙә. Хәбәр ителеүенсә, республикала дүртенсе тәүлек 30 мартта юғалған 13 йәшлек Павел Паличев менән 14 йәшлек Дамир Әҙеһәмовты эҙләйҙәр.

✓Татарстанда пилотһыҙ осоу аппараттары "Алабуға" махсус иҡтисади зонаһы территорияһына, республиканың Алабуға һәм Түбәнге Кама предприятиеларына һөжүм иткән. "Етди емереклектәр юҡ, предприятиеларҙың технологик процесы боҙолмаған. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Алабуғала бинаның емерелеүе һөҙөмтәһендә зыян күреүселәр бар", - тиелә Татарстан Рәйесенең матбуғат хеҙмәте хәбәрендә. Ике кешенең яраланыуы тураһында билдәле.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың хәрби хеҙмәткә саҡырыу комиссиялары составы тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Документ рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған. Башҡортостан етәксеһе указында республиканың хеҙмәткә саҡырыу комиссияһының, ҡала һәм райондарҙың саҡырыу комиссияларының төп һәм резерв составы, хәрби иҫәпкә ҡуйғанда, хәрби хеҙмәткә саҡырғанда йәки контракт буйынса хәрби хеҙмәткә ҡабул ителгәндә медицина тикшереүе үткәрергә тейешле ойошмалар исемлеге раҫланды.

✔ *Бөгөнгө балалар, йәштәр башҡаларҙың ҡайғыһына ҡайғыра белмәй, тигән фекер ҙә бар. Мин улай уйламайым. Һәр кешелә бындай тойғо бар. Тик бында ла күп нәмә ата-әсәнән тора.*



"беҙҙең ил", "беҙҙең ил түгел", "минең илем", "минең ҡалам", "минең ғаиләм" һ.б. тигән әйберҙәрҙе дөрөҫ итеп аңларға тейеш.

Әгәр бала ҙур икән, был мәғлүмәти һөжүм һәм был вәхшилекте башҡарған кешеләр ошо һөжүмдең ҡорбаны булыуы, йәғни, сит кешеләрҙең уларҙың аңы менән идара итеүенә бирелеүе хаҡында һөйләшегеҙ. Бындай әңгәмәләр мәктәптәрҙә лә алып барыла, ата-әсәләр ҙә өйҙә шымып ҡалырға тейеш түгел. "Бер нәмә лә булмаған" тигән позицияла ҡалыу баланы, киреһенсә, хәүеф аҫтына ҡуйыуы ихтимал.

Һуңғы көндәрҙә, үкенескә күрә, төрлө каналдар аша тап үҫмерҙәргә йүнәлтелгән мәғлүмәти һөжүмдә күҙәтергә мәжбүрбеҙ. Ни өсөн бындай һөжүмдәр балалар, үҫмерҙәр, йәштәргә йүнәлтелә, был хаҡта ла асыҡтан-асыҡ аңлатығыҙ.

Бөгөнгө балалар, йәштәр башҡаларҙың ҡайғыһына ҡайғыра белмәй, тигән фекер ҙә бар. Мин улай уйламайым. Һәр кешелә бындай тойғо бар. Тик бында ла күп нәмә ата-әсәнән тора. Бала ғаиләлә ҡаллы үҫешә алмай, ул ата-әсәһенең ҡылыҡтарын тулыһынса ҡабатлай. Башҡалар өсөн ҡайғыра белеү, хис-тойғо булһа ла, шулай уҡ әсәй һәм атайҙың ошо хәлдә үҙен нисек тотоуынан тора, тип аңларға кәрәк.

Хәҙер баланың аңын үҫтереү тураһында күп һөйләйҙәр. Әммә ул эмоциональ яҡтан дөрөҫ үҫешһен, нимә кисергәнен күрһәтә белһен өсөн ата-әсә бала менән дөрөҫ аралашырға тейеш. Баланың эмоцияларын тыйыу яңылыш, ул уларҙың ынғайын да, киреләрен дә кисерергә, уларҙы танырға һәм уларҙан ояламаҫҡа тейеш. Шул саҡта ул кешелеккә лә, унда булған хәлдәргә лә битараф булып үҫмәйәсәк.

Әлеге осраҡҡа килгәндә инде... Мәҫәлән, баш ҡалала теракт ҡорбандарын иҫкә алыу өсөн стихиялы мемориал барлыҡҡа килде, шунда барып сәскә һалыу ҙа тәрбиәүи эш. Ғөмүмән, был трагедия аша кеше үҙе өсөн был тормошта нимә мөһимерәк булыуын ҡабаттан төшөнгәндер. Менәрләгән кеше ауыр яралыларҙы ҡотҡарыу маҡсатынан ҡан тапшырҙы. Ваҡиға урынына уйынсыҡтар һәм сәскәләр алып барҙы. Бөтөн донъя халҡы ҡайғы уртаҡлашты. Шуға ла өйҙә кешеләрҙең үлеме тураһында һөйләргә теләмәһәгеҙ, ошо мәрхәмәт өлгөләре тураһында һөйләгеҙ. Был үҙе үк оло һабаҡ.

**Ләйсән ВӘЛИЕВА**
**яҙып алды.**

Бер яҡтан, газ ойошмалары араһында барған бындай көнәркәшлек, халыҡтан нисек тә булһа күберәк аҡса һурыу ниәте аңлашыла: уларға ла бит ашарға кәрәк. Үткән йылғы отчеты буйынса, Рәсәй "Газпром" концерны етди проблемалар арҡаһында зыянға эшләргә мәжбүр булды. Бындай хәлдә ябай граждандарға газға түләүҙә тарифтарҙың артыуын көтөргә генә ҡала. Европаға экспорттың кәмеүен, әлбиттә, зәңгәр яғыулыҡты Ҡытайға һата башлау бер ни тиклем ҡаплайҡаплауын, ләкин бынан һуң илдең физик ҡулланыусыларына әллә ни еңеллек һиҙелмәй, киреһенсә, быйыл 1 июлдән граждандар өсөн зәңгәр яғыулыҡҡа хаҡ - 20 процентҡа, ә Башҡортостан буйынса 11,2 процентҡа артасаҡ. Шулай итеп, плитә, шланг, газ иҫәпләү приборҙарына түләүҙәр менән баш ҡатырыу етмәгән, беҙ хәҙер ҡеүәтле "Газпром" бюджетын "ямауҙа" ла тура-нан-тура ҡатнашасаҡбыҙ икән.

Ҡыҙыҡ, шулай булыуға ҡарамаҫтан, концерн менеджерҙары илдә иң юғары - миллионлаған һум эш хаҡы алыусылар булып ҡала, уларҙың эш хаҡына газ көрсөгө эҙемтәләре янамай. Ярай, газ мәсьәләһе - бер хәл, ул әлегә әллә ни ҡиммәт тә түгел, тик коммуналь хеҙмәттәргә түләү бының менән генә сикләнмәй. Илдең торлаҡ-коммуналь хужалығы көрсөккә батты, ул үҙ бурыстарын атҡара алмай башланы, аҡса юҡ, кадрҙар юҡ. Быйылғы ҡарлы ҡыш тап торлаҡ идаралыҡтарының булдыҡһыҙлығын, бөлгөнлөгән асыҡ күрһәтте лә инде. Ләкин эш ҡар таҙартыу менән генә бөтмәй бит. Ташландыҡ хәлдә тороп ҡалған йорттар бар: канализация системаһы эштән сыҡҡан, көн аша авария булып тора; подъездарҙа бысраҡ, йыйыштырылмай, яҙлы-көҙлө түбәнән һыу аға, лифт йыш боҙола һәм башҡалар. Мәҫәлән, ошондай сәбәптәр арҡаһында беҙҙең йорттар торлаҡ идаралыҡтарынан баш тарта һәм коммерция нигеҙендә эшләүсе идарасы компанияға күсергә ҡарар итә башланы, тик бының нимә күрһәтерен берәү ҙә белмәй, сөнки ҡайһы бер идарасы компанияларҙың эше нигеҙҙә йорт хужаларынан аҡса ҡайырыуға ғына ҡайтып ҡала, ә уның өҫтөнән контроллек итеүсе юҡ.

Кадрҙар ҡытлығы тигәндән, уның төп сәбәбе, әлбиттә торлаҡсыларға эш хаҡының әҙ түләнеүе. Ә бит, уйлап ҡараһаң, слесарь-сантехник йәки шул уҡ урам һепереүсенең эше бик еңелдән түгел, бөгөн был һөнәр эйәләрен фәҡәт лайыҡлы эш хаҡы менән генә эшкә йәлеп итергә мөмкин. Хәбәр ителеүенсә, яҡындағы өс йылға торлаҡ-коммуналь хужалыҡҡа ҡаҙна сығымдары кәметелә бара (быйылғы 881 млрд һумдан 2025 йылға - 506 һәм 2026 йылға ни бары 381 млрд ҡалған). Дәүләт Думаһы ошоноң менән бәйле торлаҡ-коммуналь хужалыҡ эшсәндәренә эш хаҡын арттырыуҙың "ҡыҙыҡ" ысулын тәҡдим итә, тик был мәсьәләне әлеге лә баяғы халыҡ елкәһенә һалмаҡсылар: ТКХ тарифтарын төҙөгәндә (йылылыҡ, һыу менән тәьмин итеү, газ, электр энергияһы, сүп-сар сығарыу) торлаҡ хужалығы эшсәндәре хеҙмәтенә түләү сығымдарын да иҫәпкә алырға тәҡдим ителә. РФ Төҙөләш министрлығына ошо йүнәлештә тәҡдимдәр әҙерләргә ҡушылған да инде. AMarkets аналитика департаменты етәксеһе Артем Деев фекеренсә, был, һис шикһеҙ, кадрҙарҙы тулыландырырға булышлыҡ итер ине, ләкин шулай ҙа мәсьәләне граждандар иненә һалыуҙы дөрөҫ тип әйтеп булмай, ти ул. Сөнки йорттарҙа йәшәүселәр былай ҙа сифатлы хеҙмәттәр менән файҙалана алмай. Башҡа төрлө юл һайлау хәйерлерәк булыр ине, тигән фекер белдерә эксперт. Ләкин дөйөм хорҙа берҙәнбер айыҡ аҡллы был тауышты ишетеүсе булыр микән?..

Әйткәндәй, 2024-2026 йылдарға торлаҡ-коммуналь хужалыҡҡа бюджет сығымдары ҡыҫҡартылһа ла, Башҡортостан буйынса был өлкәгә быйыл былтырғыға ҡарағанда сығымдар 27 процентҡа күберәк, йәғни 26 млрд һум ҡаралған, тик бынан берәй һынылыш булырмы, юҡмы - киләсәк күрһәтер.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# "ИҪКЕРГӘН БУЛҺА ЛА, ЙӨРӨЙ..."



**Үткән аҙнаның йәкшәмбеһе Украинала алып барылған Махсус хәрби операция башланыуының 767-се көнө булды. 31 мартҡа ҡарай төндә Рәсәй армияһы Украинаның хәрби һәм инфраструктура объекттарын утҡа тотто, тип хәбәр итте "Военное обозрение" баҫмаһы. Төн урталарында Рәсәй пилотһыҙ осоу аппараттарының удар төркөмө һәм тактик авиация төрлө йүнәлештәрҙә һөжүм итте.**

Унан алдараҡ, Интерфакс мәғлүмәттәре буйынса Рәсәй хәрбиҙәре Украинаның энергетика һәм һауа һөжүменә ҡаршы объекттарына "Кинжал" тауыш тиҙлегенән шәберәк ракеталар яуҙырҙы. РФ Оборона министрлығынан белдереүҙәренсә, утҡа тотолған объекттар юҡ ителде. Бынан тыш, ведомство хәбәрҙәренән күренеүенсә, Рәсәй хәрби көстәре тәүлек эсендә дошмандың 175 пилотһыҙ аппараты менән 21 HIMARS һәм Yampire реактив снаряд системаларын бәреп төшөрҙә. Һәм, ғөмүмән, МХО башланғандан алып, беҙҙең көстәр тарафынан Украинаның 577 самолеты, 270 вертолеты, 17 658 пилотһыҙ аппараты, 489 зенит ракета комплексы, 15 642 танкы һәм бронемашинаһы, 8 573 артиллерия орудиеһы һәм миномёты, 20 343 берәмек махсус хәрби машинаһы юҡ ителде, тип хәбәр итә Интерфакс .

ЦРУ директоры Роберт Бернс белдереүенсә, АҠШ тарафынан өҫтәмә хәрби ярҙам булмаһа, Украина тыныс килешеүҙәргә барыуы ихтимал. Ә бит тап 31 мартта Украинала ил Конституцияһына ярашлы президент һайлауҙары үтергә тейеш ине, ләкин илдәге хәрби хәлде һәм Зеленскийҙың вәкәләтлек мөҙҙәте 20 майҙа ғына тулыуын иҫәпкә алып, президент һайлауҙары, Украинаның көнбайыш партнерҙары ҡыҫтауына ҡарамаҫтан, билдәһеҙ ваҡытҡа кисектерелә. РФ Йәмәғәт палатаһы ағзаһы, "Беҙ - Рәсәй менән" Запорожье хәрәкәте башлығы Владимир Рогов Украина президенты Зеленскийға тыныс килешеүгә барыу планы тәҡдим итте. Ә шул араларҙа АҠШ конгресы аҡса бүлеүҙән баш тартыуға ҡарамаҫтан, Washington Post гәзите яҙып сығыуынса, Пентагон "яҫтыҡ-матрастарҙы ҡаҡҡылап, кеҫәләрҙә һәрмәнеп", Киев өсөн 300 млн доллар аҡса табыуға өлгәште.

Ә АҠШ президенты Джо Байденддың үҙ хәстәре: Төньяҡ Дакотаның Демократик партияһы праймеризында ул 92,4 процент , ә 45-се президент Дональд Трамп Республикандар партияһынан бөтә булған делегаттарҙың 29 тауышын алды. Һәм тағы ла Франция тураһында. Илдең оборона министры Себастьян Лекорню Киевҡа йөҙләгән иҫке VAB бронетранспортеры ебәрергә әҙер булыуын белдерә. "Иҫкергән булһа ла, улар йөрөй әле..." ти ул. Шул уҡ ваҡытта француз армияһын яңы Griffon бронемашиналары менән тулыландырыу ҡарала. АҠШ та үҙенең ҡоралланыу программаһы тарихында иң ҡиммәткә төшкән проекттың бойомға ашырырға булды: F-35 истребителенең тәүге өлгөһө беренсе осош яһағандан һуң... 20 йыл үткәс, әле килеп уны сериялы етештереүҙе башларға хәл ителә, ләкин истребителдең бынан алда сығарылған өлгөләре менән бөтәһе лә ал да гөл түгел икән шул: ҡайһы берҙәре менән авариялар булғылаған, өҫтәүенә, тауыштан юғарыраҡ тиҙлектә осоуҙы башҡарыу енел бирелмәүе һәм тағы ҡайһы бер етешһеҙлектәр асыҡланған. Ҡиммәткә төшкән проекттың уңышһыҙлығын АҠШ властары үҙҙәре лә танырға мәжбүр, ләкин күрәләтә уны бойомға ашырырға хәл ителә.

Ә бына MBDA (ракеталар етештереүсе Европа транснациональ компанияһы) заказдар булмау сәбәпле, Германияла Taurus ракеталарын етештереүҙе туҡтатырға мәжбүр булды, тип хәбәр итә Der Spiegel журналы. Заказ юҡ икән, ракеталарҙы запас етештереү тыйыла. Немец компанияһы етәксеһе Томас Готшильд был хәлдең ил сәнәғәте өсөн яҡшы түгеллеген таный һәм Украинаға Taurus ракеталары ебәреүҙе изге бурыс тип иҫәпләй, ә ГФР канцлеры Олаф Шольц Киевҡа бындай ҡорал ебәреүгә ҡаршы, сөнки ул ракеталарҙың Рәсәй территорияһында шартлауын теләмәй. Икенсенән, Taurus ракеталарын белеп һәм һәҙөмтәле файҙаланыу өсөн Украинаға немец хәрбиҙәрен ебәрергә тура киләсәк, ә был мөмкин түгел, ти ул.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостанда йәшәүселәрҙе 22 апрелдән 27-һенә тиклем алты көнлөк эш аҙнаһы көтә. Бынан һуң май байрамдарына бәйле оҙайлы ял көндәре башлана. Был хаҡта Эш һәм мәшғүллек буйынса федераль хеҙмәт хәбәр итә. Май байрамдарында рәсәйҙәр 28 апрелдән 1 майға тиклем, шулай уҡ 9-12 майҙа ял итә ала.

✔Владимир Путин запаста булмаған 18-30 йәшлек граждандарҙы хәрби хеҙмәткә саҡырыу тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Документ менән норматив акттарҙы рәсми баҫтырып сығарыу порталында танышырға мөмкин. Указға ярашлы, яҙғы саҡырыу кампанияһы 2024 йылдың 1 апреленән 15 июленә тиклем дауам итәсәк. Бөтәһе 150 мең кешене хеҙмәткә алыу планлаштырыла. Шул уҡ ваҡытта хеҙмәт итеү ваҡыты тамамланған егеттәр хәрби хеҙмәттән азат ителергә тейеш.

✔"Пионер" руднигында ҡотҡарыу операцияһы туҡтатылды, сөнки шахтаның ҡабаттан емерелеү хәүефе бар. Был хаҡта 1 апрелдә рудник етәкселеге хәбәр итте. Амур өлкәһендә "Пионер" руднигының идара итеүсе директоры ҡулға алынған. 120 метрҙан ашыу тәрәнлектә ҡалған эшселәр араһында биш яҡташыбыҙ бар. Уларҙың дүртәүһе - Сибайҙан, береһе - Учалынан, 31-48 йәшлек ир-егеттәр. Барыһы ла машинист булып эшләй. 18 март кисендә Амур өлкәһендәге рудниктың ер аҫты эштәре участкаһында тау тоҡомдары ишелеп төшкән.

✔Башҡортостандан Рафаэль Ғәлимов тхэквондо буйынса Рәсәй беренселегенең көмөш призеры булды. Республикабыҙ спортсыһының Рязанда еңеүе тураһында Спорт министрлығынан хәбәр иттеләр. Рязань ҡалаһында 26 марттан 31 мартҡа тиклем 12-14 йәшлек егеттәр һәм ҡыҙҙар араһында Корея көрәше буйынса турнир үтте. Ярышҡа Рәсәйҙең 60 төбәгенән 800-ҙән ашыу спортсы килде. Әйткәндәй, беренселектә республиканан ауырлыҡ категорияһында бер генә спортсы ҡатнашты. Рафаэль Ғәлимов 45 килограмм ауырлыҡ категорияһында икенсе урынды алды.

✔Башҡортостан боксеры Азалия Әминева Нефть илдәре кубогында еңеү яуланы. Был хаҡта республиканың спорт министрлығы хәбәр итә. Финалда Азалия Әминева Белоруссиянан Дарья Лецко менән алышта алдынғылыҡты бирмәне. Кисә ярымфиналда яҡташыбыҙ Ҡазағстан спортсыһы Милана Сафронованы еңде, тип хәбәр иткәйне "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Нижневартовскиҙа Фарман Сәлмәнов иҫтәлегенә бокс буйынса Нефть илдәре кубогы үтте.

✓ *Хәҙер бер генә юғары уҡыу йортона уҡырға инеп, бер генә заказсыны һайларға мөмкин. Белгесте уҡытыу тураһында килешеүҙе заказсы, абитуриент һәм университет араһында төҙөргә була.*



ҠЫҪҠАСА

# БАЛАЛАРҒА - ХӘЛӘЛ ҺӨТ

**"Башҡортостандың "Һөт кухняһы" яңы өлгөлө "Рәсәй сифат системаһы-Хәләл" сертификатын алды, Рәсәйҙә балалар өсөн һөт ризыҡтары етештереүселәр араһында беҙ алдыңғы", тип хәбәр итте республика етәксеһе Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында.** Республика Башлығы һүҙҙәренсә, бындай сертификат алыу предприятие тәрән комплекслы аудит үткән тигәнде аңлата. Уны илдәге халыҡ-ара өлгө буйынса аккредитацияланған берҙән-бер ойошма белгестәре үткәргән. "Һөт кухняһы" хеҙмәткәрҙәре халыҡ-ара стандарт буйынса эш принциптарына өйрәнгән. "Был сертификат "Һөт кухняһы" продукцияһының юғары сифатлы булыуын, предприятиеға ышанырға мөмкин икәнен раҫлай. Эремсек, йогурт, һөт составында тыйылған буяуҙар һәм өҫтәмәләр юҡ", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы. Әлеге көндә республикала ете "Һөт кухняһы"ның ете цехы эшләй, улар тотош Башҡортостанды балалар өсөн һөт продукцияһы менән тәьмин итә.

✓ **Башҡортостанда талпан энцефалитынан прививка яһау кампанияһы башлана, тип хәбәр итә республиканың Роспотребнадзор идаралығы.** Уралда, Себерҙә, Алыҫ Көнсығышта һәм Рәсәйҙең үҙәк төбәктәрендә инфекция сығанаҡтары теркәлә. Талпан энцефалитын яҡшы иҫкәртеү сараһы - вакцинация. Роспотребнадзор талпан энцефалитына ҡаршы прививка ҡуйҙырырға һәм өс йылға бер тапҡыр ҡабаттан вакцина яһатырға тәҡдим итә. Ашығыс иммунизация схемаһы: вакцина бер ай арауыҡ менән ике тапҡыр яһала. Талпан энцефалиты таралған урынға барыр алдынан 2 аҙна элек прививка эшләтергә кәрәк. Бер йылдан һуң вакцинацияны ҡабатларға. Препараттың киләһе дозаһы өс йылдан һуң индерелә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, былтыр Башҡортостанда талпан энцефалиты вирусы менән зарарланыу ике тапҡырҙан ашыуға артҡан.

✓ **Башҡортостан Транспорт министрлығы 2024 йылдың февралендә фотовидеотеркәү автомат комплекстары теркәгән иң күп таралған юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоу осраҡтары тураһында хәбәр итте.** Мәҫәлән, водителдәр тиҙлек режимын үтәмәй, тиҙлекте сәғәтенә 20-40 км арттырыуы ҡағиҙә боҙоуҙар исемлегендә беренсе урында тора. Уҙған айҙа камералар 208 557-нән ашыу осондай боҙоу теркәгән. Икенсе урында - светофорҙың тыйыу сигналына йөрөү: 12 683-тән ашыу осраҡ теркәлгән. Өсөнсө урында - туҡталыш һыҙығынан сығыу - бөтәһе 7975-тән ашыу осондай осраҡ билдәле.

✓ **Рәсәй Президенты Владимир Путин экстремизмға саҡырған һәм Рәсәйҙең Ҡораллы Көстәре тураһында ялған мәғлүмәт таратҡан өсөн мөлкәтте, аҡсаны һәм башҡа матди ҡиммәттәрҙе тартып алыуҙы күҙ уңында тотҡан законға ҡул ҡуйҙы.** Бында һүҙ илдең именлегенә ҡаршы енәйәти эшмәкәрлекте финанслау өсөн файҙаланылған йәки тәғәйенләнгән аҡса тураһында бара. Бынан тыш, хәҙер суд ҡарары менән бындай эштәр өсөн почетлы исемдәрҙән мәхрүм итеүҙәре ихтимал. Рәсәйгә ҡарата санкциялар индерергә саҡырыу, нацизмды реабилитациялау һәм Рәсәй Федерацияһы ҡатнашмаған ойошмалар, йәки сит ил дәүләт органдары ҡарарҙарының үтәлешенә булышлыҡ итеү ҙә бына шуға ҡарай.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТАШҠЫНҒА ӘҘЕРЛӘНӘБЕҘ

**Өфөлә яҙғы ташҡынға әҙерлек башланды. Миҙгелле тәбиғәт күренеше көтөлмәгән булмаһын өсөн ҡаланың ғәҙәттән тыш хәлдәрҙе иҫкәртеү һәм янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итеү буйынса комиссия ултырышы үткәрелде.**



Өфө граждандарҙы яҡлау идаралығы матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса, 1600-ҙән ашыу кеше, 552 берәмек техника, 122 йөҙөү сараһы булдырылған, 8 оператив төркөм, 16 ташҡынға ҡаршы штаб эше ойошторолған һәм 44 ваҡытлыса урынлаштырыу пункты әҙерләнгән. Ҡала хеҙмәттәре һыу үткәреү коммуникацияларын, дамбаның ҡуҙатеү майҙансыҡтарын ремонтлау, тротуарҙарҙы әҙерләү һәм һыу ағыҙыу торбаларын алмаштырыу буйынса иҫкәртеү сараларын үткәрҙе. Йылғаларҙа тығын барлыҡҡа килмәһен өсөн күпер аҫтарындағы боҙҙо еберәү буйынса эштәр башҡарылды. Һыу баҫҡан биләмәләрҙән 34 000 кубометр самаһы ҡар сығарылды. Һыу баҫыу участкалары теркәлә, тейешле хеҙмәттәр ирегән ҡар һыуҙарын һурҙыра. Әлеге ваҡытта улар 93 000 кубометр самаһы һыуҙы һурҙырған.

Бынан тыш, Граждандарҙы һаҡлау идаралығы хеҙмәткәрҙәре һыу баҫыу ихтималлығы булған зонала йәшәгәндәр менән профилактик эш алып бара. Янғын һағы идаралығы һәм йәмәғәт именлеге үҙәге белгестәре өйҙән-өйгә йөрөп, халыҡты ташҡынға әҙерләнергә саҡыра, уларҙың һорауҙарына яуап бирә һәм ғәҙәттән тыш хәл осрағында шылтыратыу өсөн телефон номерҙары күрһәтелгән иҫкәртмәләр тарата. 122 рейд үткәрелгән, 1200-ҙән ашыу кеше консультация алған. Иҫкәртеү эше бының менән генә бөтмәй әле. Мәктәптәрҙә хәүефһеҙлек дәрестәре үткәрелә. Һыу баҫыу ихтималлығы булған биләмәлә йәшәгәндәргә киң мәғлүмәт саралары һәм социаль селтәрҙәр аша ла мәғлүмәт бирелә.

# БИШ ЙЫЛ ЭШЛӘРГӘ...

**2024 йылдың 1 майынан маҡсатлы йүнәлтмә менән юғары уҡыу йорттарына ҡабул итеү өсөн яңы ҡағиҙәләр ғәмәлгә индерелә.**

Хәҙер бер генә юғары уҡыу йортона уҡырға инеп, бер генә заказсыны һайларға мөмкин. Белгесте уҡытыу тураһында килешеүҙе заказсы, абитуриент һәм университет араһында төҙөргә була, шул уҡ ваҡытта уҡыу йорто йылына ике тапҡыр заказсыға студенттың өлгәшеүе тураһында мәғлүмәт тапшырырға бурыслы. Уҡыуҙы тамамлағандан һуң компанияла йәки ойошмала 5 йыл эшләү мотлаҡ (кәмендә 3 йыл).

"Үҙгәрештәр заказсыны эҙләү ысулына ла ҡағыла. "Рәсәйҙә эш" берҙәм платформаһы эш биреүселәрҙә, һөнәри уҡыу йорттарын һәм студенттарҙы берләштерәсәк. Бар мәғлүмәтте Башҡортостан вуздарының ҡабул итеү комиссиялары сайттарында табырға була. Һорауҙарҙы Рәсәй фән һәм юғары белем биреү министрлығының ҡыҙыу линия телефоны буйынса ла бирергә мөмкин: 8 (800) 301-44-55", - тип билдәләнеләр Республика менән идара итеү үҙәгендә. Бынан алдараҡ республикала 2024 йылда студенттарға маҡсатлы йүнәлтмә буйынса белем алыу өсөн квоталар раҫланғайны.

# ТӨҘӨКЛӘНДЕРӘБЕҘ!

**Башҡортостанда Владимир Путиндың тәҡдиме менән башланған "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проектының "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" программаһы буйынса йәмәғәт биләмәләрен төҙөкләндереү эштәре 2024 йылдың 1 майынан башлана. Республика етәксеһе үҙенең телеграм-каналында ошо хаҡта белдерҙе.**

Быйыл 123 йәмәғәт биләмәһе яңыртыла, 67 объект - ҡалаларҙа, 56-һы иһә ауылдарҙа, тип иҫкә төшөрҙө Радий Хәбиров. Барлыҡ проекттарҙы ла халыҡ былтыр яҙ көнө онлайн тауыш биреү ярҙамында һайланы. Ҡайһы бер парктар һәм скверҙар тулыһынса яңыртыла. Өфөнөң Урманһылар паркын күләмле реконструкция көтә. Биләмәләрҙең бер өлөшөндә төҙөкләндереү эштәре алдан уҡ башланғайны. Мәҫәлән, Мәләүездә быйыл "Дан" мәҙәниәт һәм ял паркында эштәр дауам итә. "Мин республика буйлап күп йөрөйөм, сағыштырырлыҡ нәмәләр бар. Беҙҙең ҡалалар һәм ауылдар үҙгәрә, яңы парктар, аллеялар, скверҙар барлыҡҡа килә, халыҡтың яратҡан ял урындары күркәмләнә. Һуңғы биш йылда "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" программаһы буйынса Башҡортостанда 683 объектты төҙөкләндерҙек. Проект өсөн бүленгән 7 миллиард һумдың 91 проценты - федераль бюджеттан. Ә был карточкаларҙа - быйыл ғәмәлгә ашырылырға тейешле проекттар. Минеңсә, бик шәп", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

# ОХЛЕБИНИН ЮЛЫ...

**Башҡортостандың баш ҡалаһынан 42 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан Ағиҙел йылғаһының уң яҡ ярындағы матур Охлебинин мәмерйәһенә туристар күп килә.**

Башҡортостанда 2024 йылда "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" милли проекты сиктәрендә Иглин районында Өфө - Охлебинин юлын төҙөкләндереү ҡаралған. Юлсылар биш саҡрым оҙонлоҡтағы участканы тейешле хәлгә килтерергә ниәтләй. Төҙөүселәр юл япмаһын яңыртасаҡ, юл ситтәрен тәртипкә килтерәсәк һәм юл тамғалары һыҙасаҡ. Был эштәргә 73 миллион һумдан ашыу аҡса йүнәлтелә. "Өфө - Охлебинин юлы - туристар араһында популяр йүнәлеш. Башҡортостандың баш ҡалаһынан 42 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан Охлебинин ауылынан алыҫ түгел, Ағиҙел йылғаһының уң яҡ ярында матур Охлебинин мәмерйәһе урынлашҡан, унда туристар күп килә", - тип һөйләне Башҡортостан Республикаһының транспорт һәм юл хужалығы министры Александр Клебанов. 2024 йылдың башына ошо юлдың 67,1 процент норматив торошта. Шуға күрә был йүнәлеште ремонтларға ҡарар ителде. Ремонттан һуң Өфө - Охлебинин юлының 89,3 проценты нормативҡа тап киләсәк. Апрель-май айҙарында йылы көндәр башланғас та юлсылар ремонт эштәрен башлаясаҡ. Барлыҡ эштәрҙе 2024 йылдың аҙағына тиклем тамамлау күҙаллана.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығына 1 апрелдә Өфөнөң Бехтерев урамында ер ишелеүе тураһында хәбәр иткәндәр. "Мәғлүмәт Өфөнөң Киров районы хакимиәтенә еткерелде. Күсмә кәңәшмә була, шунан һуң артабанғы саралар күреү тураһында ҡарар ҡабул ителәсәк. Соҡорҙоң ситендә гараждар тора, милекселәрҙе асыҡлайҙар", - тип белдерҙеләр республика буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының матбуғат хеҙмәтендә.

✓1 апрелдән 122-се Өфө - Авдон даими ҡала яңы маршруты эшләй башлай, тип хәбәр иттеләр "Башавтотранс" предприятиеһынан. Автобустар "Көньяҡ" автовокзал менән "Авдон" туҡталышы араһында көн һайын йөрөйәсәк. Эш көндәрендә автобустар Авдондан - таңғы 6-ла, Өфөнән - 8-се 25 минутта, ялдарҙа иһә ярты сәғәткә һуңыраҡ ҡуҙғала. Авдон Өфөнән 20 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан, унда 6 меңгә яҡын кеше йәшәй. Ҡасаба янындараҡ тимер юл станцияһы ла бар.

✓1 апрелдән Көнсығыш сығыу юлында түләүле тарифтар эшләй башланы. Еңел автомобилдәр өсөн көндөҙ юл хаҡы - 100 һум, төндә (1-се яртынан 6-сы яртыға хәтлем) - 20 һум, йөк машиналары өсөн иһә 250 һум һәм 50 һум. "Башинформ" хеҙмәткәре 1 апрелдә иртән түләүле юл йөрөү системаһын һынап ҡараны. "Иртәнге 8-се 15 минутта түләүле юлдан үттек. Ҡулаҡса менән йәки ҡулаҡсаһыҙ түләргә мөмкин. Биш-алты машина көтөп тора, тығындар юҡ", - тип хәбәр итте мәғлүмәт агентлығы вәкиле.

✓Башҡортостанда мохтаждар өсөн "Аҙыҡ-түлек" проекты башланды, тип хәбәр итте республиканың ғаиләһ, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова үҙенең телеграм-каналында. Мохтаждар өсөн аҙыҡ-түлек йыйыу урыны - Николай Ҡораммы. "Митрополит Никонға фатихаһы һәм ихлас ярҙамы өсөн рәхмәт белдерәм, - тине Ленара Иванова. - Урыны бик уңышлы, яҡында ғына йәмәғәт транспорты йөрөп тора (был ирекмәндәр өсөн мөһим), аҙыҡ-түлек тейәгән фураларға инеү өсөн уңайлы юлдар".

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Өфөлә "Көньяҡ ҡапҡаһы" проекты сиктәрендә Генерал Рыленко һәм Пугачёв урамдары киҫешкән ерҙә ике кимәлдәге сиселеш схемаһы буйынса юл үткәргес төҙөлә.*



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# ҮҘӘК БАҘАР... ҮҘӘККӘ ҮТМӘҺЕН

**Өфөнөң "Главархитектура" ойошмаһында муниципалитеттың структур бүлексәләре һәм Дәүләт автоинспекцияһы вәкилдәре ҡатнашлығында кәңәшмә уҙғарылды. Кәңәшмәлә "Үҙәк баҙар" транспорт төйөнө территорияһын төҙөкләндереү мәсьәләләре ҡаралды.**

"Главархитектура" начальнигы Руслан Хәйруллин "Революцион урамды реконструкциялау" линия объектының ғәмәлдәге проектына үҙгәрештәр индереү һәм "Үҙәк баҙар" транспорт төйөнө территорияһын планлаштырыу һәм уны межалау проекттарын булдырыу кәрәклеге хаҡында белдерҙе. Әлеге ваҡытта "Үҙәк баҙар" транспорт төйөнөндә светофор көйләүгә ярашлы ҡуласа буйынса хәрәкәт итеү ғәмәлдә ҡала. Өфө мэрияһы вәкилдәре юл хәрәкәтен ғәмәлдәге схема буйынса ойоштороу транспорт ағымдарының бергә ҡушылыуы һәм киҫешеүе һөҙөмтәһендә конфликт нөктәләрен ныҡ арттыра, был хәүефһеҙлектең кәмеүенә һәм айырым йүнәлештәр буйынса машиналарҙы үткәреп ебәреү мөмкинлегенә зыян килтерә, тип белдерә. Йәмәғәт транспортының төрлө маршруттары һәм төрҙәре менән файҙаланған пассажирҙар күсеп ултырған саҡта унайһыҙлыҡ кисерә. Шуға күрә был участкала ҡуласа буйынса хәрәкәт итеүҙе бөтөрөү тәҡдим ителә. Шулай уҡ майҙан уҙәгендә йәйәү йөрөү зонаһын булдырыу төп маҡсаттарҙың береһе булып тора. Шул уҡ ваҡытта транспорт төйөнөнөң үткәреү мөмкинлеге резервын тәьмин итеү өсөн тейешле саралар ҡуҙҡалған. Улар барыһы ла ошо төйөндә киске пик ваҡытында иң ныҡ көсәйгән юл хәрәкәтен динамик моделләштереү барышында тикшереү үтте һәм нигеҙләнде. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар юл хәрәкәтен ойоштороу проекты, маршрут селтәрен үҙгәртеп ҡороу һәм йәмәғәт транспорты туҡталыштарын күсереү, шулай уҡ территорияны төҙөкләндереү маҡсатында туҡталыш пункттары янындағы павильондарҙы алыу мәсьәләләре буйынса фекер алышты.

# КИЛӘСӘК ӨСӨН...

**Өфөләге иҫкергән Ағиҙел күпере аркаһы тулыһынса тиерлек һүтеп алынды, тип хәбәр итте БР Башлығы Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында. "Капремонт тамамланыу менән беҙ уны мотлаҡ яңынан ҡорасаҡбыҙ - тышҡы күренеше һәм үлсәмдәре элеккесә ҡаласаҡ", тип вәғәҙәләне республика етәксеһе.**

Күперҙе яңынан асыу йыл аҙағына табан күҙаллана, ә 2025 йылда ундағы ремонт эштәре тулыһынса тамамланасаҡ. "Һөҙөмтәлә ҡалаға инеү-сығыу өсөн бишәр буйлы юл тығындарҙы кәметеү һәм ошо участкалағы көсөргәнеште бөтөрөү мөмкинлеген бирәсәк, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Йылғалар менән уратып алынған ҡала өсөн күперҙәр булыуы бик мөһим. Беҙ бөгөн бер үк ваҡытта Воровский урамы сатындағы Ағиҙел күперен һәм Өфө йылғаһы аша сығыуҙы тәьмин иткән Шакша күперен ремонтлайбыҙ - уны ла бынан сафҡа индерәбеҙ. Әлеге мәлдә был унайһыҙлыҡ тыуҙыра, әммә киләсәктә проблемалар булмаясаҡ. Шуға күрә ҡалала йәшәүселәрҙән тағы ла бер тапҡыр түҙемле булыуҙы үтенәм".

Хәбәр ителеүенсә, 21 мартта "Көнсығыш сығыу юлы" сафҡа индерелде, унан М-5 "Урал" федераль трассаһына тиклем беренсе автомобилдәр үтте. Республика етәксеһе ошо ҙур проект тамамланыу айҡанлы ошолай тип белдерҙе: "Көнсығыш сығыу юлы" төҙөлөшөн тамамлап бөтөүгә, башҡа ҙур инфраструктур проекттарҙы планлаштырабыҙ. Һүҙ "Көньяҡтан урап үтеү" проекты сиктәрендә Кузнецов затоны "Өфө - Аэропорт" юлы менән тоташтырыусы Ағиҙел күпере һәм Интернациональ урамы сатындағы күпер тураһында бара. Ике проект буйынса ла алға китеш бар: "Көньяҡтан урап үтеү" буйынса "Главгосэкспертиза"ның ыңғай һығымтаһы алынды, ә ҡаланың төньяғындағы күпер буйынса концессия килешеүен төҙөү мөмкинлеген эҙләйбеҙ".

Өфөлә "Көньяҡ ҡапҡаһы" проекты сиктәрендә Генерал Рыленко һәм Пугачёв урамдары киҫешкән ерҙә ике кимәлдәге сиселеш схемаһы буйынса юл үткәргес төҙөлә. Хәҙер проектты ғәмәлгә ашырыусылар юл үткәргестең "таждар"ын төҙөү маҡсатында ер полотноһын әҙерләү менән мәшғүл. Проектҡа ярашлы, алты буйлы юл сиселеше өс урамды - әле төҙөлөүсе Генерал Рыленко һәм төҙөкләндерелеүсе Пугачёв һәм Бородин урамдарын тоташтырасаҡ. Юл сиселешен ағымдағы йылда асыу күҙаллана.

# ҠАНУНИӘТ БОҘОЛМАҺЫН

**Өфөлә Башҡортостан Республикаһы Эске эштәр министрлығы һәм Рәсәй Федераль именлек хеҙмәтенең республика буйынса идаралығы хеҙмәткәрҙәре Росгвардия менән берлектә сит ил граждандары күп булған урындарҙы тикшерҙе.**

Рейдтар барышында Рәсәйгә миграция ҡануниәтен боҙоп килгән мигранттар эшләгән баҙарҙарҙа һәм сауҙа комплекстарында тикшереү үткәрелде. "Хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре Рәсәй биләмәһендә ғәмәлдәге миграция ҡануниәте талаптарын боҙған 4 сит ил гражданын асыҡланы. Ошо факт буйынса уларға ҡарата административ протоколдар төҙөлдө. Материалдар судҡа ебәрелде, унда хоҡуҡ боҙоусыларҙы илдән сығарыу тураһында ҡарар ҡабул ителергә тейеш", - тип хәбәр иттеләр Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәтенән.

Бынан тыш, Рәсәй Федерацияһы гражданлығын алып та хәрби иҫәпкә баҫмаған 30-ҙан ашыу граждан асыҡланған. Артабан ҡарар ҡабул итеү өсөн был граждандарҙы Өфө ҡалаһының хәрби комиссариаттарына алып киткәндәр. Бынан алдараҡ "Башинформ" республикала сит ил кешеләрен фиктив теркәү осраҡтары тураһында хәбәр иткәйне.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Балалар, йәштәр фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһен өсөн, ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан арҙаҡлы шәхестәребеҙ хаҡында һөйләйбеҙ.**

## ИБРАҺИМОВ РӘХИМ КИРӘЙ УЛЫ

Башҡортостандың күренекле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре Р.К. Ибраһимов 1904 йылдың 15 августында Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе Үҫәргән улысының Этҡол ауылында тыуған (хәҙерге Ейәнсура районының Юлдаш ауылы). Ул тыуғыҙ йәшендә етем ҡала, 16 йәшенән батрак булып эшләргә мәжбүр була. Белемгә ынтылышы көслө булған үсмер ауыл уҡытыусыһы Бәдретдин Хәсәновтан һабаҡ ала. 1929 йылда Ҡазан ҡалаһындағы Татар Үҙәк башҡарма комитеты исемендәге берләштерелгән татар-башҡорт хәрби мәктәбен тамамлай.1929-1937 йылдарҙа Стәрлетамаҡта һәм Бәләбәйҙә Ҡыҙыл Армия сафында взвод, рота, батальон командиры, полк командиры ярҙамсыһы булып хеҙмәт итә. 1930 йылдан алып ВКП(б) ағзаһы. 1937-1938 йылдарҙа БАССР Үҙәк башҡарма комитеты рәйесе вазифаһын башҡара.1938-1946 йылдарҙа БАССР Юғары Советы Президиумы рәйесе.1946-1953 йылдарҙа БАССР-ҙың Аҙыҡ-түлек сәнәғәте министры булып эшләй.

Рәхим Кирәй улы Ибраһимов - 112-се Башҡорт атлы дивизияһын ойоштороуҙа әүҙем ҡатнаша. 1942 йылдың 22 мартында ул Дим станцияһында тантаналы шарттарҙа Юғары Совет Президиумы һәм БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советының Ҡыҙыл байрағын 112-се Башҡорт атлы дивизияһы командиры, полковник М.М. Шайморатовҡа тапшыра.

СССР Юғары Советы депутаты (1937-1946), РСФСР Юғары Советы депутаты (1938-1947), БАССР Юғары Советының I һәм II саҡырылыш депутаты (1938-1951). Р.К. Ибраһимов - Совет власы шарттарында Башҡортостандың тәүге парламентын ойоштороусыларҙың береһе. Юғары Совет Президиумы рәйесенең бурыстары бик күп булыуына ҡарамаҫтан, ул халыҡ сәнғәтен, музыка мәҙәниәтен, башҡорт театрын үҫтереүгә етди иғтибар бирә. Ятраткан музыка ҡоралы - башҡорт ҡурайы, замандаштары хәтерләүенсә, "Перовский" бейеүен бик оҫта башҡара.

Наградалары: дәүләт хеҙмәтендәге ҡаҙаныштары өсөн Ҡыҙыл Йондоҙ (1936), Ленин (1944) һәм "Почёт Билдәһе" (1949) ордендары менән бүләкләнә. 1971 йылдың 20 декабрендә Өфөлә вафат була. Ейәнсура районының Юлдаш ауылы мәктәбе Рәхим Ибраһимов исемен йөрөтә. Уҡыу йортонда билдәле дәүләт эшмәкәренең тормошона һәм эшмәкәрлегенә арналған музей булдырылған. Өфө ҡалаһының Коммунистик урамындағы Рәхим Кирәй улы Ибраһимов йәшәгән 75-се йортҡа мемориаль таҡтаташ ҡуйылған.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Крыжовник

Был күп йыллыҡ ҡыуаҡ май-июндә сәскә ата. Емештәре С, В, В2, В9, Р витаминдарына, каротинға, пектин матдәләренә, органик кислоталарға (алма һәм лимон кислотаһы күп), минераль матдәләргә бай. Дауаланғанда йышыраҡ бешкән емештәрен ҡулланалар. Крыжовник балаларға, оло йәштәгеләргә, ауыр сирҙәр кисергәндәргә, матдәләр алмашыныуы һәм һимереүҙән интеккәндәргә файҙалы. Емеше бәүел ҡыуҙырыу, эс йомшартыу, ауыртыныуҙы баҫыу көсөнә эйә. Крыжовникты даими ашаған кешеләрҙә онкология ауырыуҙары булмаyы асыҡланған.

❖ Ашҡаҙан-эсәк юлдары ауырыуҙарынан 1 стакан таҙартылған крыжовникка 1,5 литр һыу ҡойоп, 20 минут ҡайнатырға. Был һыуҙы ашҡаҙан ауыртҡанда эсергә.

❖ Туберкулездан 1 ҡалаҡ киптерелгән крыжовник япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡас ябып 30 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Көн һайын 1-әр стакан эсергә.

### Ҡыҙыл көртмәле

❖ Шәкәр диабетынан көртмәле емешен шул көйө ашау яҡшы тәьҫир итә.

❖ Зәңге, эс киткәндә ҡыҙыл көртмәле ҡайнатмаһын ашау файҙалы.

❖ Баш ауырыһа, гипертония, киҙеү, һалҡын тейгәндә 50 грамм ҡыҙыл көртмәле һутына 3/4 стакан ҡайнатып һыуытылған һыу ҡушырға, бал өҫтәргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашағандан һуң яртышар стакан эсергә.

❖ Йөҡлағанда бәүел тота алмағанда ҡыҙыл көртмәленең япрағы һәм емешенә 2 ҡалаҡ һары мәтрүшкә үләне ҡушып, 3 стакан һыу ҡойоп, 10 минут ҡайнатырға. Ошо ҡайнатманы төштән һуң, сәғәт 4-тән алып, бөткәнсе эсергә. Ә балаларҙың төндә аҫты еүешләнһә, ҡыҙыл көртмәле япрағы һәм емешен бергә ҡушырға һәм шуның 2 ҡалағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡушып, 10 минут талғын утта тоторға, һыуытып һөҙөргә. Төнәтмәнең яртыһын бер нисәгә бүлеп, балаға көн дауамында бирергә, ә икенсе яртыһын йоҡларҙан алда эсерергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*✓ "Мин намаҙ уҡыһын өсөн улым төрмәгә эләгергә тейеш булғанмы икән? Аллаһы Тәғәлә улыма һәм миңә шундай һынауҙы махсус бирҙеме икән, әллә был осраҡлы тап килеүме?" - тип һүҙен тамамлағайны атай кеше.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Бөркөт**
**(Беркут)**



Ҡарсығалар ғаиләһенә ҡарай. Бөркөт уларҙың араһында иң эреһе. Тар, әммә оҙон ҡанаттары 72,5 см-ға етә, уларҙы йәйеп ебәрһә, 211 см тирәһе буласаҡ. Ҡойроғо сағыштырмаса оҙон, бер аҙ бөгөлөп тора. Танауы ҡауырһын менән ҡапланмаған, "һаҡалы" юҡ, бәкәл һөйәге бармаҡтарына тиклем ҡауырһын менән ҡапланған. Оло ҡоштоң кәүҙәһенең оҙонлоғо 80-95 см-ға етә. Тырнаҡтары ҡара, осло, бөгөлөп тора, уртансы бармағының тырнағы 7 см-ға етә. Осҡанда ҡанатының осондағы ҡаурыйҙарын бармаҡты йәйгән кеүек йәйеп оса.

Йәшенә ҡарап төҫө үҙгәрә, олоғайған һайын ҡараҡ була бара: йәш ҡоштоң ҡойроғоноң осо ҡара, ҡойроҡ үҙе аҡ, ә 4 йәшлек ҡош инде тотошлай ҡарая. Бары тик ҡорһағында һәм ҡойроғо аҫтында ғына ерән-алтынһыу төҫтәге ҡаурыйҙар күренеп ҡала. Төҫө буйынса инә ҡош менән ата ҡош айырылмай.

Бөркөт урманлы-таулы ландшафтты үҙ итә. Шул уҡ ваҡытта, 70-се йылдар уртаһында Таналыҡ йылғаһы буйындағы урманлы-дала зонаһында ла бер оя бөркөт теркәлә. Шулай уҡ Әбйәлил, Баймаҡ райондарында ла осрай. Хәҙерге көндәрҙә бөркөттөң оя ҡорор урыны һәм йәшәү ере тип Белорет, Бөрйән, Учалы райондары, Ирәмәл тауы, Башҡортостан дәүләт ҡурсаулығы, "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы, шулай уҡ Мәләүез, Күгәрсен, Ейәнсура райондары иҫәпләнә. Благовар, Туймазы райондарында ла бөркөт оя ҡора.

Көҙгә ҡарай бөркөттөң иҫәбе 45-50-гә етә, аҙ һанлы булыу сәбәпле, территорияла юғала барыусы төргә инә. Уларҙың кәмей барыуы кеше тарафынан даими эҙәрлекләүҙәргә дусар булыуынан тора.

Парҙар айырым ғына йәшәүҙе үҙ итә, хатта һәр ғаиләнең 3-4 ояһы була, уларҙы сиратлап тотоналар. Бер ҡошҡа тәүлегенә 1 кг ризыҡ кәрәк, ул ит ашаусылар төркөмөнә инә. Ашамайынса 5 тәүлек тора ала. Төлкө, ҡоралай, ҡуян, һыуырға һунар итә, йомран, алйырҙан, һуҫар, тейен, терпене ашай. Ҡоштарҙың эрерәктәрен һайлай - һуйыр, ҡор, өйрәк, селән, торна, йорт ҡаҙҙары, ҡарға һ.б. Ашарына етмәһә, эт, бесәйгә лә һунар итә.

4-5 йәшендә ғаилә ҡора һәм парына ғүмеренең аҙағынаса тоғро ҡала. Инә ҡош апрелдең тәүге яртыһында 1-3 йомортҡа һала, 43-45 көн дауамында ата ҡош менән сиратлап уларҙы баҫалар. Ата ҡош ем ташый, инә ҡош уны бәпкәләргә бүлеп бирә.

Өйрәтелгән бөркөттәрҙе борондан бүрегә, ҡуянға, сайғаҡҡа һунар өсөн ҡулланалар. Үткән быуаттың 30-сы йылдарына ҡош менән һунар юҡҡа сыға тиерлек. Башҡорттар бөркөттәрҙе ҡаҙаҡтарға, ҡырғыҙҙарға ла һатҡан.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ӨС ДӘЛИЛ: АБВ*

# ДИНГӘ ОСРАҠЛЫ КИЛМӘЙҘӘР



**Яңыраҡ Башҡорт дәүләт академия театрында спектакль ҡараным. Ифтар тамаша барған ваҡытҡа тура килде. Янда ултырыусыларға мәшәҡәтләмәй генә ауыҙ асырға тура килде. Янымда миңә ҡушылыусылар ҙа табылды. Бер үк ваҡытта партерҙың һул яҡ рәтендә ултырыусы мәктәп балалары араһында ифтар ғәмәле башҡарыусыларға иғтибар иттем. Спектакль башланыр алдынан урындарына ултырған саҡта уларҙың ҡулдарындағы һыулы шешәләрҙе, моҡсайҙарға һалынған ризыҡты күреп өлгөргәйнем. Залда кескәй ураҙалаштарым барлығын тойоу йәнгә аңлатып булмаҫлыҡ кинәнес алып килде. Әммә... Балаларҙың күпләп дингә килеүенә, намаҙ уҡыуына, ураҙа тотоуына шатланырға ғына булыр ине, әммә был күренештең балалар тормошонда төрлөсә сағылыш табыуы ҡайһы ваҡыт күңелһеҙ уйҙарға ла алып килә. Атап әйткәндә:**

**А** Бынан бер нисә йыл элек күптәнге танышым үҙенең нисек итеп дингә килеүен бәйән иткәйне. Бигүк күңелле булмаған тарих. Уның улы ауыр булмаған енәйәт ҡылғаны өсөн ҡыҫҡа мөҙҙәткә төрмәгә барып эләккән. Төрмәлә дин юлында булыусылар менән бергә ултырып, шул юлға килеп, намаҙ уҡый башлаған улы. Һуңынан ireккә сыҡҡас, атаһы уның өлгөһөнә эйәреп намаҙлыҡҡа ултырған, дингә килгән. "Мин намаҙ уҡыһын өсөн улым төрмәгә эләгергә тейеш булғанмы икән? Аллаһы Тәғәлә улыма һәм миңә шундай һынауҙы махсус бирҙеме икән, әллә был осраҡлы тап килеүме?" - тип һүҙен тамамлағайны атай кеше.

Бәндәнең төрмәгә барып эләгеүе осраҡлы булыуы ла мөмкин, нимә генә тимә, һаҡһыҙлыҡ, дыуамаллыҡ йә спиртлы эсемлекте артыҡ ҡулланып тәртип боҙоу арҡаһында ла рәшәткә артына барып юлығалар. Шул уҡ ваҡытта кешенең намаҙ уҡый башлауы һис тә осраҡлы булмайҙыр ул, тип тә уйланыла. Күп кенә кешеләрҙең ауырлыҡтар аша дини юлға килеүен иҫәпкә алғанда маҡсат ысулды аҡлайҙыр ҙа, тигән фекергә лә киләһең. Маҡсат ысулды аҡлайҙыр ҙа ул, әммә әҙәм балаһы намаҙ уҡый башлар өсөн төрмәгә ултырмайҙыр ул.

**Б** Хәҙер инде мәсьәләгә икенсе күҙлектән ҡарайыҡ: ни өсөн киреһенсә килеп сыҡмаған, йәғни был бала атаһына эйәреп дингә килмәгән һуң? Уның дингә килеүе, был юлға атаһын күндереүен "Бер олоно, бер кесене тыңла" тигән әйтем менән дә аңлатып булыр һымаҡ. Ошо урында республикабыҙҙа киң билдәле бер шәхестең: "Хәҙер донъялар шул тиклем үҙгәрҙе, беҙҙең өйрәткән аҡыл, биргән кәңәштәр балаларыбыҙға бөтөнләй яраҡһыҙ. Уларға нимәлер әйтә, өйрәтә башлаһаң, тыңлаған кеше булалар ҙа, барыбер ҙа үҙҙәренсә эшләп ҡуялар", - тигән һүҙҙәре иҫкә төшә. "Атайым һаҡал ебәрмәйенсә, мин мыйыҡ үҫтермәйем", тигән мәҡәл дә бар. Әгәр ҙә ошо һүҙҙәрҙе диниләғәткә бороп ҡараһаҡ, атаһы улына эйәреп дингә килһә, "Улым һаҡал ебәрмәйенсә, мин мыйыҡ үҫтермәйем", булып сыға түгелме? Был осраҡта дини йола менән милли йола бер-береһенә ҡаршы килә. Был ниндәйҙер кимәлдә "Иң тәүҙә тауыҡ булғанмы, әллә йомортҡамы?" тигән мәңгелек дилемманы иҫкә төшөрә. Шул уҡ ваҡытта һуғышсан атеистик дәүерҙә шәхесе формалашҡан атайҙың улы дингә килгәнсе иттә йөрөүен ғәйепләп тә булмай.

**В** Бала күңеле аҡ ҡағыҙ, унда нимә яҙһаң, шул була, тиҙәр. Үкенескә күрә, балаларын дини юлға өндәгән ата-әсәләр үҙҙәре дөрөҫ юҫыҡта булмаһалар, мәктәптә уҡыған балаларын да күп кенә мәрхүмлектәргә дусар итә. Әйтәйек, телевизор, кино, спектакль ҡарарға ярамай, Яңы йыл, 8 март, 23 февраль байрамдары, йырларға, бейергә, музыка ҡоралында уйнарға, тыуған көн үткәрергә ярамай, Ҡыш бабай бүләге хәрәм һ.б.

Мин дин юлында булған балаларҙың барыһы хаҡында ла быларҙы әйтмәйем, әммә мәктәп программаһында һәм кластан тыш эштәрҙә ҡаралған байтаҡ ҡына фәһемле саралараҙан мәхрүм ителгән балалар хаҡында ишеткәнем, ундайҙарҙың ата-әсәләре менән һөйләшкәнем дә бар.

Спектаклгә килеп ауыҙ асҡан балаларҙың динден дөрөҫ юҫығында йөрөүҙәренә һис тә шикләнмәйем. Улар сама менән етенсе-туғыҙынсы кластарҙа уҡыған балалар. Башҡа тамашасылар нисек кейенгән булһалар, шулай кейенгәндәр, баштарына йоҡа ғына яулыҡ ябынғандар. Иплеләр, тәртиплеләр. Уларға ҡарап йән шатланды былай...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# АЛДАУҘЫҢ ДА ТӨРЛӨҺӨ...

**Ошо көндәрҙә бер яңылыҡ уҡып ғәжәпләндем. Ауылдағы ярлы тормош тураһында видеолар төшөрөп, интернетта билдәлелек яулаған Ван Хун исемле ҡытай ҡыҙын ҡулға алғандар. Баҡтиһәң, барлыҡ видеолары ла махсус әҙерләнгән сценарий буйынса төшөрөлгән, ҡыҙ ярлы тормошто "уйнаған".**



Ҡытайҙың Сычуань провинцияһының халыҡ суды үҙен Ван Хун тип таныҡтан 22 йәшлек Лян Саньмэнъянды 11 айға иркенән мәхрүм иткән һәм 80 мең юань (1 миллион һумдан ашыу) штраф түләргә ҡушҡан. Ҡыҙ 2018 йылдан әүҙем рәүештә социаль селтәрҙәрҙә эшләй. Ул Сычуань провинцияһының таулы ерендәге бәләкәй ауылда тороуы, ата-әсәһе үлгәндән һуң бәләкәй туғандарын тәрбиәләүе тураһында һөйләй һәм һәр ваҡыт йыртыҡ, иҫке кейемдә камераға төшә. Онлайн трансляция барышында, йәнәһе, үҙе үҫтергән бәшмәктәрҙе һата, ә инде уны 3,8 миллион кеше ҡарай башлағас, төрлө ауыл хужалығы тауарҙарын "етештереп" һатырға тотона. Ҡырҙа күп эшләгән ҡыҙҙың ҡояшҡа янып, яраланып бөткән йөҙөн күреп тә, тырышлығына һоҡланып та кешеләр уның әйберҙәрен һатып ала, аҡса күсерә.

Әммә берҙән-бер көндө кемдәрҙер уның ҡалала йәшәүен, ҡиммәтле кейемдәрҙә йөрөүен, хатта ата-әсәһе лә тере икәнен фашлай һәм алдаҡта ғәйепләй. Йәмәғәт хәүефһеҙлеге органдары тикшеренеү башлай һәм Ван Хундың, уның бер медиакомпанияла хеҙмәт иткән артистарҙан торған командаһының мутлыҡтарын асыҡлай. Баҡтиһәң, улар бөтә ил буйлап осһоҙға ғына ауыл хужалығы продукцияһын һатып алып, хаҡын бер нисә тапҡырға күтәреп, кире һатыу менән шөғөлләнгән һәм 30 млн юандән ашыу аҡса эшләгән. Бынан тыш, ҡыҙҙың ауыр тормош хәлендә ҡалыуына битараф булмағандарҙан да байтаҡ килем килгән...

Ә бит был ҡыҙ һүрәтләгән төпкөл ауыл тормошон, кешеләрен ысынбарлыҡта күрһәтеп тә булыр ине бит, тип уйлап ҡуйылды әле бына. Ниңә ҡояш менән бергә тороп, ҡояш батҡансы өйгә инмәй эшләп, мал-тыуар көткән, йәшелсә-емеш үҫтергән кемдер ошондай видео төшөрөп, үҙе тураһында һөйләп, үҙенең хеҙмәтен һәм үҙе етештергәнде рекламаламай? Уның видеолары, Ван Хундан айырмалы рәүештә, алдаҡ булып сыҡмаҫ ине бит...

Ысынында, беҙҙең йәмғиәттә лә Ван Хун ишеләр юҡ түгел: ауыл кешеһе хәләл көсөн түгеп тәрбиәләп үҫтергән малын, йәшелсә-емешен ҡайҙандыр килеп йыйып алып йөрөүселәргә бушлайға тиерлек тоттороп ебәрә лә баһа. Үҙ баҡсаларында үҫтергәнде килтереп һатһындар, тип, Өфө урамдарына ҡуйылған махсус һатыу итеү урындарында ла алыпһатарҙар кәсеп итә.

Эйе, алдаҡсылар, муттар, хәйләкәр шылғаяҡтар күбәйҙе. Башҡортостанда ғына алданған кешеләрҙән тәүлек һайын 6 миллионлап һум аҡса ана шундай муттар кеҫәһенә инеп ята, тигән статистика бар. Уйланығыҙ әле, йәмәғәт! Алданмағыҙ әле! Ә ауыл халҡына шуны әйтке килә: үҙегеҙ үҫтергәнде үҙегеҙ һатырға ла өйрәнегеҙ. Юҡһа, ҡала халҡы бик тә мохтаж бит һеҙҙең тәбиғи шарттарҙа үҫтергән картуф-йәшелсәләргә, хәләл мал итенә.

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите
13

# Тыуған телем!

5-11 апрель (алағарай) 2024 йыл
№13 (1106)

АФАРИН!

(Башы 1-се биттә).

Бына инде 29-сы тапҡыр уҙғарылған "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсында быйыл 55 уҡытыусы ҡатнашҡан, улар араһында 4-һе - колледждарҙа белем биргән остаздар. Конкурстың баһалама комиссияһы рәйесе, Өфө фән һәм технологиялар университеты профессоры Гөлфирә Абдуллина әйтеүенсә, ярыш ғәҙәттәгесә үткән һәм төп иғтибар уҡытыусыларҙың нисек дәрес үткәреүенә йүнәлтелгән. "Сөнки уҡытыусыларҙың йөҙөн билдәләгән этап - дәрес күрһәтеү. Унда уның методик яҡтан оҫталығы ла, балалар менән аралашыу кимәле лә, дөйөм үҫеше, үҙе уҡытҡан фәнгә ҡарата мөнәсәбәте лә күренә. Дәрес күрһәткәндән һуң ҡайһы бер конкурсанттар "Оҫталыҡ дәресе" тигән киләһе этапҡа үтмәне. Унда педагог йылдар буйы туплаған методик тәжрибәһен, отошло уҡытыу алымдарын күрһәтергә бурыслы. Әммә күптәр уҡыусыларының ҡаҙаныштарын: алынған дипломдар, ҡатнашҡан конкурстарҙы һанау менән сикләнә. Быны менән бергә дә аптыратып булмай бөгөн, сөнки дистанцияла үткән ярыштар ҙа күп, дипломдарҙы йыйыу мөмкинлеге лә юғары. "Уҡыусылар менән әңгәмә" этабында ҡайны бер уҡытыусыларға шул тиклем һөкланып ҡарап ултырҙыҡ, балалар яратып ҡына торорлоҡ педагогтар бар, ә бит бала уҡытыусыны оҡшатһа, мәктәпкә ашҡынып бара. Шулай уҡ "Уҡытыусыға һорау" һәм "Уҡытыусыға һүҙ" тигән һынауҙарҙы үтеләр, унда педагогтарҙың башҡортса һәм русса фекер йөрөтә алыу оҫталығына иғтибар иттек. Сөнки еңеүсе республикабыҙ данын Рәсәй кимәлендә яҡларға сығасаҡ. Дөйөм алғанда, конкурс һөҙөмтәләре менән ҡәнәғәтбеҙ, көслө уҡытыусылар ҡатнашты быйыл. Араларында методик яҡтан сағыштырмаса йомшағыраҡ булғандары ла бар, был инде республикаһың төрлө район-ҡалаларында эшләү кимәленән торалыр. Беҙ колледжда ла башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен тейешле кимәлдә уҡытып булыуын һәм күпселек осраҡта был уҡытыусының шәхесенән тороуын күрҙек", - тине Гөлфирә Риф ҡыҙы һәм быйылғы конкурс лауреаттары иҫәбенә колледж уҡытыусыһы үтеүе көтөлмәгән хәл булыуын билдәләне.

# КҮҢЕЛ ҺАЛЫП УҠЫТҠАНДАР...

## был бәйгелә еңеү яуланы



"Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте эргәһендәге финанс университеты"ның Өфө филиалы колледжы уҡытыусыһы Зарина Бағышаева жюри ағзалары алдынғы тәжрибәһе, дәрте менән арбаған һәм лауреат булған. "Был минең өсөн бик яуаплы һынау. Беренсе тапҡыр ҡатнашам, педагогик тәжрибәм ни бары өс йыл ғына. Шуға ҡарамаҫтан, йөрьәт итеп ҡатнаштым, коллегаларым һәм остазым Ҡоҙашева Фәндизә Гәлимйән ҡыҙы ла дәртләндереп торҙо. Дәресем "Барыһы ла һинең ҡулда" темаһына арналды, үҙ яҙмышына үҙең хужа икәнлекте студенттарға билдәле яҡташыбыҙ Рөстәм Нәбиев миҫалында еткерергә тырыштым. Ә инде дәрес-әңгәмә барышында "Матурлыҡ донъяны ҡотҡарыр" темаһын астыҡ. "Уҡытыусыға һорау" этабында тапҡыр яуаптарымды оҡшаттылар. Уҡытыусы үҙ эшенә бар күңелен һалып эшләргә бурыслы, шунда балалар күңеленә лә асҡыс табырға була. Үҙ эшемдән йәм, тәм табып йәшәйем, шөкөр" , - ти Зарина Урал ҡыҙы.

"Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2024" төбәк-ара конкурсының лауреаттары исемлегенә шулай уҡ "СМАРТ" Республика полилингваль күп профилле гимназияһы уҡытыусыһы Миләүшә Ғирфанова, Нефтекама ҡалаһының 7-се урта мәктәбенән Эльза Ғилманова, Благовещен ҡалаһының М. Киняшов исемендәге 6-сы урта мәктәбенән Гөлнара Дәүләтбаева инде.

Ә Баймаҡ районының Иҫке Сибай ауылы мәктәбе уҡытыусыһа Азалия Ибраһимова конкурстың төп еңеүсеһе тип табылды. "Иҫке Сибай мәктәбендә 12 йыл башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡытам, оҙаҡ йылдар уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса директор урынбаҫары булып та эшләйем. Шулай ҙа конкурста тәүге тапҡыр ҡатнашам, бығаса эш тәжрибәм әҙерәктер, тип иҫәпләнем. Быйыл үҙемде һынап ҡарарға, коллегалар менән танышырға, фекер алышырға теләп килдем. Конкурс бик оҡшаны, көслө уҡытыусылар йыйылған һәм һәр береһенең сығышынан фәһем алдым. Үҙем "Заманса технологиялар ҡулланыу аша башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә ыңғай мотивация булдырыу" темаһына тәжрибәмде уртаҡлаштым. Балаларыбыҙ кеҫә телефондары, компьютерҙан айырылмай икәнен иҫтә тотоп, уларҙың был мауығыуҙарын эшебеҙҙә ҡулланырға кәрәк, тип иҫәпләйем. Дәрестә бушыраҡ ваҡыт булһа, уҡыусылар менән уларҙың яратҡан йәнһүрәттәрен башҡортсаға тәржемә итеп, тауышландырабыҙ. Аҙаҡ улар был яҙманы ҡусты-һеңлеләренә алып ҡайтып күрһәтә, телгә ҡыҙыҡһыныуҙары арта. Беҙҙең мәктәптә барыһы ла башҡорт туған телен өйрәнә, яңы төҙөлгән һәм заманса йыһазландырылған мәктәптә дәртләнеп эшләйбеҙ, уҡыйбыҙ", - ти Азалия Варис ҡыҙы.

"Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" конкурсы 34-се тапҡыр уҙғарылды, унда 152 уҡытыусы ҡатнашҡан. Шулар араһында Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернатының рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Эльвира Арыҫланова, Туймазы районы Райман ауылы мәктәбенең татар теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Римма Арыҫланова үҙ эшенең иң алдынғылары тип табылды. "Йылдың йәш уҡытыусыһы" конкурсында Сибай ҡалаһының 9-сы лицейынан математика уҡытыусыһы Александра Половнева еңде. Ә инде Өфө ҡалаһының Н.И. Кузнецов исемендәге 105-се гимназияһының тарих һәм йәмғиәтте өйрәнеү уҡытыусыһы Сергей Наумов "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" конкурсының абсолют еңеүсеһе булды. Сергей Александрович мәктәптә бишенсе йыл эшләй, һөнәри конкурста үҙен икенсегә һынаған һәм Рәсәй кимәлендә Башҡортостан данын яҡлаясағын тулҡынланып ҡабул иткән. Педагог тарих дәрестәрендә лә уҡыусыларҙа инженерҙарса фекерләүҙе үҫтерергә була ти һәм тәжрибәһен уртаҡлаша. "Балалар тарих менән ҡыҙыҡһына, был бөгөн айырыуса көнүҙәк. Тик уларҙы йәлеп итә белергә генә кәрәк. Дәресте мауыҡтырғыс һәм файҙалы итеп үткәреү мөһим", - ти Сергей Наумов.

Быйыл "Дистанцион белем биреү уҡытыусыһы" конкурсы тәүге тапҡыр Бөтә Рәсәй кимәленә сыҡҡан: Новосибирск, Липецк ҡалаларынан ҡатнашыусылар булған. Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балаларға белем биреү, йәмғиәткә ылыҡтырыуҙың мөһимлеген аңлаған педагогтар араһында Нефтекама коррекцион мәктәп-интернатынан Лилиә Аҡмалова еңеүсе тип табылды. Ошо конкурста номинация менән билдәләнгән Липецк ҡалаһынан Юлия Годованюк менән әңгәмәләштек: "Беҙ Липецк ҡалаһының Белем биреү, реабилитация һәм һауыҡтырыу үҙәгенән ике кеше килдек. Мин биологиянан уҡытам, коллегам Елена Чурсина һынлы сәнғәт уҡытыусыһы. Мәктәбебеҙҙә инвалид балалар уҡый, кемеһе килеп йөрөй, кемеһенә дистанцияла белем бирәбеҙ. Беҙҙең кеүек дистанцион белем биреү педагогтары конкурсында бығаса ҡатнашҡаным булманы, һирәк күренеш был. Шуға Башҡортостанда үткәрелгән ярыш тураһында мәғлүмәтте уҡығас та риза булдым. Беҙ Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы махсус белем усағында ярыштыҡ, театрыбыҙға барып башҡортса спектаклде синхрон тәржемә менән ҡараныҡ. Был бик ҡыҙыҡ формат, оҡшаны", - тип тәьҫораттары менән бүлеште Юлия Годованюк. Уның бик үҙенсәлекле фамилияһының тарихы менән ҡыҙыҡһынғас, иренең олатаһын һуғыш йылдарында сабый көйөнсә табып алыуҙары һәм "Годы войны" тип исем ҡушыуҙары тураһында әйтте. Бына шулай тотош ил яҙмышын сағылдырған исемле кеше нәҫелен дауам иткән ғаилә йәшәй икән Липецк ҡалаһында.

Был көндә шулай уҡ "Рәсәйҙең уҡытыусы-дефектологы" Бөтә Рәсәй конкурсының республика этабы уҙғарылды һәм унда дефектологтар менән логопедтар араһында айырым еңеүселәр билдәләнде. Иң яҡшы уҡытыусы-дефектолог Нефтекама ҡалаһының 11-се балалар баҡсаһында эшләй - Ильмира Ялалова, ә иң яҡшы уҡытыусы-логопед Бөрө коррекцион мәктәбенән булып сыҡты - Ирина Горбунова.

Конкурсанттарҙы мәртәбәле ҡунаҡтар тәбрикләне һәм ҡотлау һүҙҙәренә ҡушып, енел булмаған эштәре өсөн рәхмәт һүҙҙәрен дә еткерҙеләр. Һәр кем уҡытыусы һөнәренең әһәмиәтен дөрөҫ баһалай, уның киләсәк быуындарҙы тәрбиәләүгә ҙур өлөш индереүен белә. "Балаларҙың йөрәктәрен һәм һәләттәрен асҡан һоҡланғыс, тормошобоҙҙо яҡшыраҡ яһаған һөнәр эйәләре һеҙ. Ошо һөнәрҙе һайлауығыҙ һәм үрҙәргә ынтылыуығыҙ өсөн рәхмәтемде белдерәм" , - тине БР мәғариф министры Илдар Мәүлетбирҙин да.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЯҘЫЛЫШЫН ТИКШЕР!

Тикшереү

**Хәҙер башҡорт телендәге һүҙҙәрҙең, һөйләмдәрҙең һәм ҙур-ҙур текстарҙың дөрөҫ яҙылышын онлайн тикшереү мөмкинлеге бар. Бының өсөн ни бары https://tiksher.eu/ сайтына үтеп, үҙегеҙҙең яҙмағыҙҙың күсермәһен ҡуйығыҙ. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ул ҡағыҙәләргә таянып, хаталарҙы таба һәм ҡыҙыл менән һыҙып күрһәтә. Шулай уҡ ихтимал булған төҙәтмәләрҙе тәҡдим итә.**

"Тикшереү" сайтын Республика Башлығы гранты ярҙамында Айгиз Ҡунафин командаһы тормошҡа ашырырҙы. "Эштең тәүге этабы - текстарҙа булған хаталарҙы табыу, уларҙы ниндәй вариантҡа төҙәтеп булыуын күрһәтеү. Өҫтәмә мөмкинлеге - һүҙ төркөмдәренә морфологик анализ яһау. "Әйткәндәй, сайттағы программаны компьютерға урынлаштырып, уның менән интернетһыҙ ҙа ҡулланырға була, - ти Айгиз Ҡунафин.

"Был бик мөһим һәм кәрәкле проект. Сайт башҡорт телен яңы ғына өйрәнеүселәргә алыштырғыһыҙ ярҙамсы. Шулай уҡ башҡортса яҡшы белеп тә, үҙҙәрен тикшерергә теләүселәр өсөн дә файҙалы. "Аҡыллы колонка" менән берләттән, был проект та йәмғиәттә башҡорт телен популярлаштырырға, уны өйрәнеүҙе еңеләйтергә ярҙам итә", - тип белдерә Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү ойошмаһы директоры Гөлназ Йосопова.

✓ *Ҡәҙимге көн итмешебеҙҙә быуаттар буйына туплана килеп, аң-зиһенебеҙҙә томалаған хөрәфәттәр, кешелек тормошоноң ысын асылына төшөнөү мөмкинлеген ҡаплап-ышыҡлап торған күҙгә күренмәҫ шаршауҙар етерлек әле.*



# ХАЗИНА ҺАНДЫҒЫН

## йәки Телдәребеҙ ни һөйләй,

**Эй һеҙ, геовитян әфәнделәр, йәгни ҡәҙерле ерҙәш иптәштәр! Аптырамағыҙ, һеҙгә ошолай тип өндәшәйем әле: боронғо гректа Ерҙе тап "ge" тип атап йөрөтһә, латин халҡы йәшәйеште "vita" тип нарыҡлаған. Шулай булғас, ошо неологизмға ярашлы, беҙ - ерҙә тереклек итеүселәр, ер кешеләре булабыҙ инде. Һүҙ башында барығыҙҙы ла мосолмандарса әссәләмү ғәләйкүм үә рәхмәтуллаһи үә бәрәкәтүһ, тип тәбрикләйем - бынығы инде ғәрәпсәнән тыныслыҡ, Аллаһыбыҙ рәхмәтен һәм бәрәкәтен теләү, тип ҡабул итәбеҙ.**

Беҙ, әҙәм балалары, осһоҙ-ҡырыйһыҙ йыһан киңлегенең үҙебеҙ Ер шары тип йөрөткән бер нөктәһендә, ваҡыт тип нарыҡланып, башы-ахыры һис бер беленмәгән бөйөк океан ағыш-хәрәкәтенең тыуым менән үлем арауығында көн итмешбеҙ. Бөн фәкирегеҙ йәшәйешебеҙҙең билдәле бер мәленән башлап донъя халыҡтарының һәм уларҙың телдәренең нисегерәк хасил булыуы хаҡында уйлана башлағайны. Фекерле, уйсан әҙәм балаһы өсөн был бик тә ҡыҙыҡлы бер өлкәләр, сөнки тап донъя халыҡтарының телдәрен сағыштырмаса өйрәнеү аша беҙ әлеге гонаһлы еребеҙҙә йәшәүсе барса ҡәүемдәрҙең, үтә боронғо замандарҙа ҡәрҙәш үә телдәш булған кешеләрҙең бөгөнгә вариҫтары булыуына төшөнә алабыҙ. Икенсе төрлә әйткәндә, килеп сығышы, Ер шарында йәшәгән урыны, тышҡы төҫ-ҡиәфәте, ижтимағи-дәүләти үҫеш кимәле, үҙҙәренә генә хас холоҡ-сифаттары яғынан бер-береһенән нык айырылып торған халыҡтарҙың туған телдәрен сағыштырмаса анализ ысулын ҡулланып өйрәнә башлаһаң, үҙең дә һиҙмәҫтән, ниндәйҙер бер яңы донъяны асҡан кеүек булһың. Был йөнендә ылыҡтырғыс, күнел күҙәрендә астырып, бар зиһенеңде биләп алырлыҡ хикмәтле сәйәхәткә тиңдер: тап ошо рәүешле һис бер ҡасан барып етеп булмаслыҡ, үҙ күҙҙәрең менән күрә-белә алмаслыҡ тарих төпкөлдәренә үтеп инеп була.

Ҡәҙимге көн итмешебеҙҙә быуаттар буйына туплана килеп, аң-зиһенебеҙҙә томалаған хөрәфәттәр, уйҙырма ҡараштар, ғөмүмән, кешелек тормошоноң ысынбарлығын аса алыу, уның ысын асылына төшөнөү мөмкинлеген ҡаплап-ышыҡлап торған күҙгә күренмәҫ шаршауҙар етерлек әле. Төрлө социаль-психологик фобияларҙың, бөгзе бер ҡәүемдәрҙә самаһыҙ ҙурлап, икенселәренә кәмһетеберәк ҡарауҙың, Көнбайыш цивилизацияһын ғына өҫтөнлөклө һанап, Көнсығыш мәҙәниәтен һанға һуҡмау кеүек заман яңылышыуҙарының сәбәптәренең береһе - донъя халыҡтары телдәре тарихын белергә, өйрәнергә теләмәү, тип әйтергә баҙнат итәм.

Һөнәри белемем буйынса психолог булғас, балаларҙың тел үҫеше проблемалары менән даими ҡыҙыҡһынып, байтаҡ ҡына ғилми мәҡәләләр менән таныштым. Уҙған быуаттың 30-сы йылдарында ижад иткән күренекле совет психологы Лев Выготскийҙың бер мәҡәләһендә килтерелгән миҫал миндә ҡыҙыҡһыныу уятты. Донъя кимәлендә танылыу тапҡан биолог-эволюционист Чарльз Дарвин бәләкәй ейәненең нисек итеп һөйләшә башлауын теркәп барған икән. Малай ҡартатаһы менән күл буйында йөрөгән саҡта һыуҙа йөҙөп йөрөгән өйрәктәр баҡылдашҡан. Уларҙың тауышын ишеткән бала үҙе лә "Уа, уа!" тип әйтә башлаған. Һуңынан ҡартатаһы уға өйрәк рәсемен күрһәткәс тә, өҫтәлгә сәй түгелеп киткәс тә, хатта тәҙрә төбөнә күгәрсен килеп ҡунғас та, баланың барыһын да атар өсөн бер үк "уа" һүҙен ҡулланған. Бынан бер генә һығымта эшләп була: баланың теле формалаша башлағанда бер-береһе менән ниндәйҙер бер бәйләнеше булған нәмәләр бер үк тәү һүҙ менән нарыҡлана. Ә бығаса һүҙ ҡеүәһенә эйә булмаған балаларҙың телмәр үҫеше боронғо тәү кешеләрҙең телдәре яралыуы процестары хаҡындағы фекер-идеяларға билдәле бер кимәлдә нигеҙ була ала бит!

Ошо юҫыҡта тәүге аҙым - айырым һүҙҙәрҙең тәүге мәғәнәүи ерлеген психосемантик анализ юлы менән асыҡлай барып, ошондай уҡ мәғәнәләге башҡа телдәрҙәге (хатта бер үк телдәр ғаиләһенә ҡарамаған хәлдә лә) һүҙҙәрҙе барлау. Әлбиттә, туғандаш төрки телдәрендә, туған телебеҙҙәге кеүек уҡ, бер үк мәғәнәлә ҡулланылып йөрөтөлгән һүҙҙәр бихисап, әммә, фарсы һәм ғәрәп телдәренән һуңғараҡ осорҙа килеп ингән һүҙҙәрҙән башҡа, килеп сығышы асыҡланмаған һүҙҙәр байтаҡ: уларҙың хатта ки башҡа төрки халыҡтары телдәрендә булмауы ла мөмкин.

Һәр бер һүҙҙең төп мәғәнәһе уның тамыры аша бирелә. Иң ҡыҙыҡлыһы ла тап ошонда ул: башҡорт телендәге бөгзе бер һүҙ тамырҙары бөтөнләйгә сит-ят булған телдәрҙә лә бар. Мәҫәлән, "йар" йә иһә "йәр" тамырын ғына алып ҡарайыҡ. Телебеҙҙә һирәгерәк ҡулланыла торған "ярынға/йәренгә" һүҙе осрай. Мәғәнәһе - киләһе йылға. Тимәк, бында "йар" йә иһә "йәр" тамыры йыл тигәнде белдерә. Шул уҡ тамыр ҡайһы бер һинд-европа телдәрендә (мәҫәлән, немец, инглиз) "йыл" мәғәнәһендә ҡулланыла. Рус телендә ошо уҡ "йар" тамыры яҡтылыҡты белдерә (яркий), әммә "яровой" һүҙенең килеп сығышында "яҙ" миҙгеле мәғәнәһе сағылыш тапҡан, ә боронғо замандарҙа күпселек ҡәүемдәр тап яҙ еткән мәлдә генә яңы йылды (яңы йылыны) ҡаршылаған. Әлбиттә, ҡояш горизонттан билдәле кимәлдә күтәрелеү менән яҡтылыҡ ("яркость") күпкә арта, уның менән бергә йылылыҡ кимәле лә күтәрелә бара.

Әйткәндәй, шул уҡ боронғо славяндар яңы йылды март урталарында, ҡояш илаһы Ярило тыуған мәлдә (22 март - яҙғы көн-төн тигеҙләнеше) билдәләгән, һәм хәҙерге "год" һүҙе урынына күп халыҡтарҙың телдәрендәге уртаҡ тамырлы "йар" һүҙе ҡулланылған булыуы мөмкин. Лингвосемантик анализ рус телендәге шул уҡ "год" һүҙенең немец телендәге илаһ атамаһы "Gott" һәм яҡшы, һәйбәт тигәнде аңлатҡан "gut" һүҙҙәренең беҙҙең "кот" тигәнебеҙгә тап-таман булыуын күрһәтә: үтә боронғо замандарҙа ата-бабаларыбыҙ ҡотҡа табынған, ул үҙенә күрә бер илаһи зат итеп иҫәпләнгән. Башҡортса "ҡотлау", йәгни ҡот теләү быуаттар төпкөлөнән килгән алғыш булһа, немецса "Guten Morgen!" тип әйтеү шул уҡ ҡотло иртә теләүҙе аңлата, уларҙың "O, mein Gott!" тип әйткәндәрен башҡортсалап, "О, минең ҡотом!" тиергә була. Ә бит яҙ миҙгеле ата-бабаларыбыҙҙың үҫешә барған аңында, бер яҡтан, ергә яңынан йылы ваҡыт етеүе менән бәйле ысынбарлыҡты (яңы йыл башланыуын) сағылдырһа, икенсе яҡтан, яңы ҡот ҡайтыуы кеүек абстракт төшөнсәләр барлыҡҡа килеүенә сәбәп биргән.

Һәр бер айырым телдә зат алмаштары ҡулланыла, ошо һүҙ төркөмөнөң ни рәүешле барлыҡҡа килеүе хаҡында беҙ әлегә әллә ни мәғлүмәтле түгелбеҙ. Боронғо кешеләр үҙҙәрен уратып алған мөхиттәге предмет-күренештәрҙе билдәле бер һүҙ-атамалар менән билдәләй башлаған дәүерҙәрҙә үҙ-үҙҙәренә ҡарата ла ниндәйҙер бер айырым һүҙҙәр ҡуллана башлаған, тип фараз итергә була. Күп әйбер-предметтар араһынан ниҙелер айырып күрһәтә алыу өсөн әйтелештә һаҡланып, нығынып ҡалған уртаҡ атамалар кеүек уҡ, кешеләргә бер-береһен айырып күрһәтә алыу мөмкинлеген биргән һүҙҙәр ҙә хасил була барғандыр.

Боронғо кешеләр бер-береһе менән аралашыу барышында тәүге мәлдәрҙә ым-хәрәкәт менән ҡуша ябай ғына, башлыса, бер ижекле ымлыҡтар ҡуллана башлаған. Ниндәйҙер бер предметты, йә иһә башҡа бер кешене айырып күрһәтер өсөн уң ҡулдың һуҡ бармағын (русса - указательный палец) шул тарафҡа төбәп, билдәле бер һүҙ йәки ымлыҡ ҡулланылған, мәҫәлән: "был", "шул", "ул" һ.б. Төрки телле ҡәүемдәрҙә 1-се зат алмашы сифатында "мин" ("бән") һүҙҙәре ҡулланылһа, рус телендә кеше үҙен үҙе бер генә ижекле "я" алмаш һүҙе менән атай. Бында тәү ҡарашҡа "мин" һәм "я" алмаштары араһында бер ниндәй ҙә бәйләнеш булмаған кеүек тойола. Әммә эҙләнеү инструменты сифатында психолингвистик анализ ысулын ҡулланһаҡ, ошо турала ҡыҙыҡлы ғына һығымта яһарға була.

Ҡыҙыҡһыныусан уҡыусыбыҙға бер һорау менән мөрәжәғәт итәйек: "Рус телендә төп килештә "я" һүҙе ҡулланылһа, башҡа килештәрҙә ул фонетик яҡтан бөтөнләйгә икенсе бер һүҙҙең төрлө варианттары формаһын ала - "меня", "мне", "меня", "мной", "обо мне". Бында "я" алмашының ни рәүешле икенсе төрлө фонетик яңғырауыш алыуы күҙгә күренеп, беленеп тора, шул уҡ ваҡытта ошо зат алмашының үҙ-үҙенде атау мәғәнәһе һаҡланып ҡала. Әммә ошо төрлө килештәрҙә белдереүсе рус телендәге 1-се зат алмаштарын башҡортсаға тәржемә итһәк, үтә ҡыҙыҡлы сағыштырыуға ерлек хасил була: "я" - "мин", "меня" - "мине", "мне" - "минә", "мной" - "минең менән", "обо мне" - "минең турала". Беҙ ошо рәүешле сағыштырып ҡарау аша рустарҙа ҡабул ителгән берлектәге 1-се зат алмаштарының уларҙың башҡортса варианттарына ни тиклем оҡшаш булыуын күрәбеҙ.

Бындай үтә яҡын фонетик ауаздашлыҡ нисек барлыҡҡа килгән икән? Йәнә, немецса "mein", русса "мой" һәм башҡортса (төркисә) "минең" һүҙҙәренең бер үк мәғәнәлә булып, шулай уҡ фонетик яҡтан тамырҙаш булыуын нисек аңлатып була? Ни өсөн рус телендәге "я" алмашы күплектә "мы" тигән һүҙ менән бирелә? Әйҙәгеҙ, ошо ҡыҙыҡлы һорауҙарға яуап эҙләп ҡарайыҡ.

Кешелек тарихын өйрәнеүсе ғалимдар - философтар, тарихсылар боронғо кешеләрҙең тарихҡа тиклемге осорҙарҙа үҙҙәрен тик тотош берләшмә (ырыу, ҡәбилә) форматында ғына танып белеүгә өлгәшеп, ошо берләшмә сиктәрендә үҙҙәрен айырым берәмек итеп ҡарамаған, тигән фекер яҡлы. Тимәк, үҙҙәрен йәмғиәттән (тәү социумдан) башҡа күҙ алдына ла килтерә алмаған кешеләр үҙҙәре йәшәгән һәм аралашҡан тотош бер ҡәүемде "мы" тигән ымлыҡ-һүҙ менән атай башлағандыр. Иң элгәре "мы" ("мынь") билдәле бер кешеләр төркөмөн белдерһә, һуңғараҡ осорҙарҙа уның төрки телдәрендәге "беҙ" варианты барлыҡҡа килгән. Тимәк, ошо уҡ күплекте белдергән атаманың тәү тел барлыҡҡа килгән замандарҙа айырым бер кеше затына ҡарата ла берҙәй ҡулланылған булыуы ихтимал.

"Я" һәм "мин", "мән", "бән" алмаштары йәмғиәти берләшмә составында айырым кешеләрҙе билдәләү маҡсатында күпкә һуңыраҡ дәүерҙәрҙә ҡулланыла башлай. Быны, әлбиттә, кешеләрҙең аң һәм уҙаң ҡеүәһе үҫә барыу менән бәйләп аңлатып була. Төрки телдәрендә 1-се зат алмашы булған "мин" һүҙенең төрлө фонетик варианттары осрай: "мән/бән", "мен/бен", был зат алмашы, күрәһең, "ман/бан" праформаһының бер аҙ үҙгәртелә биргән варианты булғандыр. Әйтергә кәрәк, күп кенә хәҙерге донъя халыҡтары телдәрендә "ман" йә иһә "мән" тамырҙары "ир" мәғәнәһендә ҡулланыла, һәм кинерәк мәғәнәлә ул "кеше" төшөнсәһен дә белдерә. Мәҫәлән, немец телендәге "der Mahn", инглиздәрҙә "man", "men" (ир кеше, ирҙәр) һүҙҙәрен, шулай уҡ "спортсмен", "бармен", "ирекмән", "һөнәрмән", "төркмән" кеүек атамаларҙы миҫалға алырға була. Бәлки, тәү телдәр дәүерендә аң кимәле үҫешә барған кеше ҡулы менән үҙен күрһәткәндә кеше затын белдергән "мын" һүҙен, тора-бара уның "ман", "бан" кеүек фонетик варианттарын башҡаларға ишетерлек итеп әйтә башлағандыр. Тап шуның арҡаһында рустарҙың "я" алмашы ҡулланылышҡа ингәнгә тиклем телдәрендә "мы" йә иһә "мынь", "мыня", "мыне" рәүешендә әйтелеп йөрөтөлгән зат алмаштарының хәҙерге варианттары формалашҡан, тип һығымта эшләргә була.

Лингвистар тәү алтайҙарҙың "би" рәүешендә әйтелеп йөрөтөлгән

✓ ***Әлбиттә, төрки телдәрендә бер үк мәғәнәлә ҡулланылып йөрөтөлгән һүҙҙәр бихисап, әммә фарсы һәм ғәрәп телдәренән һуңғараҡ осорҙа килеп ингән һүҙҙәрҙән башҡа, килеп сығышы асыҡланмаған һүҙҙәр байтаҡ.***

"мин" мәғәнәһендәге тамыр һүҙенә бөтөнләйгә икенсе бер тел ғаиләләренә ҡараған телдәрҙә тап-таман килгән фонетик варианттарын миҫалға ала: төрки телдәрҙә "бе", монгол, тунгус-манчжурҙарҙа - "би", япондарҙа -"ба". Әммә шуныһы ла иғтибарҙы йәлеп итә: әлеге үтә боронғо "би" тамыр һүҙе фонетик яҡтан үҙебеҙҙең башҡорт телендәге "беҙ" алмашына тура килә; тимәк, рустарҙың боронғо ата-бабалары (славян ҡәбиләләре) нисек итеп "мы" ("мынь") тамырын ҡулланһа, башҡорттарҙың да архаик ҡәбиләләрендә "беҙ" һүҙе ошолай уҡ "мин" мәғәнәһендә ҡулланылыуына ышанырға була.

Әйтергә кәрәк, тәү эскимостарҙа "ви" тамыры шул уҡ "мин" тигәнде аңлатҡан; һинд-европа телдәрендә лә ошо уҡ фонетик вариантар осрай. Болгар лингвисы С. Младенов болгар телендәге "мене" (мине) алмашы һәм латиндарҙың "ме" (мин), фарсыларҙың "мэн", сығатайҙарҙың "мен", төрөктәрҙең "бен" тигән һүҙҙәре араһында семантик һәм фонетик бәйләнеш булыуы хаҡында яҙып сыға. Шул уҡ ваҡытта немецтарҙың "wir" (беҙ) күплектәге зат алмашын копттарҙың (Мысыр) араларҙа кән иткән, ниндәйҙер бер тығыҙ иҡтисади һәм этник бәйләнештәре булмаған халыҡтарҙың телдәрендәге "мин" һәм "беҙ" төшөнсәләрен белдергән һүҙҙәрҙең төрлөсә ҡулланылыуын аңлата алыуы ҡыйын проблема кеүек ҡабул ителһә лә, логик яҡтан мәҡәләбеҙҙең тәүге өлөшөндә билдәләп үтелгән фекер раҫлана: боронғо дәүерҙәрҙә "мин" һәм "беҙ" төшөнсәләре, бер үк тәү тамырҙан яралып, бер үк берҙәм мәғәнәлә ҡулланыла килеп, халыҡтарҙың тарихи үҫеше шарттарында бәғзе бер телдәрҙә "мин", икенселәрендә "беҙ" төшөнсәләре рәүешендә нығынып ҡалған.

Тарихҡа тиклемге осорҙарға ошондай лингвистик-тарихи экскурс яһағандан һуң ҡыҙыҡһыныусы уҡыусыбыҙ ошондайыраҡ һорау бирә алыр ине: "Ә улай булғас бер үк һинд-европа телдәренә ҡараған рус телендәге "я", инглиздәрҙең "I", немецтарҙың "ich" тигән 1-се зат алмаштары атамалары нисек барлыҡҡа килгән һуң?" Был һүҙҙәрҙең тамырҙарында бер ниндәй ҙә фонетик күсәгилешлек

# КЕМ АСЫР,

## ерҙәштәр?




"wy" (мин, мине), нгизим ҡәүеменең (чад телдәре төркөмөнә ҡарай) "wa" (беҙ, беҙҙе, беҙҙән) һүҙҙәре менән сағыштырып була.

Йәнә, тағы ла бер ҡыҙыҡлы миҫал: сиркәү-славян телендәге "ve" һүҙе "беҙ икәү" тигәнде аңлатҡан. Америка индеецтары телендә лә "мин" зат алмашын белдергән боронғо тамырҙар булыуы ҡыҙыҡлы: цимшиан, иксиль ҡәбиләләрендә - "ma", мутсун телендә - "me", "men", хидатсаларҙа - "mi", дакотала - "mis" (миш), осейдж телендә - "wie". Шулай уҡ тамырҙарында һиндевропаса "ne" (беҙ) һүҙе менән бер рәттән, Америка континенты халыҡтары телдәрендә ошо "n" өнө ингән һәм "мин" мәғәнәһендәге һүҙҙәр бар: "n"- чинуктарҙа, "nu" - кламаттарҙа, "-n" - майя ҡәүмендә, "ni" - мапучеларҙа.

Тәү ҡарашҡа, өҫтә килтерелгән мәғлүмәттәр нигеҙендә, тел параллелдәрен дә иҫәпкә алып, ниндәйҙер бер ҡағиҙәгә тиң булырлыҡ һығымта эшләп булмаҫтай тойола. Әммә беҙ бында ҡасандыр бер үтә архаик дәүерҙәрҙә 1-се зат алмаштарының бер үк семантик һәм фонетик ерлектә хасил булыуы хаҡында бик ышаныслы итеп әйтә алабыҙ. Ситтән ҡарап фекер йөрөткәндә, бер-береһенән үтә алыҫ тойолмай бит! Ошо ҡыҙыҡлы лингвосемантик феноменды ла аңлата алыу юлын табып булырмы?

Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, ошондайыраҡ бер хәлде күҙ алдығыҙға килтерегеҙ. Яңығыҙҙан бер кеше үтеп киткәс, һеҙ уның кеҫәһенән ниҙендер төшөп ҡалыуын күреп ҡалдығыҙ, ти. Һеҙ артабан ана шул кешене туҡтатып, ни әйтер инегеҙ? Әлбиттә, тап бына ошолайыраҡ: "Эй, иптәш, бынау әйберегеҙҙе һеҙ төшөрөп ҡалдырманығыҙмы?" Рус кешеһе һеҙгә әйтәсәк: "Да, конечно, эту вещь потерял я! Спасибо вам!"; немец булһа: "Ja, ja, das ist meine Sache!" - тип әйтер; инглиз кешеһе: "Yeah, yeah, I have lost this thing", - тиер; ә башҡорттоң: "Эйе, эйе, был әйбер эйәһе мин!" - тип әйтерен беләбеҙ. Үҙегеҙ иғтибарлабыраҡ ҡараһағыҙ, немецтарҙың "ja"һы, инглиздәрҙең "yeah" тигәне, башҡорттарҙың "эйе"һе һәм рустарҙың "да, я" тигәне семантик яҡтан бер үк нәмәне аңлата икән.

Ошо текстағы "эй" лексемаһына иғтибар итәйек. Минеңсә, бына ошо үтә боронғо ымлыҡ нигеҙендә байтаҡ ҡына ҡәүемдәр телдәрендә берлек һанындағы 1-се зат алмаштарының - инглиздәрҙең "I", немецтарҙың "ich", рустарҙың "я" һүҙҙәре барлыҡҡа килгәндер, тип фараз итергә була. "Эй" ымлыҡ-киҫәксәһе яҡын-тирәләге бер нисә кеше араһынан кемдерҙер иғтибарын йәлеп итеү маҡсатында киҫкен рәүештә, интонацияны күтәрә биреберәк әйтелә. "Эй!" тиеүҙе иғтибарға алып, әйләнеп ҡараусы кеше ошо тауыштың башҡалар араһынан тап үҙенә йүнәлтелеүен аңлап эш итә, ул был осраҡта үҙен башҡаларҙан айырып ҡарай. "Эй!" тигәнгә яуап та, ошо сигналды ҡабул итеүҙе белдереп, төрлө телдәрҙәге фонетик яҡтан оҡшаш һүҙҙәр менән билдәләнә: "ja", "yeah", "эйе", "да я". Рус телендәге "да" һүҙе айырылыбыраҡ торған хәлдә лә, уның артынса килгән "я"ны шул уҡ семантик рәткә индерер була.

Йәнә бер башҡорт һүҙен дә иғтибарға алырға мөмкин. Төркибашҡорттарҙа әлеге "эйе" һүҙенә фонетик яҡтан бик оҡшаш "эйә" һүҙе бар, ул нимәләр хужа булыуҙы, ниндәйҙер бер әйбер-фәләндең кемдекелер булыуын аңлата. Эйә - үҙаллы, иркен, азат эш итә алыусы кеше, үҙ ғәмәлдәрен ҡыла алыусы субъект. Ә рустарҙың "я" тигәне лә шул уҡ "эйә булыусы", ниндәйҙер бер ғәмәлдәрҙә башҡара алыусы кеше өсөн 1-се заттағы алмаш һүҙе булыуы менән башҡорт телендәге "эйә" һүҙенә семантик һәм фонетик яҡынлығын белдерә. Телебеҙҙәге "эйәләшеү", "эйә-ртеү", "эйә-реү" һүҙҙәре шул уҡ "эйә - "я" тигәндәге субъектлыҡты белдерә. Шулай уҡ башҡорт телендәге "йә" киҫәксә-ымлыҡы ла икенсе бер кешегә - "эйәгә" - өндәшеү, ниҙелер талап итеү мәғәнәһендә шул уҡ семантик һәм фонетик нигеҙҙә хасил булғандыр, тип фараз итеп була.

Ошо тема буйынса әйтелгән фекерҙәребеҙҙе йомғаҡлап, Америка тел белгесе М. Сводеш белдергәнсә, теге йәки был телдәге зат алмаштарының ниҙелер күрһәтеүгә йүнәлтелгән хәрәкәт-ғәмәлдәр нигеҙендә, уларға ярашлы ымлыҡтар менән ҡуша килтерелеп хасил ителеүен нигеҙле, тип һанарға була. М. Сводеш ошолай яҙа: "Күрһәткес "ni" (демонстратив) "n-" өнөнә һуҙынҡы ҡушылып яһалған, уның, яҡын урынлашыу мәғәнәһендә ҡулланыла килеп, еңел генә беренсе затты белдереүсе һүҙгә әйләнеүе мөмкин, был, һинд-европалыларҙың "mi" һәм "wi" тигәндәренә, башҡа бер күрһәткес һүҙҙәр (элементтар) барлыҡҡа килеүгә ҡамасаулыҡ итмәй... Икенсе яҡтан, шул уҡ тамырҙар башҡа бер зат алмаштары өсөн ҡулланыла башлауы мөмкин". Әйткәндәй, туған телебеҙҙә әлеге лә баяғы "ней" тиеп һөйләшеүебеҙҙең дә үтә боронғо дәүерҙәрҙән бирле килеүенә ышанып булалыр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Донъя халыҡтарының туған телдәре хаҡындағы уйланыуҙарымдың бер ғилләһе булыуы хаҡында ла әйтеп үтергә кәрәк. Ул бик боронғо һәм ябай бер фекерҙән тора: дини тәғлимәткә ярашлы, шул уҡ Библия һәм Ҡөрьән-Кәримдә лә, кешелектең тәү атаһы итеп Әҙәм ғәләйһиәссәләм һәм тәү инәһе Һауа һүрәтләнгән. Йыһан менән бергә кешелек донъяһын бар иткән Аллаһы Тәғәлә әҙәми заттарға ер йөҙөндәге барса есем-күренештәрҙе атай алыу мөмкинлеген биргән. Тап шуға күрә иң боронғо архаик замандарҙа тәү тел хасил булып, кешелектең тарихи үҫеше барышында айырымлана барған һәр бер ҡәүем ошо уртаҡ ерлектә үҙ телен тыуҙыра алған. Шулай булғас, донъя халыҡтарының туған телдәрен иҫ киткес оло тарихи-мәҙәни хазина итеп ҡабул итеп, һаҡлау һәм үҫтерерәү зарур.**

Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.

ДӨРӨҪ ҺӨЙЛӘШ!

Ъ

## АЙЫРЫУ БИЛДӘЛӘРЕН...

**Радиотапшырыуҙар, телевизион тапшырыуҙар тыңламайынса, спектаклдәр ҡарамайынса ла булмай. Яратып ҡына, мауығып ҡына тыңлап, ҡарап ултырғанда, алып барыусыларҙың, тапшырыуҙа ҡатнашҡан әңгәмәселәрҙең, артистарҙың телмәрендәге хаталар бөтә иғтибарҙы һөрөндөрөп ҡуя шул. Ы-ых ошоларҙы, тип ҡуяһың.**

Был юлы башҡорт теленә ғәрәп теленен үҙләштерелгән, Ь (нәҙек айырыу билдәһе) хәрефе булған һүҙҙәр хаҡында әйтмәксе булдым. Әле генә ишеткәнемсә, "йөрйәт"(!) иттем.

Ь,Ъ хәрефтәре -"өнһеҙ" хәрефтәр. Йәғни, уларҙы беҙ яҙабыҙ, яҙма телмәрҙә ҡулланабыҙ, ә уҡығанда әйтмәйбеҙ, уҡымайбыҙ. Тик уларҙың һөйләү телмәрендә үҙ функциялары, башҡарған эштәре бар.

Рус телендә еңелерәк. Ь хәрефе ике эш башҡара -

а) смягчительный мягкий знак: осень, путь, моль, свадьба.

б) разделительный мягкий знак: рыбья кость, соловьиная трель, воробьи, оленьи рога. Йә енес (род) категорияһын бирә, йә һанды күрһәтә.

Башҡорт телендә Ь, Ъ хәрефтәрен, алфавитты ятлап алғанда, **нәҙек айырыу билдәһе, ҡалын айырыу билдәһе,** тип өйрәндек һәм өйрәттек. Шулай уҡ нәҙеклек билдәһе, тип тә беләбеҙ. Тик башҡорт телендә был хәреф нәҙеклектән бигерәк **айырыу билдәһе** ролен күберәк үтәй.

Ошо ҡағиҙәне тотмау, уны күҙәтмәү әлеге тапшырыуҙарҙа тәймин, йәки тәмин, йөрйәт, мәсәлә, ҡөрән, бәрәт (бәрәьәт) тип һөйләүгә килтерә. Һәм шуныһы йәл - быны хатаға һанамайҙар, дөрөҫ әйтеп өйрәнергә уйламайҙар. Әллә хәҙер нисек булһа ла бара микән? Улай булырға тейеш түгелдер, минеңсә. Киң мәғлүмәт саралары, театр спектаклдәре халыҡта, йәштәрҙә, балаларҙа телмәр мәҙәниәте булдыра бит.

Ә бындай һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтеп өйрәнеү өсөн Ь, Ъ хәрефтәре булған һүҙҙе ошо хәреф торған ерҙә ижеккә бүләбеҙ, тауыш ярылары аша сығып килгән һауаны күҙ йомоп асҡан ара тиклем генә пауза менән тотоп торабыҙ һәм икенсе ижекте әйтәбеҙ. Шул ғына.

Йә, ҡабатлайыҡ әле.

- Мө-Ь-минә, тә-Ь-ҫир, тә-Ь-мин, мәс-Ь-әлә, йөр-Ь-әт,Ҡөр-Ь-ән.

(Әйткәндәй, башҡортса хаталы итеп ДәүләткилЬдин , ИшкилЬдин, ӘлЬмөхәмәт, тип яҙыуҙар рус һәм башҡорт телендәге Ь хәрефенең ролен аңламауҙан килә).

Дәрес тамам. Рәхмәт.

Таңһылыу ВӘЛИЕВА.
Баймаҡ районы.

**✓ Хайцман ағас ботағын ҡайырҙы ла, ҡатып ҡалды... Ағас артындағы бәләкәй генә аҡланда уның бала саҡта төҙөгән өйө тора ине. Пластмасса йәшниктәрҙән эшләнгән өй. Тик ҡыйығы ғына бер аҙ үҙгәргән.**





## Владимир МЕГРЕ

# БАЙҘАР ҘА ИЛАЙ

(Кинәйәле хикәйәт)

* * *

Көндөҙгө өстә Джон Хайцман аҡһаңҡырап, ҡул таяғына таянып, йәшел-леккә күмелгән коттеджға табан яйлап ҡына атлай ине. Саллиҙы ул тәүҙә артынан күрҙе. Оло йәштәге ҡатын тәҙрә йыуа ине. Джон Хайцман сал бөҙрә сәсле ҡатынға ҡарап ҡатты. Сит кешенең ҡарашын тойоп, ҡатын уға боролоп ҡараны. Башта ул уға тексәйеп ҡарап торған бабайҙы иғтибар менән күҙәтте һәм ҡапыл уға ҡаршы йүгерҙе. Аҙымдары еңел генә, был ҡатын бөтөнләй оло кешегә оҡшамағайны. Джон Хайцманға бер метрҙай ара ҡалғас, ул тыныс тауыш менән тулҡынланып өндәште:

- Һаумы, Джонни, - шундуҡ ҡарашын түбән төшөрҙө, ике ҡулы менән алһыуланған битен ҡапланы.

- Һаумы, Салли, - тине Джон Хайцман һәм шымып ҡалды. Дөрөҫөрәге, ул эстән генә шыбырлай ине: "Салли, һин шул тиклем матурһың, күҙҙәрең нурланып тора, һин элеккеләй сибәр һәм изгеһең". Ә үҙе:

- Мин бында үтеп барышлай ғына. Һинең ошонда йәшәгәнеңде белдем дә, күреп китәйем, тинем. Бәлки, төнгәлеккә лә ҡалырмын, әгәр һин ҡаршы булмаһаң, - тине.

- Һине күреүемә бик шатмын, Джонни. Әлбиттә, ҡал. Мин бөгөнгә яңғыҙым, иртәгә ейән-ейәнсәрҙәремде бер аҙнаға ҡунаҡҡа алып киләләр. Ейәнсәремә туғыҙ йәш, ейәнемдең ун икеһе тулды. Әйҙә, Джонни, өйгә үтәйек, мин һиңә төнәтмә эсерәм. Һиңә ниндәйе файҙалы икәнен мин бик яҡшы беләм.

- Һин кейәүгә сыҡҡайның-мы ни, Салли? Балаларың бар икән.

- Джонни, мин әле лә кейәүҙә. Беҙҙең улыбыҙ бар. Ейән-ейәнсәрҙәребеҙ икәү, - тип шатланып яуап бирҙе Салли. - Ошонда ултырып тор, мин һиңә төнәтмә алып сығам.

Джон Хайцман верандалағы креслоға ултырҙы, Салли ниндәйҙер төнәтмә ҡойолған ҙур бокал алып сыҡҡас, һорай һалды:

- Миңә ниндәй төнәтмә файҙалы икәнен ҡайҙан беләһең?

- Һуң, минең атайым һинең атайың өсөн төрлө шифалы үләндәр йыйып, төнәтмә эшләй торғайны бит. Мин дә файҙалы үләндәрҙе йыйырға өйрәндем. Атайым Джонниға ла атаһының ауырыуы нәҫел буйынса күскән, ти торғайны.

- Минең килеремдә ҡайҙан белдең?

- Мин белмәнем, Джонни. Ул был була ҡалһа, тип кенә йыйғайным. Һинең хәлдәрең нисек? Ни менән шөғөлләнәһең?

- Тормошом төрлөсә барҙы. Күп нәмә менән шөғөлләндем, тик әле ул турала һөйләшкем килмәй. Бында бик күңелле икән, Салли, матур, сәскәләргә күмелгән баҡса күҙ яуын алып тора.

- Эйе, бында күңелле, үҙемә лә оҡшай. Тик анау яҡта төҙөлөш эштәрен башланылар, сүп-сар эшкәртеү заводы буласаҡ. Һул яҡта ла ниндәйҙер завод төҙөргә йыйыналар. Беҙгә был урындан күсенергә тәҡдим итәләр. Һин алыҫ юлдан арығанһыңдыр, Джонни. Мин һиңә асыҡ тәҙрә эргәһендә урын йәйәм, ятып ял ит. Тик төнәтмәңде эсеп бөтөр.

Джон Хайцман көс-хәл менән сисенә башланы. Ул, ысынлап та, ныҡ арығанлыҡтан, ярты йыл хәрәкәтһеҙ ятҡан аяҡтарында саҡ баҫып тора ине. Ҡалын плед ябынып, ул шундуҡ йоҡоға талды. Йоҡо дарыуы эсмәйенсә йоҡлай алмаған кеше әүен баҙарына киткәнен үҙе лә һиҙмәй ҡалды...

Таңды күрә алманы, сөнки төшкә ҡарай ғына уянды. Душте ҡойоноп алғас, верандаға сыҡты. Салли тыштағы кухняла төшкө аш бешерә, уға бер малай менән ҡыҙ булыша.

- Хәйерле көн, Джонни. Һин бик һәйбәт йоҡланың шикелле. Йәшәреп киткәнһең хатта. Бына, балалар менән танышып, был - Эмми, ә был егеттең исеме Джордж.

- Ә мин Джон Хайцман булам, хәйерле иртә! - тип, ул ҡулын малайға һуҙҙы.

- Бына таныштыҡ та; беҙ Эмми менән тамаҡ бешергәнсе, һеҙ, ирҙәр, баҡса буйлап йөрөп килегеҙ, аппетитығыҙ асылыр, - тине Салли.

- Әйҙәгеҙ, мин һеҙгә баҡсаны күрһәтәм, - тине Джордж Хайцманға.

Бабай менән малай баҡса буйлап атлай. Малай бер туҡтауһыҙ һәр бер үҫемлектең исеме, сифаттары тураһында бытылдай. Хайцман уйға батҡан. Баҡса ситенә барып еткәс, малай ҙур ғорурлыҡ менән:

- Ә был акация артында минең үҙ донъям бар, уны өләсәй төҙөгән, - тине.

Хайцман ағас ботағын ҡайырҙы ла, ҡатып ҡалды... Ағас артындағы бәләкәй генә аҡланда уның бала саҡта төҙөгән өйө тора ине. Пластмасса йәшниктәрҙән эшләнгән өй. Тик ҡыйығы ғына бер аҙ үҙгәргән. Тәҙрә ҡорғандары ла икенсе төрлө. Хайцман ишек шаршауҙарын асып, төпкә үтте. Өй эсе шул уҡ, тик өҫтәлдәге фотографияла Саллиҙың ейәне йылмая. "Шулай булырға тейеш - хәҙер өйҙөң хужаһы башҡа, фотография ла үҙгәрергә тейеш". Хайцман малайҙың фотоһын ҡулына алды, һүҙһеҙ ҡалмаҫ өсөн:

- Джорджик, һин бик матур төшкәнһең, - тип ҡуйҙы.

- Джон бабай, был минең фотом түгел. Миңә оҡшаған был малай менән өләсәйем бала сағында дуҫ булғандар.

* * *

Джон Хайцман баҡсалағы һуҡмаҡтан аҡһай-аҡһай, йүгерә-атлай килә, абына-һөрөнә, ҡулындағы таяғына ныҡ ныҡ таяна. Салли эргәһенә килеп еткәс, көскә тын алып, бутала-бутала һораны:

- Әле ул ҡайҙа? Һинең ирең ҡайҙа, Салли? Ҡайҙа ул?

- Джон, зинһар, тыныслан, һиңә артыҡ тулҡынланырға ярамай. Ултыр әле ошонда,- тине Салли тыныс ҡына. - Шулай килеп сыҡты, Джон, мин бала сағымда бер һәйбәт кенә малайға уның ҡатыны булырға вәғәҙә бирҙем...

- Ул бит уйын ғына ине, - тип ҡысҡырып ебәрҙе Джон Хайцман, креслонан һикереп торҙо, - бала саҡ уйыны ине.

- Ярай, шулай булһын, ти. Тимәк, мин ул уйынды уйнауҙы һаман да дауам итәм, тип уйлайыҡ. Юрый ғына һине ирем тип һанайым, - тине Салли, тыныс ҡына өҫтәп ҡуйҙы: - Ирем һәм һөйгәнем.

- Джордж минең бала сағыма ныҡ оҡшаған. Тимәк, теге төндән һуң һин бала таптың-мы, Салли? Ысынмы?

- Эйе, мин беҙҙең улыбыҙҙы таптым, Джон, ул миңә оҡшаған. Әммә унда һинең гендарың көслө, шуға ла ейәнебеҙ - тәс һин.

Джон Хайцман бер Саллиға ҡараны, бер балаларға, уйҙары буталды, өнһеҙ ҡалды. Иҫенә килгәс, ҡәтғи тауыш менән әйтте:

- Миңә бынан китергә кәрәк. Һау бул, Салли.

Бер-ике аҙым атлағас, кире боролоп, ул шым ғына торған Салли янына кире килде. Джон Хайцман, көс-хәл менән Салли алдына тубыкланды, уның ҡулынан үпте:

- Салли, минең кисектергеһеҙ мөһим эштәрем бар. Хәҙер үк ҡуҙғалырға кәрәк.

Салли уның башынан һыйпаны, сәстәрен туҙҙырҙы:

- Әлбиттә, барыр кәрәк, мөһим эштәрең, проблемаларың булғас. Әгәр һиңә ауыр булһа, Джон, бында кил. Беҙҙең улыбыҙ "Лотос" исемле бәләкәй генә ландшафт дизайны фирмаһын етәкләй. Уның махсус белеме юҡ, әммә мин уны күп нәмәгә өйрәттем, һәм ул бик матур проекттар эшләй, заказға сират торалар хатта. Ул миңә аҡсалата ярҙам итә, ай һайын хәл белергә килә. Бәлки, һинең аҡсаға ҡағылышлы проблемаларың барҙыр? Һаулығың да бер аҙ ҡаҡшаған. Һин кил, Джон. Мин һине нисек дауаларға икәнде беләм, аҡсаһы ла табылыр.

- Рәхмәт, Салли... Рәхмәт... Миңә өлгөрөргә кәрәк!

Ул яңы пландарын уйлап, һуҡмаҡ буйлап атланы. Салли алыҫлаша барған таныш кешегә ҡарап, шыбырлай ине: "Тиҙерәк әйләнеп ҡайт, һөйөклөм!". Был һөйләмдә ул ҡат-ҡат һамаҡлағанын да һиҙмәне. Өйҙәре тапҡырында бер нисә тапҡыр өйөрөлгән вертолетҡа ла иғтибар итмәне хатта.

* * *

Джон Хайцмандың вертолеты офис башына төшкән ваҡытта ундағы хеҙмәткәрҙәр күптән инде кәңәшмәләр залына йыйылып, шефтары алдында доклад яһар өсөн, донъяларын онотоп, иҫәп-хисап эштәрен тикшерәләр ине. Улар бындай кәңәшмәнең һуңғы тапҡыр ҡасан булғанын да онотҡандар, шуға шефтарын ҡурҡып көтәләр.

Джон Хайцман ингәс, бөтәһе лә аяғүрә баҫты. Ул өҫтәл башындағы креслоһына барып етмәҫтән һөйләй башланы:

- Ултырығыҙ. Бер ниндәй отчет кәрәкмәй. Иғтибар менән тыңлағыҙ, ҡабатлап тормайым. Ваҡыт тар. Шулай итеп. Техас штатында бер вилла бар, бына уның адресы. Ошо вилланы ураткан йөҙ миль арауыҡтағы бөтә ерҙәрҙе һатып алырға бойорам. Ундағы сәнәғәт предприятиеларын да ҡуша һатып алығыҙ, хатта өс тапҡыр артыҡ хаҡ һораһалар ҙа. Күсемһеҙ милектәрҙе һатып алыу буйынса кем шөғөлләнә, хәҙер үк ошо эшкә тотонһон. Кәрәк булһа, бөтөн агенттарығыҙҙы ла йәлеп итегеҙ. Бер аҙна ваҡыт бирәм.

Хеҙмәткәрҙәренең береһе шундуҡ һикереп тороп залдан сығып китте.

Джон Хайцман дауам итте:

- Шундағы бөтә завод-фабрикалар бер ай эсендә һүтелергә тейеш, кәрәк булһа, йәҙәрләгән төҙөләш фирмаларын эшкә егегеҙ. Бер айҙан ул майҙанға тулыһынса үлән сәсегеҙ.

Джон Хайцман залда ултырып ҡалған һуңғы хеҙмәткәргә өндәште:

- Техас штатында "Лотос" исемле бәләкәй генә фирма бар. Шуның менән биш йылға контракт төҙөгөҙ. Техастағы вилла тирәһендәге ерҙәрҙәге биләмәләрҙең проекттарын эшләһендәр. Фирма һораған хаҡты ике тапҡырға арттырығыҙ. Үтәгеҙ.

Ике аҙнанан Джон Хайцман мең ярымлыҡ аудитория алдында сығыш яһаны. Залға ландшафт дизайны буйынса эшкә урынлаштырыусы агентстволар, ботаниктар, агрономдар йыйылғайны. Бөтәһе лә эшкә урынлашырға теләй ине. Етмәһә, рекламала контракттың елле генә суммаһы күһәтелгәйне.

Джон Хайцман сәхнәгә сығып, үҙенә хас булған ҡәтғи тауыш менән бер аҙ уҫалыраҡ итеп һөйләй башланы:

- Тәҡдим ителгән контракттарға ярашлы, һеҙҙең һәр берегеҙгә бушлай ғүмерлеккә ике гектар ер участкаһы биреләсәк. Һайлап алыр өсөн йыйылмалы коттедждарҙың бер нисә проекты тәҡдим ителә һәм улар компания иҫәбенә төҙөләсәк. Биш йыл дауамында ғаилә башлығына контрактта билдәләнгән сумма түләнәсәк. Һеҙҙең төп бурысығыҙ ана шул майҙандарҙы төҙөкләндереү. Баҡса ултыртырға, сәскәләр үҫтерергә, ҡыҫҡаһы, бөтәһе лә матур булһын. Үҫентеләр, орлоҡтар хаҡын компания үҙе ҡаплаясаҡ. Мин һөйләп бөттөм, һорауҙар булмаһа, теләгәндәр контрактҡа ҡул ҡуя ала...

Мең ярым кешенән торған тулы залда тынлыҡ урынлашты. Бер кем дә урынынан тороп, әҙер контракттар ятҡан өҫтәлдәр янына ашыҡманы. Оло йәштәге бер кеше, тынлыҡты боҙоп, һорау бирҙе:

- Сэр, зинһар, әйтегеҙ, һеҙ тәҡдим иткән ерҙәр шул хәтлем зарарлымы әллә?

- Юҡ, - тине Хайцмандың хеҙмәткәрҙәренең береһе. - Был урын, киреһенсә, экологик яҡтан бик таҙа, унда уңдырышлы ер.

- Улайһа, хәйләһеҙ генә яуап бирегеҙ, кешеләр менән ниндәй эксперимент үткәрергә уйлайһығыҙ? - тип, урынынан бер йәш ҡатын һикереп торҙо. - Күптәребеҙҙең балалары бар, мәсәлән, мин үҙ баламды ниндәйҙер ят экспериментка дусар иткем килмәй.

Залдағылар шаулай башланы, "авантюристар", "кешелекһеҙҙәр" "йыртҡыстар", тигән һүҙҙәр ишетелде, кешеләр урындарынан тороп, залдан сыға башланылар. Хайцмандың ярҙамсылары нимәлер аңлатып маташты, төрлө һорауҙарға яуап бирергә тырышты, әммә файҙаһы булманы. Хайцман залдан сығып барыусыларға иҫе китеп ҡараны. Уның уй-хыялдары, өмөтө юҡҡа сыға ине...

**Радик ӨМӨТҠУЖИН тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 10-12-се һандарҙа).**

**✓ Көләү ҡан тамырҙарын да нығыта, ҡан баҫымын түбәнәйтә, ҡандағы шәкәр нормаға килә. Шулай уҡ көләү иң яҡшы кардиокүнегеү иҫәпләнә. 10 минут көләү ярты сәғәт велотренажерҙа шөғөлләнгәнгә тиң.**



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠАСАН КӘЙЕФ ЯҠШЫРАҠ?

■ Ғалимдар йоҡонан ҡасан уяныу яҡшыраҡ икән, тигән һорауға яуап эҙләгән. Насар кәйеф менән уянған кешеләрҙе, һул аяҡ менән торған тип әйтергә яратабыҙ. Был шаярыу түгел, ә уяныу - ул тотош бер фән, ти ғалимдар. Ошоно дәлилләү өсөн психиатрҙар 2602 интерн ярҙамында һынауҙар үткәргән. Уларға махсус датчиктар беркетелгән, улар стажерҙарҙың йөрәк тибешен, көнөнә күпме йәйәү йөрөүен, нисек йоҡлауын, кәйефе тураһында мәғлүмәттәрҙе "теркәп" барған. Датчиктарҙан тыш, психиатрҙар ҙа интерндарҙың кәйефе тураһында һорау алыуҙар алып барған. Асыҡланыуынса, кешенең кәйефе организмдың эске "сәғәтенә" бәйле ритмдан тора икән. Ғалимдар шулай уҡ шундай ҡыҙыҡлы иҫәпләүҙәр ҙә сығарған. Кәйеф кискә 5-тә ныҡ юғары кимәленә етә, ә таңғы 5-тә ул бөтөнләй булмай икән. Йәш табиптар таңғы биштә бик көйһөҙ булған, ә киске 5-тә уларҙың кәйефе күтәрелгән сағы икәнен теркәгән. Әммә йоҡо туймаһа, был ике күрһәткес тә үҙгәргән. Шулай ҙа был кәйефтең мәлен тоторға ынтылышты ысынбарлыҡ итеп ҡабул итергә ярамай, ти ғалимдар. Ул ҡатмарлыраҡ төшөнсә һәм кешенең социаль динамикаһынан, эш графигынан, темпераментынан һәм башҡа факторҙарҙан тора. Тик таңғы 5 барыбер ҙә уяныу өсөн яҡшы ваҡыт түгеллеген хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

■ Ғалимдар көнөнә 10 минут булһа ла көлөгөҙ тигән кәңәш бирә. Бынан тик оторһоғоҙ ғына. Көләү иммунитетты нығыта, инфекциялар менән көрәшеүсе Т-лимфоциттар тип аталған күҙәнәктәрҙе, гамма-интерферон тип йөрөтөлгән аҡһымдарҙы, шулай уҡ В-лимфоциттарҙың тупланышын күтәрә, ә стресс гормоны кортизол түбәнәйә. Шулай уҡ төкөрөктә организмды респиратор сирҙәренән һаҡлаусы тәбиғи антиесемдәр арта. Көләү ҡан тамырҙарын да нығыта, ҡан баҫымын түбәнәйтә, ҡандағы шәкәр нормаға килә. Шулай уҡ көләү иң яҡшы кардиокүнегеү иҫәпләнә. 10 минут көләү ярты сәғәт велотренажерҙа шөғөлләнгәнгә тиң. Аллергия ла көләүҙән ҡурҡа икән. Японияла үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, комедия ҡарағандан һуң аллергендар үҙенең мәкерле эшмәкәрлеген туҡтатып торған, был көләүҙең нервы системаһының ҡайһы бер өлөштәрен нығытыуы менән бәйле. Һәм, иң аҙаҡҡыһы, көләү - тын алыу системаһын нығыта, организмды кислородҡа байыта, үпкәне таҙарта. Көләүҙең күмер оҙайлыҡына йоғонтоһо булыуы ла раҫланған. Юмор тойғоһо булған өлкән кешеләр, ысынлап та, оҙағыраҡ йәшәй.

■ Рауза еҫе хәтерҙе нығыта. Алтынсы класс уҡыусылары менән ҡыҙыҡлы тикшереүүткәргәндәр. Улар инглиз теленән яңы һүҙҙәр ятлағанда өҫтәлгә рауза эфир майы һеңдерелгән таяҡсалар һалырға тейеш булған. Йоҡлағанда ла был таяҡсалар караует янында булһын тигән талап та үтәлгән. Һынауҙарҙың тағы бер этабында инглиз теленән тест эшләгәндә ҡайһы бер уҡыусыларҙың класс партаһында тағы ошо таяҡсалар ятҡан. Тест һөҙөмтәләре бер ниндәй еҫ ҡулланмайынса контроль эш башҡарыусыларҙыҡы менән сағыштырылған. Кем яңы һүҙ ятлағанда һәм йоҡлағанда рауза еҫен ҡулланған, уларҙың һөҙөмтәләре 30 процентҡа юғарыраҡ булып сыҡҡан. Уны класта ҡулланыу һөҙөмтәләрҙе тағы ла арттырған. Ғалимдар фекеренсә, бында еҫ мейегә сигнал биреүсе сифатында сығыш яһай, шуға ла рауза урынына башҡа еҫ ҡулланылыуы ла ихтимал.

ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ...

# БӘХЕТЕ...

## үҙе менән бергә тыуған

**Яҡын күргән ҡалалаштарым араһында ваҡытты тоғро файҙаланған, игелектәр ҡылған, үҙ ваҡытында кәрәкле һүҙҙе әйтә белгәндәре байтаҡ. Шундайҙарҙың береһе - Башҡортостандың атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре, РСФСР-ҙың мәғариф отличнигы, күренекле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, яҙыусы Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге премия лауреаты, ә иң мөһиме - һуғыш осоро балаларын хәстәрләүсе, ҡурсалаусы, крайҙы өйрәнеүсе Фәниә Зәйнулла ҡыҙы Хәмитова тураһында булыр әйтер һүҙем..**

Фәниә Зәйнулла ҡыҙы, тәбиғәт серҙәрен үҙ булмышына һеңдергән, шуларҙан һут, илһам алған, әҙәп төбө - матур ғәҙәт икәнен аңлап, аң-белемгә ынтылышлы, уҡымышлы Ғәйшә менән Зәйнулла Зәйнетдиновтар ғаиләһендә 1939 йылдың 2 апрелендә, Белорет ҡалаһында баш бала булып донъяға килә. Зәйнетдиновтар ҡайҙа ғына йәшәмәһен - Маҡар районындамы, Белореттамы, Сибайҙамы, иң матур, иң күркәм, иң алдынғы ғаиләләрҙең береһе була.

"Мин үҙемде белә-белгәндән уҡытыусы булырға хыялландым. Теләгемә ирешеү хыялы мине Белорет педучилищеһына алып килде. Буласаҡ һөнәремә мөкиббән ғашиҡ инем, шуға ла тырышып уҡыным, уҡыу йортоноң бөтә сараларында ла башлап һәм әйҙәп йөрөүсе булдым", - тип хәтерләй Фәниә Зәйнулла ҡыҙы. Уҡыуҙы тамамлағас, Рәүәт мәктәбенә эшкә юллама ала ул. Әммә тора-бара ул үҙенең белем бәҫен, һөнәр кимәлен күтәреү тураһында уйлана башлай. Маҡсаты артынан Өфөгә юллана. Отҡор йәш уҡытыусы имтихандарҙы уңышлы тапшырып, Башҡорт дәүләт университетының география факультетына ситтән тороп уҡырға инеп тә китә.

Йәшлек һәр саҡ дуҫлыҡҡа, аралашыуға, танышыуға мохтаж. Имтихандарға әҙерләнеү мәлендә янып торған ҡара күҙле, сөм-ҡара сәсле Сибай егете Хәснәтдин Хәмитов менән таныша. "Йәшлегемдең, ғүмеремдең иң матур йылдарында ғүмерлек йәрем - ирем Хәснәтдин Хәмитов менән осраштырған яҙмышыма рәхмәтлемен", - тип, ҙур ғорурлыҡ менән иҫкә ала алтмыш йылдан ашыу, бик алыҫта ҡалған мәлдәрҙе.

Халҡыбыҙҙың "Тыуған ергә ҡарағанда төшкән ер яҡын", тигән әйтеме бар. Был атаҡлы фекер килендәргә төбәп әйтелгән. Шулай итеп, уҙған быуаттың 1959 йылдарында Сибайға килен булып төшә Фәниә. Яңы урында үҙен, үҙ урынын оҙаҡ эҙләмәй. Тәүге хеҙмәт юлын Сибайҙың 2-се мәктәбендә башлай. Ҡаланы үҙ тыуған ереләй күреп, дәртләнеп, башкөллә эшкә сума. Хәснәтдин Хәйбулла улы 1-се мәктәптә физик тәрбиә һәм хәрби әҙерлек уҡытыусыһы булып эшкә урынлаша. Йәш уҡытыусылар ғаиләһе матур, татыу йәшәп ятҡан осорҙа, йәшәү йәмен тағы ла арттырып, балҡытып, баш балалары Зөлфиә тыуа. Сибай килене гел эш менән мәшғүл булһа ла, йәшлек дәртен һәм йәшәү көҙрәтен сарыф итмәй, бер-бер артлы Әлфиә менән Гөлнараны бүләк итә Хәснәтдин Хәйбулла улына.

1960 йылдарҙа Сибайҙа балалар баҡсалары төҙөлә, төрлө учреждениелар күпләп асыла, кадрҙарҙы туплау, уларҙың квалификацияһын үҫтереү, ситтән тороп белем алған педагогтарҙы иҫәпкә алыу, тәрбиәселәр һәм уҡытыусылар тарафынан алдынғы алымдарҙы өйрәнеү, таратыу һәм файҙаланыу буйынса ғәйәт ҙур эштәр башҡарыла.



Ҡыҫҡаһы, мәғариф өлкәһендә уңышлы хеҙмәт итеүселәр барлыҡҡа килә. Әлбиттә, улар араһында Фәниә Хәмитованың да исем шәрифе була. Тәүҙә ул 7-се яңы мәктәптә эшләй. 1964 йылда ҡаланың 4-се мәктәбенә география уҡытыусыһы булып эшкә күсә. "Белем кимәле йылап үҫһә, тәжрибә тупланһа, хеҙмәтеңдән сифаты күтәрелә, тигән һығымтаға килдем, - ти Ф. Хәмитова. - Шуға ла эшкә тағы ла ҡыҙыуыраҡ һәм ҡыйыу тотондом. Йәш белгес булараҡ, уҡыу йортонда кабинеттан кабинетҡа күсеү системаһын индерҙем. "Үҙ ереңде ярат" исемле клуб булдырҙым. Ваҡытымды йәлләмәй, төбәгебеҙҙең матур урындарына туристик походтар ойоштторҙом. Улай ғына ла түгел, республика күләмендә барған турслет ярыштарынан призлы урындар яулап ҡайта инек. Был ҡаланың мәғариф бүлеге өсөн ҙур ҡаҙаныш булды".

Тағы бер ыңғай тәжрибәне тормошҡа ашырыу уның исеме менән бәйләнгән. Юғары белемле уҡытыусыны 4-се мәктәп директорының уҡытыу-тәрбиә эше буйынса урынбаҫар итеп үрләтәләр. Тап шул осор арауығында ҡала етәкселеге тәҡдиме менән предприятиелар, ойошмалар, эшсе бригадалар мәктәптәрҙе, айырым кластарҙы шефлыҡҡа алыу алымдарын бойомға ашыра башлай. Яңы йүнәлеш ҡала мәктәптәрендә үтә ныҡ көсөргәнеш талап итә. Ниәтләгән - тауҙы тишкән, тигәндәй, ҡаланың күҙ терәп торған эре-эре предприятиелары уҡыусыларға хеҙмәт тәрбиәһе биреүҙә ғәйәт ҙур өлөш индерә. Дүртенсе мәктәптең директорҙары А.П. Тарасова һәм уның урынбаҫары Ф.З. Хәмитова был тәжрибәне ентекләп өйрәнеп, йомғаҡлап, Мәскәүҙә КПСС-тың Үҙәк комитетында сығыш яһай хатта. Сибайҙы бөтөн илгә танытҡан мөһим күренеш була был ваҡиға.

Фәниә Зәйнулла ҡыҙы шулай мәғариф бүлеге һәм ҡала етәкселеге алдында ышаныслы һәм яуаплы шәхес булараҡ таныла. Һөҙөмтәлә, 4-се мәктәптә ун дүрт йыл эшләгәс, уны ҡалала яңы булдырылған мәктәп-ара уҡытыу производство комбинатына директор урынбаҫары итеп тәғәйенләйҙәр. Ошолай, яңы бурыстар, яңы маҡсаттар менән башлана ла инде ихлас етәкселек итеүҙең сағыу тағы бер миҙгеле. Артабан ул директор вазифаһын биләй. Әлбиттә, ауырлыҡтары ла, көйөнөстәре лә аҙ булмағандыр. "Ә ҡасан һуң мәктәп эше еңел булған! Шулай ҙа хеҙмәт ҡотон өркөтмәһәң, маҡсатыңа ирешәһең, эш ҡарышмай ул", - ти Фәниә Хәмитова. Яңылығы һәм уңышлы яғы шул була был уҡыу йортонон: ҡала уҡыусылары төп белем алыуҙан тыш, төрлө гуманитар һәм эшсе һөнәрҙәрҙе үҙләштерә. Уҡыу барышы предприятие һәм мәктәп араһындағы ышаныслы хеҙмәттәшлек аша атҡарыла һәм нығытыла.

Ошо белем биреү усағының нигеҙбаҙаһында "ПолиТЭК" лицейы асыла. Һәр башланған эште лә урынеренә еткереп, етеҙ, күңел биреп башҡарырға өйрәнгән етәксегә яңы эште башлап ебәреү әллә ни ҡыйын булмай. Тәү баштан уҡыу йортоноң йөрәген тәшкил иткән көслө эшһөйәр коллектив туплана. Яҙмышы уға йәнә арымаҫ-талмаҫ, һөйөнөслө-көйөнөслө мәлдәрҙән торған тағы бер ғүмер арауығы бүләк итә. Ул үҙенең ике тиҫтәнән ашыу ғүмерен етәксе вазифаһында "ПолиТЭК" белем биреү лицейына арнай. Артабан етәкселек уға был лицейҙа һәм Сауҙа-финанс колледжында - бер юлы ике уҡыу йортонда директор вазифаһын атҡарыу бурысын йөкмәтә. 1994 - 1996 йылдарҙа ике урында ла етәксе вазифаһын уңышлы үтәй ул. Тарихҡа инеп ҡалған оло сарала, Сауҙа-финанс колледжының презентацияһында, Башҡортостан Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов ҡатнаша. Күләмле ҙур ижади эш тәжрибәне республикабыҙҙың Мәғариф министрлығы коллегияларына сығарыла. Төптән уйлап ҡараһаң - бөйөк хеҙмәт! Ҡайнар йөрәкле, киң эрудициялы, алдан юл ярып барыусы оло шәхес кенә булдыра ала бындай үтә ҡатмарлы һәм яуаплы эштәрҙе. Фәниә Зәйнулла ҡыҙына бик күп миҙалдар, иҫәп-хисапһыҙ маҡтау грамоталары менән бүләкләнеүе - хеҙмәтенә күрә хөрмәт тип, һис икеләнмәйенсә ҡабул итергә кәрәк.

Уҡытыусыларҙың уҡытыусыһы хаҡлы ялға сыҡһа ла, йәмәғәт эштәрендә ихлас ҡатнаша. 2005 йылда, Сибай ҡалаһының 50 йыллығына арнап, уның башланғысында Балалар ижады үҙәгендә Мәғариф музейы булдырыла. Фәниә Хәмитова әлеге мәлдә Һуғыш осоро балаларын хәстәрләү, ҡурсалау эштәре менән мәшғүл. Ҡалала яҡынса ике меңдән ашыу һуғыш осоронда тыуған оло йәштәгеләр бар. Ил алдында хөрмәт ҡаҙанған, дан алғандарҙың үткәнен, тормош - көнкүрешен, рухи донъяһын тәрәндән өйрәнеп, ҡулынан килгәнсе ярҙам итә уларға Фәниә Зәйнулла ҡыҙы.

Бар көсөн мәғариф өлкәһенә хеҙмәт итеүгә арнаған Фәниә Хәмитова өсөн донъя йәме - әлбиттә, балалар. Ул, өс ҡыҙым - өс таянысым бар, тип шатлана. Тормош ҡануны шулай: йәшәйешең, хеҙмәт шөғөлөң балаларыңа өлгө бирерлек булһа - улар һине ҡабатлай. Тимәк, был йүнәлештә лә ғүмер бушҡа уҙмаған. Әйе, ул ғүмер буйына тормоштан мәғжизә көтөп ятманы, уны үҙе булдырҙы. Ошо көндәрҙә мәғариф ветеранына 85 йәш тула. Ил - көн - кеше яҙмыштары менән янып - көйөп йәшәүен дауам итә. Сибай ҡалаһына алтмыш йылдан ашыу хеҙмәт иткән юбилярға һаулыҡ-сәләмәтлек, күңел тынысылығы, балалар ҡыуанысы теләйек.

**Таңһылыу ҒӘЙНУЛЛИНА.**

✓ ***Фитыр саҙаҡаһы өсөн урта хәлле кешегә йән башына 4 ҡаҙаҡ бойҙай йәки 8 ҡаҙаҡ арпа биреү, хәлле кешегә йән башына 4 ҡаҙаҡ хөрмә, йә 8 ҡаҙаҡ йөҙөм биреү фарыз (бер ҡаҙаҡ - уртаса 400 грамм).***



*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ФИТЫР САҘАҠАҺЫ КЕМГӘ?



**Байлығы булған һәр мосолманға фитыр саҙаҡаһы биреү вәжиб. Фитыр саҙаҡаһы ла, зәкәт шикелле үк, йылға бер мәртәбә бирелә.**

Фитыр саҙаҡаһы ураҙаларҙағы кәмселектәрҙе бөтөрөү өсөн бирелә, сөнки ай буйы ураҙа тотҡанда һәр мосолман барыбер бөләкәс кенә булһа ла гонаһ ҡыла. Шуға ла кәффәрәт, таҙарыныу өсөн, гонаһтарҙы бөтөрөү өсөн ошо саҙаҡаны бирәбеҙ. Хәлле кеше был ғәмәлде мотлаҡ үтәй, хатта донъя ҡуйғас та уның вариҫтары уны гүр саҙаҡаһы итеп бирә. Ярлы кеше был саҙаҡаны бирмәй, киреһенсә, уға биреү дөрөҫ була. Балаларҙың фитыры тураһында ата-әсәһе хәстәрләргә тейеш. Хатта ғәйет намаҙынан алда тыуған йәш бала өсөн дә бирелә фитыр саҙаҡаһы.

Фитыр саҙаҡаһы өсөн урта хәлле кешегә йән башына 4 ҡаҙаҡ бойҙай йәки 8 ҡаҙаҡ арпа биреү, хәлле кешегә йән башына 4 ҡаҙаҡ хөрмә, йә 8 ҡаҙаҡ йөҙөм биреү фарыз (бер ҡаҙаҡ - уртаса 400 грамм). Улар урынына ошо ризыҡтарҙың хаҡтарына тап килерлек итеп аҡса биреү ҙә дөрөҫ булыр. Хәҙистә: "Ғәйет көнөндә мохтаждарға фитыр саҙаҡаһы биреп, һораныуҙарынан ҡотҡарығыҙ", - тиелә. Икенсе төрлө әйткәндә, һеҙ байрам иткән көндәрҙә мохтаждар ҙа шатланһын, тамаҡтары туҡ булһын.

**Фитыр саҙаҡаһын биргәндә һәм алғанда уҡыла торған доғалар:**

*Саҙаҡа биргән кеше шулай тип доға ҡыла:* "Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим! Раббәнә, тәкаббәл миннә иннәкә әнтәс-сәмиғүл-ғәлиим". Йә Раббым! Беҙҙән уны ҡабул ит! Сөнки Һин Ишетеүсе һәм Белеүсеһен. Әмиин!

*Фитыр саҙаҡаһын алыусы кеше шулай тип доға ҡыла:* "Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим! Аллаһүммә тәкаббәл фитратәһү үә сыйәмәһү, үәстәджиб доғаәһү, үәғфир ҙунүбәһү, үә әккид иимәәнәһү үә әкҫир әмүәәләһү, үә үәффиҡһүү ғәләә хайри мәкаасыйдиһ". Йә, Аллаһым! (биреүсенең исеме, атаһының исеме әйтелә) фитыр саҙаҡаһын үә ураҙаһын, доғаһын ҡабул ҡыл һәм гонаһтарын ярлыҡа, һәм уның иманын ҡеүәтлә, малдарын арттыр һәм уны хәйерле маҡсаттарына ирештер.

*БАҠСА*

# АҒАСТАРҘЫ ҠЫРҠЫУ МӘЛЕ



**Март аҙағы-апрель башында беҙҙең төбәктә әле ҡар ята. Әммә йәй яҡшы уңыш алыу өсөн ошо мәлдә ҡайһы бер эштәрҙе башҡарып өлгөрөргә кәрәк.**

➔ **Тәҙрә төбөндәге үҫентеләр себенләп китһә, нимә эшләргә?**

Уларҙан ҡотолоуы еңел түгел. Ваҡ себен үҫентегә һыуҙы артыҡ ҡойоуҙан барлыҡҡа килә. Иң тәүҙә, йәбештереүсе ҡағыҙҙар һалып ҡарарға кәрәк. Шулай уҡ "Актор" йәки "Фитоферм" тигән препараттар менән эшкәртергә була.

➔ **Апрелдә еләк түтәлдәренә ҡарау кәрәкме?**

Тәүҙә уларҙың ниндәй хәлдә икәнен тикшерергә кәрәк. Әгәр ҙә япраҡтар ҡарайһа, йәшелсә ябыу өсөн тәғәйенләнгән махсус аҡ ябма менән ябып торорғоҙ. Ябма аҫтында йәшел япраҡтар сыға башлаһа, барлыҡ ҡарайған япраҡ һәм һабаҡтарҙы ҡырҡып ташлағыҙ, тупраҡты йомшартығыҙ һәм ябма менән тағы ла ябығыҙ. Яңы япраҡтарҙан "розетка"лар барлыҡҡа килгәс, аммиак селитраһы иретмәһе һибергә. Һауа 5 градустан юғарыраҡ күтәрелгәс, мочевина иретмәһе менән ашларға. Ике төр ашлама ла түбәндәгесә иҫәпләнә: 10 л һыуға 20 г. Ул 2 кв.метр ерҙе эшкәртергә етә. Апрелдә ошо рәүешле барлыҡ еләктәрҙе лә ашлайҙар.

➔ **Ҡаты тәбиғәт шарттарына иғтибар итмәй, күп баҡсасылар йөҙөм дә үҫтерә. Апрелдә йөҙөмгә тәрбиә кәрәкме, уның һабаҡтарын ҡырҡырға яраймы?**

Был мәлдә йөҙөм һабаҡтары терелә, шуға ла уны көҙҙән ҡырҡалар. Апрелдә ҡырҡһаң, һут ағып, йөҙөмдөң бөрөләре ҡоясҡа янасаҡ. Бары тик уның ябмаһын алырға ғына кәңәш ителә, сөнки көслө һалҡындар башҡаса булмаясаҡ, ә -3, -4 градус һалҡынды был культура яҡшы кисерә.

➔ **Раузаларҙың ябмаһын алырға кәрәкме?**

Быны йәйләп башҡарырға кәрәк. Апрелдә улар урамдағы һауа температураһына күнегә генә әле. Әгәр ҙә ябма бер нисә ҡатлы икән, мәҫәлән, башта шыршы ботаҡтары, уның өҫтөнән туҡыма ябма икән, уларҙың береһен һәм бер яҡтан - төньяҡтан ғына алығыҙ. Был саҡта ҡояш нуры ботаҡтарҙы яндырмаясаҡ. Тулыһынса ябманы алып ташлауҙы болотло көндә башҡарыу ҡулай. Бер юлы ҡороған ботаҡтарҙы ҡырҡырға, ҡороған япраҡтарҙы йыйып ташларға, ҡыуаҡтарҙы 3 процентлы баҡыр купоросы (1 л һыуға 30 г баҡыр купоросы) менән эшкәртергә һәм ҡабаттан ябырға. Майға ҡарай раузаларҙы тулыһынса асырға була.

➔ **Үҫемлектәрҙе баҡыр купоросы менән эшкәртеү нимә бирә? Уны нисек дөрөҫ башҡарырға кәрәк?**

Баҡыр купоросы ҡоротҡостарҙан һәм бәшмәк сирҙәренән һаҡлай. Ағастарҙы, емеш ҡыуаҡтарын, шулай уҡ декоратив үҫентеләрҙе бөрөләр асылып, япраҡтар күренә башлағансы эшкәртәләр. Бының өсөн 3 процентлы баҡыр купоросы алып, үҙегеҙ ел иңғайына тороп, ботаҡ һәм олондарға һиптерергә. Ҡара ҡарағат, һырғанаҡ әле үк бөрөләнгән, уларҙы 1 процентлы баҡыр купоросы (1 л һыуға 10 г) менән эшкәртергә ярай.

➔ **Түтәлдең әҙерлеген нисек белергә?**

Әле беҙҙең төбәк өсөн баҡса асыҡ һауаға нимәләр сәсеү тураһында һүҙ йөрөтөү иртәрәк. Ә былай тупраҡтың әҙерлеген түбәндәгесә тикшерәләр: ергә көрәкте ҡаҙайһың, ул тулыһынса тупраҡҡа инә икән, редис, руккола, петрушка ултыртырға мөмкин.

➔ **Апрель агас ҡырҡыу мәле лә. Бында ниндәй ҡағиҙәләр бар?**

Көҙөн барлыҡ культураларҙы ла ҡырҡырға ярамай. Ә бына апрелдә барлыҡ ағастарҙы һәм ҡыуаҡтарҙы ла киҫергә була. Шулай ҙа иртә яҙ сәскә атасаҡ декоратив ҡыуаҡтарға теймәҫкә, юғиһә, улар сәскә атып өлгөрмәйәсәк. Уларҙы сәскә атҡандан һуң ҡырҡалар. Гортензия кеүек йәйҙең икенсе яртыһында сәскә атыусы сәскәләрҙе лә әле ҡырҡалар. Алмағас, груша, сливаны бөрөләр асылғансы ҡырҡып өлгөрөргә кәрәк.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

### Һорауҙармы, раҫлауҙармы?

Артабан барыр һәм "практик ҡулланманы" уҡыр алдынан беҙгә бер генә теләкте һайларға кәрәк буласаҡ. Бер генә. Уның енетекле һәм аныҡ формулировкаға эйә булыуына иғтибар итегеҙ. Мәҫәлән, өй алырға ғына теләү етерлек түгел. Һеҙ уның ҙурлығын, стеналарының төҫөн, ваннала ниндәй плитка булырын һ.б. белергә тейешһегеҙ. Әгәр теләгегеҙ етерлек кимәлдә фокуста булмаһа, һеҙ бары тик таралған тулҡындарҙы ғына йыясаҡһығыҙ һәм теләгән һөҙөмтәгә өлгәшә алмаясаҡһығыҙ. Быны ни өсөн беҙгә өйгә эште мөмкин тиклем ентекле итеп башҡарырға кәрәк. Теләгегеҙҙең аныҡ формалары ҡуҙалланһа, ике ысулдың береһен һайларға тура килер: һорауҙармы, әллә раҫлауҙармы?

Тәүгеһенең асылы шунда: Йыһанға һорауҙар ебәреп, унан килгән яуаптарҙы табыр өсөн ағымдағы хәл-ваҡиғаларҙы иғтибар менән күҙәтеп барырға кәрәк. Яуаптар һәр саҡ билдәләр йәки ваҡиғалар рәүешендә килә. Осраҡлылыҡ булмай. Һеҙгә осраҡлы булып күренгән ваҡиғалар бары тик уятыу, һелкетеп алыу, битарафлыҡтан арындырыу өсөн генә кәрәк.

Әгәр элекке дуҫығыҙ менән осрашырға теләһәгеҙ, әммә уның тураһында бик күп йылдар хәбәрҙәр булмаһаға, ә иртәгәһенә ҡапыл уның менән урамда осрашһағыҙ, барлыҡ эштәрегеҙҙе ҡалдырып, ваҡытығыҙҙың минутына тиклем планлаштырылғанын онотоп, тотош көнөгөҙҙө уның менән үткәреүгә бағышлағыҙ. Тап ул һеҙгә көнгөҙәк һорауҙарығыҙға яуап табырға ярҙам итер. Һеҙ миңә ышанмайһығыҙ, шулай бит? Әммә был мине һис тә борсомай: бары тик мин әйткәнсә эшләп ҡарағыҙ!

Был ысулдың асылы шунда: һорауығыҙҙы аныҡ яҙып, уға яуап килгәндә күтәргә кәрәк. Һорау шундай булырға мөмкин: "Үҙем һәм ғаиләм өсөн ниндәй марка пианино һатып алһам яҡшыраҡ булыр?" Ниндәй һайлау эшләргә белмәһәгеҙ, һорау ысулын ҡулланығыҙ. Әгәр нимә теләгәнегеҙҙе аныҡ белһәгеҙ, раҫлау ысулын ҡулланығыҙ.

Раҫлау ысулы: "Әгәр һорағанығыҙҙы алғанға ышанмаһағыҙ, тимәк, уны мотлаҡ аласаҡһығыҙ". Бары тик теләгегеҙ ҡабул булған кеүек йәшәгеҙ. Ваҡытты әрәм итмәгеҙ, күңел асығыҙ, үҙегеҙҙән шут яһағыҙ, алйотланығыҙ! Ишектән ингәс тә, барыһын да аптыратып, ҡысҡырып берәй нәмә әйтеп ҡуйығыҙ. Үҙегеҙҙе теләгегеҙгә өлгәшкән кеше кеүек тотоғоҙ. Хәҙер, моғайын, был кәңәштең ни тиклем һөҙөмтәле икәнлеген аңлағанһығыҙҙыр, моғайын. Үҙегеҙҙе теләгән нәмәгеҙгә эйә булған кеше кеүек тотһағыҙ, һеҙ тараҡтан тулҡындың көсө һәм тотороҡлолого арта һәм барыһы ла тормошҡа аша.

### Был нисек башҡарыла һәм уңышты нисек үлсәргә?

Әйҙәгеҙ, был бүлекте өҫтәмә кәңәштәр менән йомғаҡлайыҡ. Һеҙ мәғлүмәттән туйғанһығыҙ һәм ваҡытығыҙҙы гүмер буйы китап уҡырға сарыф итергә теләмәйһегеҙ. Шуға күрә "Һорағыҙ - алырһығыҙ" принцибының асылын бер нисә һүҙҙә аңлатайыҡ.

Тормошоғоҙҙа бөтә нәмә һеҙҙең үтенестәрегеҙ һәм инаныуҙарығыҙ һөҙөмтәһе булып тора. Файҙалы раҫлауҙарҙы ҡулланыу өсөн мөмкин булған барлыҡ мөмкинлекте файҙаланығыҙ.

Әгәр уның ҡуҙлегәнән ҡараһаң, һәр кеше үҙенсә хаҡлы. Шуға башҡалар менән бәхәсләшеп, энергияғыҙҙы әрәм итмәгеҙ. Хыялығыҙҙы үҙегеҙ өсөн һаҡлағыҙ.

**Пьер МОРАНСИ.**



## 8 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 Телеканал "Доброе утро".
09.00, 03.00 Новости.
09.05 Премьера. "АнтиФейк". (16+).
09.45 "Жить здорово!" (16+).
10.35, 11.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. (16+).
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.50, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. (16+).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". (16+).
18.05 "Мужское / Женское". (16+).
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". (16+).
21.00 "Время".
21.45 Премьера. "Такси под прикрытием". Т/с (16+).
00.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Пусть не говорят, пусть читают". (16+).
00.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Мелодии моей жизни". (16+).
01.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Летописи конца времен". (16+).
02.25, 03.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Кот Шрёдингера". (16+).
03.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Гори огнем!". (16+).
04.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обязательно к прочтению". (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 05.10, 05.41, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 Утро России.
05.07, 05.35, 06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
09.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
09.30 Доброе утро, республика! (12+).
09.55 О самом главном. (12+).
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". (12+).
14.55 "Наши". (12+).
16.30 "Малахов". (16+).
21.20 "Алла-такси". Т/с (12+).
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым.
02.05 "Тайны следствия". Т/с (12+).
03.50 "Морозова". Т/с (16+).
04.45 Перерыв в вещании.

### БСТ

**07.00 "Сәләм".**
**10.00 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. (12+).**
**10.45 "Ҡурай даны". (12+).**
**11.00 Новости недели (на рус.яз). (12+).**
**11.45, 13.45, 17.45, 18.15, 04.00 Интервью. (12+).**
**12.00 Новости СВО (на рус. яз). (12+).**
**12.15 Письма солдатам. (12+).**
**12.30 Счастливый час. (12+).**
**13.30, 18.30, 22.30, 01.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 00.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. (6+).**
**15.15 "Этно-краса". (6+).**
**15.30 Преград. Net. (6+).**
**15.45 "Нурбостан сәйәхәте". М/с (6+).**
**16.00 Башҡорттар. (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30, 06.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45, 20.15, 06.15 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**17.00 Республика LIVE #дома. (12+).**
**18.00 Специальный репортаж. (12+).**
**19.00, 20.30, 04.15, 05.15 Телецентр. (12+).**
**20.00 Сәңгелдәк. (6+).**
**22.00, 03.30 Тайм-аут. (12+).**
**23.00 Золотой фонд Башкирского телевидения. (12+).**
**01.30 Спектакль "Среда, среда". (12+).**

## 9 АПРЕЛЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 Телеканал "Доброе утро".
09.00, 03.00 Новости.
09.05 Премьера. "АнтиФейк". (16+).
09.45 "Жить здорово!" (16+).
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. (16+).
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". (16+).
18.05 "Мужское / Женское". (16+).
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". (16+).
21.00 "Время".
21.45 Премьера. "Такси под прикрытием". Т/с (16+).
00.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Произвольная программа". (16+).
00.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". (16+).
01.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обман веществ". (16+).
02.25, 03.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". (16+).
03.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Неформат". (16+).
04.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 05.10, 05.41, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 Утро России.
05.07, 05.35, 06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
09.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
09.30 Доброе утро, республика! (12+).
09.55 О самом главном. (12+).
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". (12+).
14.55 "Наши". (12+).
16.30 "Малахов". (16+).
21.20 "Алла-такси". Т/с (12+).
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым.
02.05 "Тайны следствия". Т/с (16+).
03.50 "Морозова". Т/с (16+).
04.45 Перерыв в вещании.

### БСТ

**07.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". (12+).**
**10.45 Автограф. (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 06.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 18.15, 04.00 Интервью. (12+).**
**12.00 Тайм-аут. (12+).**
**12.30 Счастливый час. (12+).**
**13.30, 18.30, 22.30, 01.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 00.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. (6+).**
**15.15 "Ат уйнатып. Битва командиров". (6+).**
**15.45 "Мультфильмы". М/ф (6+).**
**16.00 "Бай". (12+).**
**16.45, 20.15, 06.15 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**17.00, 22.00, 03.30 Республика LIVE #дома. (12+).**
**17.45 Криминальный спектр. (16+).**
**18.00 Письма солдатам. (12+).**
**19.00, 20.30, 04.15, 05.15 Телецентр.(12+).**
**20.00 Сәңгелдәк. (6+).**
**23.00 Күстәнәс. Миляуша Кидрасова. (12+).**
**23.30 Караоке по-башкирски. (12+).**
**01.30 Спектакль "Молодые сердца". (12+).**

## 10 АПРЕЛЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 Телеканал "Доброе утро".
09.00, 03.00 Новости.
09.05 "Жить здорово!" (16+).
09.55, 12.00, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. (16+).
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.20 "Ураза-Байрам". Трансляция из Уфимской соборной мечети.
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". (16+).
18.05 "Мужское / Женское". (16+).
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". (16+).
21.00 "Время".
21.45 Премьера. "Такси под прикрытием". Т/с (16+).
00.10 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". (16+).
00.50 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". (16+).
01.35 ПОДКАСТ.ЛАБ "Пусть не говорят, пусть читают". (16+).
02.20, 03.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Все хотят летать". (16+).
03.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Гори огнем!". (16+).
04.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Театральный подкаст". (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 05.10, 05.41, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 Утро России.
05.07, 05.35, 06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
09.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
09.30 О самом главном. (12+).
10.30, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.00 Праздник Ураза-Байрам. Прямая трансляция из Московской Соборной мечети.
11.55, 17.30 "60 минут". (12+).
14.55 "Наши". (12+).
16.30 "Малахов". (16+).
21.20 "Алла-такси". Т/с (12+).
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым.
02.05 "Тайны следствия". Т/с (16+).
03.50 "Морозова". Т/с (16+).
04.45 Перерыв в вещании.

### БСТ

**07.00, 10.00 "Праздник веры и добра". (12+).**
**07.30, 18.30, 22.30, 01.00 Новости (на баш. яз).**
**07.45 Надо знать. (12+).**
**08.00 "Полюс времени". Д/ф (12+).**
**09.00, 19.00 "Ураза Байрам". Прямая трансляция из Уфимской Соборной мечети "Ляля-Тюльпан". (12+).**
**11.00 Гора новостей. (6+).**
**11.15 Сулпылар-2024. (6+).**
**11.45 Апчхи. (6+).**
**12.00 Аль-Фатиха. (12+).**
**12.30, 01.30 Спектакль "Мулла". (12+).**
**14.45 Ап-асык. (12+).**
**15.30 Йома. (12+).**
**16.15 "100 имен Башкортостана". (12+).**
**16.45, 20.15, 06.15 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**17.00 Республика LIVE #дома. (12+).**
**18.00, 03.30 Тормош. (12+).**
**20.00 Сәңгелдәк. (6+).**
**20.30 "Святое братство". Д/ф (12+).**
**21.15 Письма солдатам. (12+).**
**21.30, 06.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Историческая среда. (12+).**
**23.00 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. (12+).**
**00.00 Бәхетнамә. (12+).**
**04.00 Интервью. (12+).**
**04.15, 05.15 Телецентр. (12+).**

## 11 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 Телеканал "Доброе утро".
09.00, 03.00 Новости.
09.05 Премьера. "АнтиФейк". (16+).
09.45 "Жить здорово!" (16+).
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. (16+).
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". (16+).
18.05 "Мужское / Женское". (16+).
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". (16+).
21.00 "Время".
21.45 Премьера. "Такси под прикрытием". Т/с (16+).
00.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Свидетели Эйзенштейна". (16+).
00.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". (16+).
01.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". (16+).
02.25, 03.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". (16+).
03.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обязательно к прочтению". (16+).
04.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 05.10, 05.41, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 Утро России.
05.07, 05.35, 06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
09.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
09.30 Доброе утро, республика! (12+).
09.55 О самом главном. (12+).
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". (12+).
14.55 "Наши". (12+).
16.30 "Малахов". (16+).
21.20 "Алла-такси". Т/с (12+).
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. (12+).
02.05 "Тайны следствия". Т/с (16+).
03.50 "Морозова". Т/с (16+).
04.45 Перерыв в вещании.

### БСТ

**07.00 "Сәләм".**
**10.00 Үткән ғүмер. (12+).**
**10.30 "Дорога к храму". (6+).**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 06.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 16.15, 17.00, 04.00 Интервью. (12+).**
**12.00 Историческая среда. (12+).**
**12.30, 03.00 Счастливый час. (12+).**
**13.30, 18.30, 22.30, 01.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 00.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. (6+).**
**15.15 Сулпылар. (6+).**
**15.45 Городок АЮЯ. (6+).**
**16.00 Дознание. (16+).**
**16.45, 20.15, 06.15 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**17.15 История признания. (12+).**
**17.45 Криминальный спектр. (16+).**
**18.00 Башҡорттар. (6+).**
**19.00, 20.30, 04.15, 05.15 Телецентр. (12+).**
**19.45 Мама. (12+).**
**20.00 Сәңгелдәк. (6+).**
**22.00 Республика LIVE #дома. (12+).**
**23.00 Колесо времени. (12+).**
**01.30 Спектакль "Таштугай". (12+).**

## 12 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 Телеканал "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 Премьера. "АнтиФейк". (16+).
09.45 "Жить здорово!" (16+).
10.35, 11.20, 14.15, 18.30 Информационный канал. (16+).
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 Премьера. "Давай поженимся!". (16+).
16.00 "Мужское / Женское". (16+).
16.55 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. (16+).
18.00 Вечерние новости.
19.20 "Поле чудес". (16+).
20.35, 21.45 "Сегодня вечером". (16+).
21.00 "Время".
22.45 "Матадор". (16+).
23.45 "Голос". Новый сезон. Прямой эфир. (12+).
01.50 ПОДКАСТ.ЛАБ "Космические истории". (16+).
02.35 ПОДКАСТ.ЛАБ "Мелодии моей жизни". (16+).
03.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Произвольная программа". (16+).
04.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Пусть не говорят, пусть читают". (16+).
04.50 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 05.10, 05.41, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 Утро России.
05.07, 05.35, 06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
09.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
09.30 Доброе утро, республика! (12+).
09.55 О самом главном. (12+).
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". (12+).
14.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. (12+).
16.30 Прямой эфир. (16+).
21.30 "Удивительные люди. Новый сезон". (12+).
23.55 "Салют-7". Х/ф (12+).
02.00 "Охота на пиранью". Х/ф (16+).
04.11 Перерыв в вещании.

### БСТ

**07.00 "Сәләм".**
**10.00, 18.00 "Йома". (6+).**
**10.30 Моя планета - Башкортостан. (12+).**
**11.00 Атлас Баженова: Башкортостан. (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 06.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Криминальный спектр. (16+).**
**12.00, 13.45, 17.45, 21.15 Интервью. (12+).**
**12.15, 19.45, 06.00 История одного села. (12+).**
**12.30 Счастливый час. (12+).**
**13.30, 18.30, 22.30, 05.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 01.30 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. (6+).**
**15.15 Лит-ра. (6+).**
**15.45 "Этно-краса". (6+).**
**16.00 Хазина. (12+).**
**16.45, 20.15, 06.15 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**17.00, 05.30 Республика LIVE #дома. (12+).**
**19.00 Честно говоря. (12+).**
**20.00 Сәңгелдәк. (6+).**
**20.30 "Ете егет". (12+).**
**22.00 Своих не бросаем. (12+).**
**22.15 Письма солдатам. (12+).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. (12+).**
**23.45 Все песни о прекрасном… (12+).**
**02.30 Спектакль "Мелодии весны". (12+).**

## 13 АПРЕЛЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
09.00 "Умницы и умники". (12+).
09.45 "Слово пастыря". (0+).
10.00 Новости.
10.15 "Вызов". Трансляция старта и приземления первого космического киноэкипажа. Д/ф (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Поехали!". (12+).
13.10 "Звезда по имени Гагарин". Ко Дню космонавтики. Д/ф (12+).
14.15 "Спасение в космосе". Д/ф (12+).
16.05 "Все звезды русского космоса". Д/ф (12+).
17.00 Премьера. "Я люблю мою страну". (0+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Эксклюзив". (16+).
19.10 "Михаил Задорнов: вся жизнь". Часть 1-я. (16+).
20.05 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?". (12+).
21.00 "Время".
21.35 "Голос". Новый сезон. (12+).
23.35 Феномен якутского кино в "Закрытом показе" с Александром Гордоном. Премьера. Фильм "Не хороните меня без Ивана". (16+).
03.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". (16+).
03.50 ПОДКАСТ.ЛАБ "Не лыком шиты". (16+).
04.35 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обман веществ". (16+).
05.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Драгоценные истории". (16+).

### РОССИЯ 1

05.00 Утро России. Суббота.
08.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
08.20 Местное время. Суббота.
08.35 "По секрету всему свету".
09.00 "Формула еды". (12+).
09.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "В кругу друзей".
12.50 "Доктор Мясников". (12+).
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" (16+).
17.50 "Привет, Андрей!" (12+).
21.00 "Ивушка плакучая". Х/ф (16+).
00.45 "Дорогая подруга". Х/ф (12+).
04.20 "Таблетка от слёз". Х/ф (16+).
06.01 Перерыв в вещании.

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**07.45 "Ҡурай даны". (12+).**
**08.00 "Бай". (12+).**
**08.30 "Ете егет". (12+).**
**09.15, 19.00 Письма солдатам. (12+).**
**09.30 Новости СВО (на рус. яз). (12+).**
**09.45 Своих не бросаем. (12+).**
**10.00 Детей много не бывает. (6+).**
**10.30 Елкән. (6+).**
**11.00 Гора новостей. (6+).**
**11.15 "Ат уйнатып. Битва командиров".**
**11.45 Апчхи. (6+).**
**12.00 Сулпылар. Финалисты-2023. (6+).**
**12.30 Күстәнәс. (12+).**
**13.00 Автограф. (12+).**
**13.30 Башҡорттар. (6+).**
**14.00 Дарю песню. (12+).**
**16.00, 04.45 Колесо времени. (12+).**
**17.00 XXXII Всероссийский фестиваль Композиторов Поволжья и Приуралья. (12+).**
**19.15, 01.50 Вопрос + Ответ = Портрет. (6+).**
**20.00 Сәңгелдәк. (6+).**
**20.15, 06.15 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**20.30 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. (12+).**
**21.30, 06.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 03.30 Республика LIVE #дома. (12+).**
**22.30, 04.00 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Караоке по-башкирски. (12+).**
**23.45 "Курай-шоу". (12+).**
**00.15 Спектакль "Индийская насмешница". (12+).**
**02.30 Счастливый час. (12+).**
**05.45 Аль-Фатиха. (6+).**

## 14 АПРЕЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Свидетели Эйзенштейна". (16+).
06.55 Играй, гармонь любимая! (12+).
07.40 "Часовой". (12+).
08.10 "Здоровье". (16+).
09.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. (12+).
09.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. (12+).
10.15 Премьера. "Жизнь своих". (12+).
11.05 Премьера. "Повара на колесах". (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Панцирь". Небесный щит". Ко Дню войск противовоздушной обороны. Д/ф (12+).
13.10 "Видели видео?" (0+).
14.50 "Я шагаю по Москве". К 60-летию выхода фильма. Х/ф (12+).
16.20 "Лучше всех!" Новый сезон. (0+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. (16+).
21.00 "Время".
23.00 "Что? Где? Когда?" Весенняя серия игр. (16+).
00.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обман веществ". (16+).
00.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Баден-Баден". (16+).
01.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Неформат". (16+).
02.25 ПОДКАСТ.ЛАБ "Произвольная программа". (16+).
03.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Мелодии моей жизни". (16+).
03.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Кот Шрёдингера". (16+).

### РОССИЯ 1

06.05, 01.05 "С приветом, Козаностра". Х/ф (16+).
08.00 Местное время. Воскресенье.
08.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
09.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
12.00 Большие перемены.
13.00 "Последний шанс". Х/ф (12+).
17.50 "Песни от всей души". (12+).
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. (12+).
02.47 Перерыв в вещании.

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.30 Новости (на баш. яз).**
**07.45 "Йома". (6+).**
**08.15 Тормош. (12+).**
**08.45 "Ҡурай даны". (12+).**
**09.00 Орнамент. (12+).**
**09.15 Письма солдатам. (12+).**
**09.30 Новости СВО (на баш. яз).**
**09.45, 21.15, 06.45 Специальный репортаж. (12+).**
**10.00 "Мультфильмы". М/ф (6+).**
**10.30 Книга сказок. (6+).**
**10.45 Городок АЮЯ. (6+).**
**11.00 Гора новостей. (6+).**
**11.15 Сулпылар-2024. (6+).**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. (6+).**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). (12+).**
**13.15 "Ете егет". (12+).**
**14.00 Дарю песню. (12+).**
**15.15, 18.30, 05.45 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**15.30, 03.15 Дорога к храму. (6+).**
**16.00 Честно говоря. (12+).**
**17.00 Розыгрыш от ТЦ "Радуга". (12+).**
**19.00 Патриот РФ. (12+).**
**19.15 Әлләсе… (6+).**
**20.00 Автограф. (12+).**
**20.30 Атлас Баженова: Башкортостан. (12+).**
**21.00 Дознание. (16+).**
**21.30, 03.45, 06.00 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 02.45 Республика LIVE #дома. (12+).**
**22.45 Концерт Флюры Кильдияровой. (12+).**
**00.30 Спектакль "Великий обольститель". (12+).**
**04.30 Счастливый час. (12+).**
**05.30 История одного села. (12+).**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1445 һижри йыл.*

| Апрель (Рамаҙан - Шәүүәл) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 8 (29) дүшәмбе | 4:31 | 4:31 | 6:31 | 13:30 | 17:55 | 20:05 | 22:06 |
| 9 (30) шишәмбе | 4:29 | 4:28 | 6:29 | 13:30 | 17:56 | 20:06 | 22:09 |
| 10 (1) шаршамбы | - | 4:24 | 6:27 | 13:30 | 17:57 | 20:08 | 22:12 |
| 11 (2) кесе йома | - | 4:21 | 6:24 | 13:30 | 17:59 | 20:10 | 22:15 |
| 12 (3) йома | - | 4:17 | 6:22 | 13:30 | 18:00 | 20:12 | 22:18 |
| 13 (4) шәмбе | - | 4:14 | 6:19 | 13:30 | 18:01 | 20:14 | 22:21 |
| 14 (5) йәкшәмбе | - | 4:10 | 6:17 | 13:30 | 18:03 | 20:16 | 22:25 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Тик Гөлнара ғына ҡыҙыл тап булып сәхнәлә балҡып йөрөй, ә уның ҡулындағы аҡ йүргәктәге сабыйы яңы тормошто сағылдыра. Әммә ошо матур киләсәкте, сафлыҡты, өмөттө һаҡлап ҡала алғанмы кешелек?*



*ПРЕМЬЕРА!*

# ИГЕЛЕКЛЕ БУЛЫУ КӘРӘК...



**Үткән аҙнала Өфөлә театр ун көнлөгө уҙғарылды. Унда республиканың ижади коллективтары "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Кесе Ватан мәҙәниәте" проекты сиктәрендә сәхнәләштерелгән спектаклдәрен күрһәтте. Стәрлетамаҡ театр-концерт берләшмәһенең И. Йомағолов исемендәге Башҡорт драма театры ла сығыш яһаны һәм Флорид Бүләковтың "Гөлнара" повесы буйынса ҡуйылған драманы тамашасы иғтибарына тәҡдим итте.**

Спектаклдә ваҡиғалар үткән быуаттың 30-сы йылдарында бара. Бер ауылға алдынғы ҡарашлы йәш уҡытыусы ҡыҙ эшкә килә. Ауыл кешеләренән ул күп яғы менән айырыла - башына яулыҡ ябынмай, ир-егет алдында сығыш яһарға тартынмай, бөтәһен дә мәктәптә уҡырға саҡыра. Ул яңы урынлашҡан һәм нығына барған совет власының тәғлимәттәрен күңеленә һеңдереп, шуның ҡарамағында тәрбиәләнеп үҫкән. Гөлнара ауылдағы һиллекте боҙа һәм быуатҡа яҡын элек илебеҙҙә барған хәл-ваҡиғалар бер-бер артлы күҙҙән үтә: ҡулаҡ йортонда мәктәп урынлаша, Хоҙай йортонда - клуб, ауылға трактор килә, бар халыҡ дөйөм эшкә йәлеп ителә. Яңы ҡоролош хаһлыҡты йоҡоһонан уятып, бөтә илгә ҡаптан ут ялҡыны кеүек ҡыҙыл байраҡ болғап, әтәс булып ҡысҡырып үҙенә юл яра. Тарих арбаһы алға тәгәрәүен белә: кемдер уның башында бара, кемдәр этеп ҡолатып төшөрөлә, кемдер үҙе тәгәрмәс аҫтында ҡалыусы һайлай... Автор тамашасыға бына ошо тормош ығы-зығыһы, үҙгәртеп ҡороуҙары араһында юғалып ҡалған айырым кешеләрҙең үтә аяныслы яҙмыштары тураһында һөйләй. Беҙгә ул хәлдәрҙе Ильяс исемле йәш кеше бәйән итә: ул ҙур ҡалала белем алып, тыуған ауылына анар емеше алып ҡайтып килә. Гөлнара - анар сәскәһе тигәнде аңлатҡан матур исемде йөрөткән тәүге уҡытыусыһына ул рәхмәтле һәм гранат емешен тәмләтергә теләй.

- Флорид Бүләковтың әҫәрҙәрен мин яратам. Уның пьесалары буйынса булһынмы, проза әҫәрҙәреме - бик ҙур ижади ләззәт менән эшләйем. "Гөлнара" повесы беренсе уҡығанда уҡ оҡшаны, күпмелер ваҡыт ул өҫтәлемдә ятты һәм Стәрлетамаҡ театрына тәҡдим иттем. Был коллектив менән мин беренсе тапҡыр эшләнем. Спектаклде үткән йылдың октябрендә сәхнәгә сығарғайныҡ, бөгөн баш ҡала тамашасыһына ла күрһәттек", - ти "Гөлнара" драмаһының ҡуйыусы режиссеры, инсценировка авторы, Ш. Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты Илсур Ҡаҙаҡбаев.

Ун көнлөк сиктәрендә күрһәтелгән спектаклгә театр тәнҡитсеһе Ирина Шәмсетдинова үҙ баһаһын биреп, былай тине: "Флорид Бүләковтың әҫәре буйынса ҡуйылған спектакль драма булараҡ билдәләнгән, әммә был - трагедия. Илсур Ҡаҙаҡбаев йәмғиәтте борсоған мәсьәләләрҙе сағылдырған, көнүҙәк темаларға ҡурҡмайынса тотона торған режиссерҙарҙың береһе. Бында сәхнә биҙәлеше, яҡтылыҡ, актерҙар - барыһы ла йәшәйеш темаларын, кеше алдында торған һайлауҙар темаһын асырға ярҙам итә. Кешеләргә бер-береһенә ҡарата игелекле булырға кәрәк, тигән фекер бөтә спектакль дауамында ҡыҙыл еп булып һуҙыла. Беҙ кешеләрҙән бер ҙур идея механизмының бәләкәй генә шөрөптәре булып, шул системаның ҡорбандарына әүерелеүен күҙәтәбеҙ. Бөтә донъя ҡара-һоро төҫтә булғанда тик Гөлнара ғына ҡыҙыл тап булып сәхнәлә балҡып йөрөй, ә уның ҡулындағы аҡ йүргәктәге сабыйы яңы тормошто сағылдыра. Әммә ошо матур киләсәкте, сафлыҡты, өмөттө һаҡлап ҡала алғанмы кешелек? Бына ниндәй уйланыуҙарға этәрә был спектакль һәм бөгөн дә йәмғиәтебеҙҙе борсоған һорауҙарға яуап эҙләргә, ҡайһы бер күренештәргә ситтән ҡарарға ярҙам итә. Ғөмүмән, театраль ун көнлөккә йомғаҡ яһап, бөгөнгө башҡорт театры Кеше, кешелеклек темаһын күтәрә һәм кешегә мөрәжәғәт итә, тиергә була. Тамашасылар ауыр темаларға арналған спектаклдәр күбәйеүен билдәләй, тимәк, был - көн талабы", - ти Ирина Фидаил ҡыҙы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Гөлнара" драмаһы Стәрлетамаҡ театр-концерт берләшмәһенең йөҙөк ҡашына әүерелер спектаклдәрҙең береһе булырына иманыбыҙ камил. Сөнки ул мөһим темаларҙы, хәл-ваҡиғаларҙы үҙ эсенә алған һәм тамашасы уны фәһем алыр, хәтерен яңыртыр өсөн ҡарарға тейеш. Был турала театрҙың художество етәксеһе *Илһам Рәхимов* һәм Стәрлетамаҡ театр-концерт берләшмәһенең директоры Харис Әбдрәхимов та телгә алды. Ошо шәп спектаклде килеп күрә алмай ҡалғандар өсөн бер яңылыҡ: йәйгеһен Өфөлә үтәсәк Бөләкәй ҡалалар театрҙары Бөтә Рәсәй фестивале сиктәрендә тағы бер тапҡыр уйнаясаҡтар.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

*ӘЙТКӘНДӘЙ...*

# МИНИСТРҘЫ ҠОТЛАНЫЛАР




**Үткән аҙнала Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡованың ижади кисәһе лә уҙҙы. Уның Дмитрий Крюков етәкселегендәге Башҡортостан дәүләт оркестры һәм билдәле артистар Асҡар Абдразаҡов, Артур Нәзиуллин менән берлектә сольный концертында Башҡорт опера һәм балет театрының тамаша залы тулы булды.**

Әминә Шафиҡованың юбилей кисәһенә илебеҙҙең аҫыл сәнғәт оҫталары ҡотлау һүҙҙәрен видеояҙмаларҙа ебәргән: Рәсәйҙең мәҙәниәт министры Ольга Любимова, Рәсәйҙең халыҡ артисы, донъяға билдәле Денис Мацуев, Рәсәй Композиторҙар союзы рәйесе Александр Чайковский, Мәскәү консерваторияһы ректоры Александр Соколов, билдәле яҡташтарыбыҙ, Рәсәйҙең атҡаҙанған һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Илдар Абдразаҡов, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Владимир Овчинников һәм башҡалар. "Һеҙҙең тормошоғоҙ - мәҙәниәткә һәм сәнғәткә хеҙмәт өлгөһө. Музыкант, профессор, министр - һәр даирәлә Һеҙ лайыҡлы уңышҡа өлгәшкәнһегеҙ. Ижадта юғары өлгәштәр, педагогик эшмәкәрлек һәм Башҡортостандың мәҙәниәт өлкәһендәге төп юғары белем биреү ойошмаһы менән уңышлы етәкселек итеүегеҙ төбәктең мәҙәни үҫеш мәсьәләләрен яҡшы аңлауға һәм Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт министры вазифаһында уңышлы эшләүегеҙгә нигеҙ булып тора", - тип билдәләне үҙенең видео сәләмләүендә Рәсәй мәҙәниәт министры Ольга Любимова.

Ижади кисәнең рәсми өлөшө сиктәрендә Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһенең урынбаҫары Искәндәр Әхмәтвәлиев БР Башлығы Указына ярашлы, Әминә Шафиҡоваға "Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы" тигән маҡтаулы исем бирҙе.

Шулай уҡ Әминә Ивнәй ҡыҙының пианиносы булараҡ ижади үҫеш юлын сағылдырған тарихи видеояҙмалар күрһәтелде. Ә ижад кисәһен ул Ференц Листтың Фортепиано өсөн беренсе концерты менән асты, артабан Асҡар Абдразаҡов һәм Артур Нәзиуллин менән донъя музыкаһының гүзәл әҫәрҙәрен башҡарҙылар. Тамашасылар Әминә Шафиҡованың ҡыҙы, 12 йәшлек пианиносы Камила Бакирова менән бергә "Ике ҡатын-ҡыҙ образы" тигән башҡорт темаһына фантазияны башҡарыуын бик йылы ҡабул итте. Концерт Ференц Листтың "Испан" һәм "Венгр" рапсодиялары менән тамамланды. Пианиносының оҫталығына һоҡланған тамашасы һәр сығышты көслө алҡыштарға күмде.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**9 апрель Премьера! "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова). 16+

**13 апрель "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), музыкаль комедия. 18.00 16+

**14 апрель "Бәхет хаҡы"** (Х. Мәҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**9 апрель "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 12.00 0+

**13 апрель "Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 18.00 12+

**14 апрель "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 12.00 0+

**"Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миннуллин), тамаша. 18.00 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**10 апрель "Аленький цветочек"** (С. Чураева). 12.00, 15.00 0+

**11-12 апрель "Почему весна красна?"** (В. Щербакова). 16.00, 18.00 0+

**13 апрель "Малыш и Карлсон"** (А. Линдгрен). 12.00, 15.00 0+

**14 апрель "Три поросенка"** (Д. Гараева). 12.00, 15.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**11 апрель "Комло фантазия"** концерт. 6+

**"Батл теноров"** концерт. 6+

**12 апрель "Cappella-jeans"** Т. Сәйфуллин исемендәге ДАХК концерты. 6+

**13 апрель Нәзифә Ҡадированың** юбилей бенефисы. 18.00 6+

**"Танцующий орган"** концерт. 18.00 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**8 апрель "Һәйбәт ҡыҙыҡай Лида"** (А. Иваш-кин), трагикомедия. 14.00 12+

**"Ҡыҙҙар килде ауылға"** (Н. Ғәйетбаев), музыкаль комедия. 12+

**9 апрель Премьера! "Метранпаж мажаралары"** (А. Вампилов), трагикомедия. 12+

**11 апрель "Тоғролоҡ"** (М. Ҡунафин), драма. 16+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**"Тапшырылмаған хаттар"** (С. Әбдрәхимова), трагикомедияһы менән Әбйәлил районы буйлап гастролдәрҙә: **9 апрель -** Асҡар, **11 апрель -** Хәлил ауылдарында.

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**12 апрель Премьера! "Если в мире есть любовь"** концерт. 6+

**13 апрель "Аҡ ҡалфаҡ"** (М. Фәйзи), драма. 18.00 12+

**14 апрель Премьера! "Сказка о купце и работнике Балде"** (В. Жуковский), әкиәт. 12.00 0+

**"Ожившая легенда"** Ҡалмыҡстандың "Ойраты" дәүләт бейеү театры гастролдәре. 18.00 0+

## БР Милли музейы

**9 апрель "Уфа - город контрастов"** күргәҙмәһе асыла. 15.00 6+

**11 апрель "Уралдың боронғо яугиры"** сара. 14.00 6+

**"Ротангтан кашпо үреү",** оҫталыҡ дәресе. 14.00 12+

**"12 апрель - Бөтә донъя космонавтика көнө"** күргәҙмәһе асыла. 6+

*Бер генә ваҡиға ла беҙҙә өр-яңы кешене уятыуы мөмкин. Йәшәү, тимәк, һәр көндә яңынан тыуыу.*

*(Антуан де Сент-Экзюпери).*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# КИЛӘСӘККӘ ТӨБӘЛГӘН АҘЫМДАР

**Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылында "Мәрйәм Бураҡаева уҡыуҙары-II" төбәк-ара фәнни-ғәмәли конференция юғары кимәлдә үтте. Был сараның төп ойоштороусылары: Ейәнсура районы хакимиәте, райондың мәғариф бүлеге, "Аҡ тирмә" милли-мәҙәни үҙәге һәм Иҫәнғол ауылының Мәрйәм Бураҡаева исемендәге Башҡорт гимназия-интернаты коллективына ҙур рәхмәт әйтергә генә ҡала. Шулай уҡ конференцияны юғары кимәлдә ойоштороуҙа БР Мәғариф һәм фән министрлығының, БР Мәғарифты үҫтереү институты милли мәғариф буйынса Ресурс үҙәгенең, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының ярҙамы ҙур булыуын да билдәләргә кәрәк.**

Ике йыл рәттән уҙғарылғас, хәҙер был сараның үҙенең һыналған йолалары ла барлыҡҡа килгән. Былтыр ойошторолған "Бураҡаева уҡыуҙары-I" конференцияһы материалдары брошюра булып донъя күргән. "Бураҡаева уҡыуҙары-II" конференцияһының материалдары ла Ресурс үҙәгенең ярҙамы менән нәшерләнәсәк, тинеләр. Ҡунаҡтар "Аманат" этнопедагогика, "Хазина" музейҙары, "Арғымаҡ" медиаүҙәге менән таныштылар, башланғыс класс уҡыусыларының ата-әсәйҙәренең ҡул эштәрен, Сөләймән Абдуллин исемендәге балалар сәнғәт мәктәбе күргәҙмәһен, Иҫәнғол ауылында йәшәгән Салауат Алсынбаевтың боронғо тәңкәләр, эш-яу ҡоралдары, биҙәүестәрҙән торған шәхси күргәҙмәһен оло ҡыҙыҡһыныу менән ҡаранылар. Мәрйәм Бураҡаева ҡатнашыусыларҙың барыһын да видеояҙма аша сәләмләне.

Төп саралар Мәрйәм Бураҡаева тырышлығы менән асылған башҡорт гимназия-интернатында үтте. 90-сы йылдарҙа асылған был белем йортонан бик күп билдәле шәхестәр үҫеп сыҡҡан. Гимназияның үҙенсәлеге шунда: унда уҡытыу-тәрбиә эштәре халыҡ педагогикаһына таянып алып барыла, ошо юғары рухтың һүнгәне-һүрелгәне юҡ. Сарала ҡатнашыусылар "Бураҡаева уҡыуҙары" конференцияһы мәктәптә төп сараларҙың береһенә әйләнергә һәм ошо мәктәп базаһында Республика этнопедагогика үҙәге асырға тигән ҡарар ҡабул итте.

"Урал батыр" эпосын өйрәнеү халҡыбыҙҙың тәрбиә мәктәбенең бөтмәҫ-төкәнмәҫ сығанағы булып тора. Унда йәш ғалимдар үҙ асыштарын яһайҙар. Әлеге конференцияла Инсаф Йәмилевтың ошо мәшһүр ҡомартҡыны балаларға дөрөҫ өйрәтеү буйынса биргән оҫталыҡ дәресе айырыуса әһәмиәтле булды. Режиссер Радмир Дәүләтбәков тарафынан гимназия уҡыусылары менән Рауил Бикбаевтың "Халҡыма хат" поэмаһын сәхнәләштереүе лә хуплауға ғына лайыҡ.

Был сараны төп ойоштороусыларҙың береһе "Аҡ тирмә" милли-мәҙәни үҙәге рәйесе Рәйсә Күзбәкова сығыштарҙың бик йөкмәткеле булыуын билдәләне: "Илдең, халыҡтың киләсәген үҫеп килеүсе йәш быуын билдәләй, шуға күрә балаларға дөрөҫ тәрбиә биреү кешелек тарихында һәр ваҡыт иң мөһим бурыстарҙың береһе һаналған. Бөгөн балаларға ниндәй тәрбиә бирәбеҙ, киләсәгебеҙ шулай буласаҡ. Был бик мөһим, актуаль мәсьәлә. Бында уҡытыусылар үҙҙәренең эштәрендә халыҡ педагогикаһын нисек ҡулланалар, халыҡ педагогикаһына таянып нимә эшләп була, шул турала фекер алышалар",- тине ул.

Тағы ла шуны өҫтәргә кәрәк, яңы уҡыу йылынан "Тормош һабаҡтары" мәктәп программаһына индереләсәк. Был турала республиканың мәғариф һәм фән министры урынбаҫары Әлфиә Ғәлиева хәбәр итте. Белеүебеҙсә, "Тормош һабаҡтары" заманында тәрбиә, рухи үҫеш өсөн һәр саҡ ҙур ярҙам булды. Шуға ла мөһим яңылыҡты конференцияла ҡатнашыусылар алҡышлап ҡаршыланы.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠУНАҒЫН ЯРАТМАҺА...

## хужа бесәйен әрләр

Бер генә ваҡиға ла беҙҙә өр-яңы кешене уятыуы мөмкин. Йәшәү, тимәк, һәр көндә яңынан тыуыу.

**(Антуан де Сент-Экзюпери).**

Беҙ булмаған урында яҡшы. Үткән тормошта беҙ юҡ, шуға ла ул беҙгә иң яҡшыһы булып тойола.

**(Антон Чехов).**

Бөтә донъя - театр. Ундағы ирҙәр ҙә, ҡыҙ-ҡатындар ҙа - актерҙар. Уларҙың һәр береһе йә сәхнәгә килеп сыға, йә сәхнәнән сығып китә. Һәр береһе төрлө роль уйнай...

**(Вильям Шекспир).**

Йәшәүҙең ҡәҙерен белмәгәндәр йәшәүгә лайыҡлы ла түгел.

**(Леонардо да Винчи).**

**Тағы бер аҡыл: "Кеше иң күп эшләгән гонаһ ниндәй?" тип һораған уҡыусылары Уҡытыусынан.**

**- Кешеләр эшләгән иң киң таралған гонаһ - ул уларҙың үҙ-үҙенә хыянат итеүе, - тип яуаплаған Уҡытыусы. - Кешеләр быны меңәрләгән ысул менән тормошҡа ашыра. Улар үҙҙәренән үҙҙәре баш тарта һәм башҡалар тарафынан йотола. Был нисек шулай килеп сыға һуң? Кешеләр һәр ваҡыт көслөрәк, аҡыллыраҡ, ҡеүәтлерәк, тип кемделер алға сығара. Улар һәр ваҡыт ниндәйҙер абруйға Аллаға табынған кеүек табына, уның һәр һүҙен ысынбарлыҡ итеп ҡабул итә. Улар шулай үҙҙәренә кумир уйлап сығара ла, уларҙың аяғына йығыла. Улар ниндәйҙер сәйәси система, йәмәғәт ойошмалары төҙөй һәм уларға тоғро хеҙмәт итә. Улар сит идея өсөн һуғышырға, көрәшергә әҙер тора. Улар шулай итеп үҙҙәрен үлемгә ебәргән кеше уңышлыраҡ, байыраҡ йәшәһен өсөн ғүмерҙәрен бирергә лә әҙер тора. Ә бит меңәрләгән кешене үҙенә табындырған, төрлө көрәш һәм һуғыштарҙы уйлап сығарғандар ике маҡсатты ғына күҙ уңында тота: аҡса һәм власть. Бындай хыянаттың ҡурҡынысы шунда: үҙ-үҙенән баш тартҡан, үҙлеген ситкә ташлаған кеше шул тиклем алыҫ китеп өлгөрә, хатта әйләнеп ҡайтыу мөмкин булмай...**

**Һеҙ ҙә, уҡыусыларым, башҡалар кеүек, ҡасандыр сит әләм аҫтында хәрәкәт иттегеҙ. Әле бына үҙлегегеҙгә яңынан әйләнеп ҡайтыу юлындаһығыҙ. Үҙлегегеҙгә әйләнеп ҡайтҡас, башҡаларға ла үҙ-үҙҙәренә ҡайтырға ярҙам итегеҙ. Һәр гөл үҙ сәскәһен атырға, үҙенең генә хуш еҫен таратырға тейеш...**

**Ошо һүҙҙәрҙән һуң Уҡытыусы доға ҡылырға ултыра. Уҡыусылары уның ошо һүҙҙәрен генә ишетә: "Бар гөлдәр ҙә сәскә атһын берүк..."**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҺҮҘ ОҪТАЛАРЫ...

**2024 йылда "Һүҙ оҫтаһы-2024" республика конкурсы Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына - 105, ә бөйөк рус шағиры Александр Пушкиндың тыуыуына 225 йыл тулыуға арнала.**

Республиканың Театр эшмәкәрҙәре союзы ойошторған конкурс 6 майҙа Бәҙәр Йосопова исемендәге Актерҙар йортонда 16-сы тапҡыр уҙғарыла. Конкурста профессиональ театр белеменә эйә булған, дәүләт театр коллективтарында эшләгән актерҙар, шулай уҡ театр факультеттарының сығарылыш курстары, сәнғәт һәм мәҙәниәт уҡыу йорттары бүлексәләренең студенттары ҡатнаша ала. Ҡатнашыусыға сығыш яһау өсөн рус, башҡорт йәки татар телдәрендә шиғыр йәки проза әҫәрен яттан һөйләргә әҙерләнергә кәрәк. Ғаризалар 25 апрелгә тиклем Башҡортостан Театр эшмәкәрҙәре союзының электрон почтаһына ҡабул ителә: stdrb1938@mail.ru.

# ҒАИЛӘ МЕНӘН...

**"Библиотөн-2024" Бөтә Рәсәй акцияһы быйыл 20 апрелдә үткәрелә. Ғаилә йылында акцияның темаһы - "Бар ғаилә менән уҡыйбыҙ", тип хәбәр итә Рәсәй Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәте. Сараның координаторҙары булып Рәсәй дәүләт китапханаһы һәм Рәсәй дәүләт балалар китапханаһы сығыш яһай.**

"Библиотөн" - илдең төп мәҙәни ваҡиғаларының береһе, ул уҡыусыларға хәҙерге заман авторҙары менән осрашырға, ваҡытты ҡыҙыҡлы итеп үткәрергә, лекцияларҙа һәм оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнашырға, шулай уҡ классиканы яңыса асырға мөмкинлек бирә. Әлеге акция 13 йыл уҙғарыла. Былтыр "Библиотөн" илдең 89 төбәгендә 6 мendән ашыу учреждениены берләштерҙе.

ТЕЛҺӨЙӘР

# ТЕШ БИҘӘГЕ - ЯЛТЫР ҮҢ

**Ейәнсура районында Башҡорт Үргене тип аталған ауыл бар. Үрген нимәне белдерә, тигән һорау ҡуя берәү интернет селтәрендә. Был ауыл кешеләрен борсоп тормай, ҡул аҫтындағы һүҙлеккә күҙ һалдыҡ.**

**Үрген.** Йәш үҫенте, йәш ботаҡ тураһында һүҙ барһа, "үрген" һүҙен ҡулланыу урынлы. Мәҫәлән: *Гөл үргене. Йүкәнең яңы үргене күренә. "Үрген ағастар" иһә "йәш ағастар" мәғәнәһенә эйә. Өфөлә үрген шыршылар ултыртылды.*

**Үргенләү.** "Үргенләү" тигәндә, үҫемлектәрҙең ныҡ үҫеп китеүе аңлашыла. Мәҫәлән: *Сирендәр үргенләп үҫкән.* "Үргенләү" һүҙенең тағы ла "ут ялмап алыу" тигән мәғәнәһе бар. Миҫал: *Мейестәге утынға ут тиҙ үргенләне.*

**Үңгәләү.** "Үңгәләү", "иҫ үңгәләү" - тимәк, аңды юғалтыу. Мәҫәлән: *Яман еҫтән үңгәләп ҡуймағыҙ.*

**Үң. 1.** Беҙ уны эмаль тип йөрөтәбеҙ. Ә туған телебеҙҙә борон-борондан "үң" тигән үҙ һүҙебеҙ бар. Миҫалға: *Тештең үңе. Аш-һыуҙы үң йүгертелгән һауытта әҙерләү.* **2.** "Үң" тип шулай уҡ аяҡ табанындағы, үксәләге ҡатҡан тирене атайҙар. Мәҫәлән: *Яланғас аяҡ йөрөргә яратҡас, табан үңгә әйләнгән. Үңде йомшартыу өсөн төрлө майҙар ҡулланыла.*

**Үңләү.** "Үңләү" тигәндә, берәй әйберҙе үң, йәки, эмаль менән ҡаплауҙы аңлайбыҙ. Миҫалға: *Көршәкте үңләү. Үңләнгән ҡумта.*

**Шулай итеп, теш биҙәге - ялтыр үң, тел биҙәге - йомарт һүҙ, ти халыҡ. Ошондай матур һүҙҙәребеҙҙе, ул һүҙҙәр төбөндәге алтын аҡылды онотмайыҡ.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 45-се һанда).**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 24013

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
4 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы –
**ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 111651

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.